*Эрнест Хемингуэй "Бәхет - ул ныҡлы һаулыҡ һәм насар хәтер" тигән. Ысынлап та, беҙ йыш ҡына үткәндәге уңышһыҙлыҡтар, үпкәләүҙәр, ҡурҡыуҙар һәм тулҡынланыуҙар тураһындағы хәтирәләр менән йәшәйбеҙ. Әйҙәгеҙ, Яңы йылға тиклем көндәлектәрҙән был хәтирәләрҙе сығарып ташлайыҡ, Яңы йылда тормошобоҙҙа ла, күңелдәрҙә лә барыһы ла көйләнәсәк һәм яҡшырасаҡ, тигән өмөт, ышаныс менән йәшәйек.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№52 (470)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Урал батыр ҡотланы...**

бөтөн республика балаларын...



4

**Һүҙҙән эшкә күсәйек!**



6-7

**Ахырызаман менән янауҙарҙан ҡурҡып...**



8-9 бөгөнгө ғүмеребеҙҙе йәшәргә онотмайыҡ

**Һине ҡарап, "Байыҡ",**

күңелдәр ҡалды байығып...



11

14 ТВ-программа


ӘЙҘӘГЕҘ...

## ИХЛАС ҺҮҘГӘ ЙӨРӘКТӘРҘЕ АСАЙЫҠ!

**Баҫмабыҙҙың үтеп барған йылдағы һуңғы һанын ҡулығыҙға алаһығыҙ. Был һанда беҙ һеҙгә, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, етеп килгән Яңы йыл менән ихлас ҡотлауҙарыбыҙҙы, мөғжизәләр көтөүҙән туҡтамай, хыял ҡанаттарын талдырмай, Уңыш ғәли йәнәптәрен йәнәшәгеҙҙән һис ебәрмәй, Сәләмәтлек тигән ҡорос арғымаҡты ауыҙлыҡлап алып, Мөхәббәт, Бәхет ҡоштарын да яурындарығыҙға ҡундырып, өмөттәргә, аҡ нурға, иманға сорналып йәшәгеҙ, тигән изге теләктәребеҙҙе оҙатып ҡалабыҙ.**

Беҙ шулай уҡ көнәлгәре БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың, баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың,Өфө ҡала Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллиндың ҡотлауҙарын һәм изге теләктәрен дә еткерәбеҙ һеҙгә. Әйткәндәй, ил, республика башлыҡтарының төрлө байрамдар, Яңы йыл менән ҡотлауҙары матбуғат баҫмаларында ташҡа баҫыла, радио-телевидение тулҡындарында яңғырай икән, тимәк, улар һәр йортҡа, һәр кем адресына төбәлә, тигән һүҙ. Был сығыштарҙы кемдер көтөп ала, ә кемдер ул ҡотлауҙарҙың үҙенә лә төбәлгәнен башына ла индереп сығармай. Бер танышым ошоларҙы һөйләп көлдөргәйне: "Былтыр Яңы йыл алдынан урамда бер танышымды осраттым да, уға шулай тинем: "Яңы йыл менән Президент ҡотланы әле..." "Китсе..."- тип аптырап китте был. "Эйе, Президент һине лә ҡотланы..."- тинем тегегә. "Ул мине ҡайҙан белһен, ти. Кит, юҡты һөйләмә әле",- ти был. "Ниңә юҡты һөйләйем, ти. Бына, ышанмаһаң, ҡара..." - тип, республика гәзиттәренең береһендәге Президент ҡотлауын күрһәтәм тегегә. "Бына бит, барлыҡ республика халҡын ҡотлайым, тигән. Һин республика халҡының бер вәкиле түгелме ни?" - тим. Көлөп ебәрҙе танышым. Кәйефе күтәрелеп китте. Беҙ бына шулай үҙебеҙгә төбәлгән һүҙҙе - ҡотлауҙы, хөрмәтте, йылы һүҙҙе шәйләмәйбеҙ шул..."

Хаҡ әйтте танышым. Беҙ, ысынлап та, үҙебеҙгә төбәлгән изге теләктәрҙе, ихлас ҡотлауҙарҙы йыш ҡына йөрәккә алып тыңламайбыҙ. Ғөмүмән, йөрәктәребеҙ асыҡ түгел ихлас, ябай ғына яңғыраған һүҙҙәргә. Ҡолаҡтар ишетә, аңға барып етмәй... Хәйер, байрам алдынан бындай ишараларҙы ҡалдырып торайыҡ та... Әйҙәгеҙ, иғтибарығыҙҙы уҙып барған йылдың һуңғы һанындағы ҡайһы бер әйҙәләү-фекерҙәргә йүнәлтәйек. Эйе, был юлы һеҙ **"Әйҙәгеҙ..."** тигән өндәшеү менән башланған байтаҡ сығыштарға юлығырһығыҙ гәзитебеҙ биттәрендә. Ысынында, ул әйҙәләүҙәр ошо йылдар эсендә, 10 йыл буйы, ишаралап, кинәйәләп кенә "Киске Өфө" уҡыусылары аңына тоҫҡала килде. Әле бына Яңы йыл алдынан уларҙы аныҡ һәм ҡыҫҡа ғына итеп, "Әйҙәгеҙ..." тигән саҡырыу рәүешенә күсереп тәҡдим итәбеҙ. Бәлки, ун йыл буйы һөйләнгән һүҙҙәребеҙ ошо ҡыҫҡа ғына, күҙгә төртөп килеп ингән әйҙәләүҙәр аша нығыраҡ һеңер күңелгә, нығыраҡ тәьҫир итер аңыбыҙға, тип уйланыҡ. Ә инде беҙҙең мәҡәләләрҙә, әңгәмәләрҙә ошо әйҙәләүҙәрҙе электән үк аңғарғандар ысынлап та аңлы кешеләр булыр. Уларҙың ишлерәк булыуын теләйбеҙ. Үҙенә төбәлгән һүҙгә һәр кемдең йөрәге асыҡ булыуын теләйбеҙ.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

АФАРИН!

# ГЕЛ ЙЫЛМАЙЫП ЙӨРӨЙӨМ,

## шуға дуҫтарым күп минең...

**Яңы йыл алдынан ниндәйҙер эштәргә йомғаҡтар яһап, киләһе йылға пландар ҡороу кеүек матур йола ла бар. "Тамыр" студияһының бәләкәс йырсылар араһында үткәргән "Сулпылар" музыкаль фестивале лә тап ошо мәлдә үҙенең йыл еңеүселәрен билдәләй. Йылдан-йыл киң билдәлелек яулай барған был бәйгелә быйыл республиканың төрлө район һәм ҡалаларынан 250-гә яҡын ҡыҙ һәм малай ҡатнашҡан. Уларҙың 24-е финалға сығыу бәхетенә эйә булһа ла, "Еңеүсе" тигән дан исем тағы ла һирәктәргә генә эләкте. Ярай, әйҙәгеҙ, "Сулпылар", ундағы һәләтле йырсылар һәм, әлбиттә, яҡынлашып килгән Яңы йыл байрамы тураһындағы фекерҙәре менән телефестиваль ҡатнашыусыһы Өфө егете, Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының өсөнсө синыф уҡыусыһы Руслан ӘМИНЕВ уртаҡлашһын әле.**



"Сулпылар" бәйгеһендә ҡатнашыусы балалар. (Дауамы 10-сы биттә).

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# СТУДЕНТ ҠУЛЫНА ЭШ:

## шыршы һатырға була



**Күптәрҙең көтөп алған байрамы ул Яңы йыл. Ябалаҡлап яуған аҡ ҡар, ерҙең өҫтөн ҡаплаған аҡ балаҫ беҙҙең күңелдәргә лә һиллек, тыныслыҡ, өмөт һәм ышаныс алып килә кеүек. Айырыуса ҡыштың тәүге айы яҡын миңә, сөнки нәҡ декабрҙә үткән йылға йомғаҡтар яһала, киләсәккә яҡты хыялдар ҡорола һәм нәҡ ошо айҙа беҙ сихри һәм тылсымлы Яңы йыл байрамын ҡаршыларға әҙерләнәбеҙ.**

Тик студент өсөн декабрь ниндәйҙер мөғжизәләр көтөү генә түгел, ә ҡышҡы сессияны асыу "тантанаһын" үҙ эсенә алған һәм етеҙ, йылғыр, сос студентҡа аҡса эшләп ҡалыу мөмкинлеге лә биргән ай ул. Мәҫәлән, декабрь урталарынан ҡаланың төрлө урындарында шыршы һатыуҙар ойошторола башлай. Эшҡыуарҙар шыршыны питомниктан алып килеүен килә, ләкин тиҫтәләгән йөҙ ағасты һатырға ла кәрәк бит әле. Нәҡ ошо ваҡытта студент ярап ҡала ла инде. Улар, беренсенән, "осһоҙораҡ" эшсе ҡулдар, икенсенән, йәшлектәренә барып, һыуыҡта ла, буранда ла урамда баҫып торорға әҙер.

Былтыр, мәҫәлән, бер сәғәт эшләгән өсөн 500-550 һум аҡса түләнеләр, ә көнөнә кәмендә өс сәғәт эшләгәндә лә, һинең көндәлек килемең арыу ғына икәнлеген аңлауы ҡыйын түгел. Ғөмүмән, арыу ғына аҡса эшләргә була байрам алды ығы-зығыһынан файҙаланып. Быйыл иһә көнөнә 650-700 һум түләргә вәғәҙә иткән фирма хаҡында хәбәрҙармын һәм, һис шикһеҙ, унда барып аҡса эшләйәсәкмен.

Минең менән бергә бер-нисә дуҫым да үҙҙәрен шыршы һатыусы ролендә һынап ҡарарға йыйына, тимәк, байрам ҡаршыларға һәм ата-әсәйгә, туғандарға, һөйгәндәргә бүләк алырға беҙҙең кеҫәлә аҡса буласаҡ, тигән һүҙ. Ә кемгәләр бүләк эшләү, айырыуса үҙ көсөң менән табылған аҡсаға алынған бүләкте тапшырыу, икеләтә ҡыуаныслы.

**Студент Зөлфәрҙең һөйләгәндәрен Наҙгөл САФИУЛЛИНА тыңланы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЕҢЕҮСЕЛӘРҘЕ БИЛДӘЛӘЙЕК -

## аҫыл һүҙгә аҫыл баһа бирәйек!



**Һәр йыл аҙағында гәзитебеҙҙе аҫыл һүҙе, алтын фекере менән күтәрмәләгән, баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан авторҙарыбыҙҙың исемдәрен атай торған йолабыҙ бар. Шул йоланы атҡарып, йыл лауреаттарын билдәләйек.**



**Әғләм Шәрипов**, Бөрйән районынан, Башҡорт бал ҡортон өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү эштәр менән шөғөлләнеүсе ғалим - 6-19-сы һандарҙа баҫылған "Солоҡсолоҡ шөғөлө тарихта һәм... Бөрйәндә генә ҡалды" тигән яҙмалары өсөн.



**Вәкил Хажин**, педагогика фәндәре кандидаты - 39-46-сы һандарҙа "Телгенәм-бергенәм" рубрикаһындағы мәҡәләләре өсөн... 



**Зөлфиә Ханнанова**, шағирә - 4-се, 19-сы, 34-се һәм 52-се һандағы рухиәт өлкәһенә арналған мәҡәләләре өсөн.



**Фәүзиә Мөхәмәтшина**, журналист - гәзитең һәр һанында "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһын алып барғаны, һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә ҡағылышлы башҡа мәҡәләләре өсөн.

### С. Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы

**Белеүегеҙсә, баҫмабыҙҙа күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булынды. Конкурс киләһе йылда ла дауам итәсәк. Тик шундай теләгебеҙ бар: авторҙар үҙ әҫәрҙәрендә заман һәм заманға ҡулайлашҡан, аҡыллы, көслө, лайыҡлы йәшәгән башҡорт кешеһе образын - бөгөнгө көн геройын һынландырыһын ине. Был, әлбиттә, ҡәтғи шарт түгел. Ә шулай ҙа... Сәхнәлә, китаптарҙа, тормошта бөгөнгө көн геройы, лидерҙар күренмәй. Уларҙы беҙ әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә булһа ла тыуҙырайыҡ. Ә тормошта беҙ һәр ваҡыт китаптарҙа яҙылған геройҙарға тиңләшергә тырышабыҙ. Шулай итеп, быйылғы лауреаттар:**







**Хәлил Һөйөндөков**, Сибай ҡалаһында йәшәүсе отставкалағы подполковник - 39-45-се һандарҙа баҫылған "Шәүрә" ҡиссаһы, "Монолог" рубрикаһындағы сығыштары өсөн.

**Мәүлит Ямалетдинов**, Учалы ҡалаһында йәшәүсе яҙыусы - "Көл күмәсе" (10-сы һанда) һәм "Эльза" новеллаһы (16-сы һанда) өсөн.

**Урал Мостафин**, Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе яҙыусы - "Өйәр ҡорбаны" (37-се һанда) һәм "Бурҙар" (38-се һанда) хикәйәләре өсөн.

### "Алдар менән Ерәнсә" ҡоро

Был рубрикабыҙ ҙа даими конкурс булараҡ дауам итеп килә ине. Әммә быйыл был рубрикаға бик һүлпән яҙыштылар. Әбйәлил районы Байым ауылынан **Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова** ғына "Башҡорт юморы" китабына үҙ өлөшөн индереүҙе дауам итә. Шулай уҡ Әбйәлил районы Үтәгән ауылынан **Рамаҙан Йәһүҙинды** һәм Сибайҙан **Гөлнара Ибраһимованы** билдәләп үтке килә. Уларҙың өсөһөнә лә редакциянан иҫтәлекле бүләк.

### "Айыҡ туй сценарийы" конкурсы

Белеүегеҙсә, "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә беҙҙең гәзит тә "Айыҡ туй сценарийы" конкурсы иғлан иткәйне. Редакцияға байтаҡ сценарийҙар килде һәм баҫылып сыҡты, баҫыласаҡ. Сөнки, ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, "Айыҡ ауыл" конкурсы киләһе йылда ла дауам итәсәк. Ә был юлы беҙ Ейәнсура районынан **Нурия Ҡуныҫбаеваны**, Баймаҡтан **Нәсимә Солтанованы**, Мәләүездән **Рәзилә Ҡотлогилдинаны** еңеүсе тип иғлан итәбеҙ.

### Авторҙарыбыҙға рәхмәт!

Республикабыҙҙың төрлө райондарынан, ҡалаларынан гәзитебеҙгә яҙышып торған авторҙарыбыҙға - Мәрйәм Бураҡаева, Айһылыу Ғарифуллина, Риф Мифтахов, Гүзәл Иҫәнгилдина, Радик Өмөтҡужин, Иҙрис Ноғоманов, Юныс Әхмәҙиев, Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова, Фәүзиә Яхина (Усманова), Флора Бикембәтова, Нурия Ҡуныҫбаева, Әхәт Ишбулатов, Азат Ярмуллин, Рәшит Шәкүр, Тимер Ниәтшин, Мөҙәрис Багаев, Әлфиә Батталова, Әмир Сәйғәфәров, Фатима Һибәтова, Сәмерхан Ҡунафин, Гөлшат Хажиева-Нурдәүләтова, Закирйән Әминев, Лена Абдрахманова, Фәрзәнә Аҡбулатова, Көнһылыу Ҡотлобаева, Сәбилә Сөләймәнова, Самат Бикбирҙин, Рәүеф Бикташев, Ҡасим Янбаев, Ғайса Ишмөхәмәтов, Сәриә Ғарипова, Юлай Ғәйнетдинов, Заһир Дәүләтбирҙин, Әхәт Сәлихов, Эльза Мөхәмәҙиева, Мәхмүт Хужин, Миләүшә Ҡаһарманова, Гөлнара Ибраһимова, Рамаҙан Йәһүҙин, Ризван Хажиев, Спартак Ильясов, Таңһылыу Баһауетдинова, Рәйлә Наҙарғолова, Әлфиә Йомағужина, Фәриғә Күҫәковаларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты, сәмде, ғәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ.

**Лауреаттарыбыҙҙы, еңеүселәребеҙҙе, барлыҡ авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ! Күңелдәрегеҙгә рух, ҡот, тәнегеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев РФ Федераль Йыйылышына дүртенсе Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй сәйәсәте системаһында комплекслы үҙгәртеп ҡороу үткәрергә, атап әйткәндә, төбәктәр башлығын тура тауыш биреү ярҙамында һайларға, партияларҙы ябайлаштырылған тәртиптә теркәргә, Дәүләт Думаһына һайлауҙар системаһын үҙгәртергә тәҡдим итте. Дмитрий Медведев Дәүләт Думаһына һайлау системаһын да үҙгәртергә, 225 округ буйынса пропорциональ вәкиллек индерергә тәҡдим итте. Уның фекеренсә, был сара атҡарылғанда һәр биләмәнең парламентта үҙ вәкиле буласаҡ.

✓Башҡортостанда Берҙәм тауыш биреү көнөндә - 4 мартта Рәсәй Федерацияһы Президенты һайлауҙары менән бергә муниципаль һайлауҙар үтәсәк. БР Үҙәк һайлау комиссияһы хәбәр итеүенсә, республиканың һигеҙ ҡала округында - Өфөлә, Ағиҙелдә, Күмертау, Нефтекама, Октябрьскийҙа, Салауат, Сибай һәм Стәрлетамаҡта урындағы үҙидара органдары - ҡала Советтарына һайлауҙар үтәсәк. Дөйөм алғанда, 192 мандат алмаштырыласаҡ. Ошо уҡ көндө туғыҙ ҡала биләмәһе Советына (165 бер мандатлы округ буйынса) һәм 30 ауыл биләмәһе Советына (294 округ буйынса) һайлауҙар үтәсәк. 69 округ буйынса ауыл биләмәләре Советына өҫтәмә һәм ҡабаттан һайлауҙар үтәсәк.

✓Башҡорт дәүләт университеты - юғары һөнәри белем биреүсе дәүләт мәғариф учреждениелары стратегик үҫтереү программаларына ярҙам итеү буйынса конкурста еңеүсе 55 вуз иҫәбендә. Конкурсты РФ Мәғариф һәм фән министрлығы үткәрҙе. Стратегик үҫтереү программаларын тәҡдим иткән 248 вуз конкурста ҡатнашыуға хоҡуҡ алғайны. БашДУ илдең 20 йылға уҡыу йорто менән бер тиң һөҙөмтә күрһәтеп, "Классик университеттар" номинацияһында еңеү яуланы. Еңеүселәргә өс йыл дауамында (2012-2014 йылдарҙа) субсидия формаһында йылына 100 миллион һумға тиклемге күләмдә федераль бюджеттан финанслау ҡаралған.

✓2012 йылдың ғинуарындағы байрам һәм ял көндәрендә Башҡортостан пенсионерҙары пенсияһыҙ ҡалмаясаҡ, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе матбуғат хеҙмәтендә. Почта хеҙмәткәрҙәре уларҙы 3 - 9 ғинуарҙа таратасаҡ. 10 ғинуарҙан пенсиялар әүәлге тәртиптә биреләсәк. Социаль түләүҙәрҙе лә Пенсия фонды ошо уҡ ваҡытта бирергә ҡарар иткән. Кредит ойошмаларына аҡса килешеүҙә билдәләнгән ваҡытта, 12 ғинуарҙан башлап, күсереләсәк.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УЙЛАНАЙЫҠ!

## Яҙмышыбыҙ һәм иманыбыҙ тураһында

**Был фани донъяла бер кеше лә уйһыҙ тормай. Мине лә уйландырған әйберҙәр бихисап. Яңы йылға аяҡ баҫҡанда айырыуса борсоған нәмәләр ошоларҙыр.**

Күңелемдә әсәйемдең доғаларын йөрөткән, бар кешеләрҙе лә иманлы итеп күрергә теләгән кеше булараҡ, мине иң тәүҙә, әлбиттә, халҡыбыҙ араһында көндән-көн нығыраҡ тамыр йәйә барған эскелек проблемаһы борсой. Әллә күпме фажиғәләрҙең, емерелгән яҙмыштарҙың башында эскелек тора. Эскән кешенең иманы булмай, ә иманһыҙ кешенән бар нәмәне лә көтөргә була: хыянатты ла, бәйелһеҙлекте лә, аҙғынлыҡты ла, ҡот осҡос енәйәтте лә.

Һуңғы йылдарҙа матур бер күренеш күҙәтелә. Әлхәмдүлиләһ, йәштәребеҙ күпләп иманға килә. Ундайҙар хәмер ҡулланмай. Әммә уларға атай-әсәй, олатай-өләсәй булырҙай кешеләр һаман арына алмай был насар ғәҙәттән. "Килен булып төшкәндә минең киленем дә бер тамсы ла хәмер йотмай ине ул, уны эсергә үҙем өйрәтеп алдым!" - тип күкрәк һуғып маҡтанған әллә нисә ханымды беләм. Үҙ балаһының, үҙ ғаиләһенең, үҙ халҡының киләсәген балта күтәргәнен аңламай микән ни ул атаәсәләр?..

*Ил өҫтөндә иң яманы:*
*Эскән бисә,*
*Ирҙән-иргә, ҡулдан-ҡулға*
*Күскән бисә.*
*Ил өҫтөндә иң яманы:*
*Эскән ирҙәр,*
*Ҡатын-ҡыҙҙың фиғеленә*
*Күскән ирҙәр.*
*Ил өҫтөндә иң яманы:*
*Эскән бала,*
*Белегенә ағыу ҡаҙап*
*Үҫкән бала.*
*Эсһә бисә, эсһә ирҙәр,*
*Эсһә бала,*
*Был донъяла ҡыуанырлыҡ*
*Ниҙәр ҡала?!*

Әсә булараҡ, мине, әлбиттә, балаларымдың киләсәге борсой. Улар ниндәй илдә үҫер, ниндәй телдә һөйләшер? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, яңы раҫланған Мәғариф федераль дәүләт стандарттарында туған телдәр уҡытылыу ҡаралһа ла, берҙәм дәүләт имтихандарына һылтанып, урыҫ булмаған милләт балалары башлыса туған тел урынына рус телен һайлай. Бөгөнгө йәмғиәт шарттарында туған телде өйрәнеүҙе артыҡ әйбер һанап, туған телебеҙҙән ваз кискән милләттәштәрем борсой мине. Хатта саф башҡорт ауылдарында ла атаәсәһен "папа, мама", тип үҫкән балалар бар! Ә бит тап туған тел - халҡыбыҙҙың коды. Тел бөтһә, милләтебеҙ ҙә бөтә. Һәм был беҙҙең милләткә генә лә ҡағылмай. Баш ҡалабыҙҙа йылдан-йыл күбәйә барған сит ил телдәрендәге алтаҡталарға иғтибар иткәнегеҙ барҙыр. Бөйөк рус теленең үҙенә лә шул уҡ ҡурҡыныс янай бит. Яңыраҡ эштән ҡайтып барғанда шундай күренешкә тап булдым. Алдан өс-дүрт йәшлек малай йүгерә. Арттан хафаланып өләсәһе ҡысҡыра: "Джери, сынок, не торопись!"- тигән була. Йөрәгем өҙөлөп төшә яҙҙы. Америка йәнһүрәтендәге сыҫҡандың ҡушаматын исем итеп биргәндәр бит балаға! Хәҙер урыҫтар ҙа балаларына Виолетта, Джонни кеүек урыҫ менталитетына хас булмаған исемдәр ҡушырға тырышҡан була шул. Кемгә эйәрәбеҙ, ҡайҙа китеп барабыҙ? Был һорау мине "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы комиссияның Терминология төркөмө етәксеһе булараҡ та ҙур борсоуға һала. Ошо көндәрҙә бер танышым шылтырата: "Башҡалала мәҙәниәт усаҡтарында башҡорт телендә уҙҙырылған берәй Шыршы байрамы бармы ул? Ейән-ейәнсәрҙәремде алып барырға ине." Ғәрлегемдән ятып үлерлек, әммә мин шылтыратып һорашҡан Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында ла, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ла, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында ла, ғөмүмән, бер ерҙә лә, башҡорт телендә балалар өсөн тамаша булмай сыҡты. Ярар ҙа, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театрында тамашасылар заказы буйынса айырым көндәрҙә башҡорт телендә Р. Киплингтың "Маугли" спектакле уйнала. Ә бына "Нур" Өфө дәүләт татар театрында татар телендә һөйләшкән балалар "Мажаралы Яңы йыл" исемле тамаша ҡарап ҡыуанасаҡ! Был йәһәттән туғандаш халыҡҡа "Афарин!" тиергә генә ҡала. Ә беҙҙекеләргә, ошо ерҙең асаба халҡына, башҡа халыҡтарҙан ғәһем алаһы, уйланаһы урын бар. Хәйер, уйланаһы ғына түгел, ең һыҙғанып эшләйһе лә эшләйһе әле беҙгә!

Яҙыусылар союзы ағзаһы булараҡ, ижади йәштәрҙең киләсәге хафаландыра. Рәмил Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбизулла Зарипов, Ғилман Ишкинин кеүек ниндәйен шәп, һәләтле егеттәребеҙ китеп барҙы арабыҙҙан! Күпме матур әҫәрҙәр яҙылмай ҡалды! Ҡалғаны-наларының да ҡанаттарын бәрөп һындырырға торған әҙәбиәт әһелдәре бар. Беҙ хөрмәт менән ҡараған, әҫәрҙәрен уҡып үҫкән әҙәбиәт әһелдәре! Мин мартта уҙасаҡ Яҙыусылар съезынан күпте көтәм. Һайланасаҡ яңы рәйесебеҙ үҙ эргәһенә инициативалы, һәләтле йәштәрҙе туплай алырлыҡ кимәлдә булһын ине. Ҡәләмдәш-тиҫтерҙәрем тураһында йыш уйланам: Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Әхмәр Үтәбай, Фәрзәнә Аҡбулатова, Салауат Әбүзәр, Азамат Юлдашбаев, Айһылыу Ғарифуллина, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина, Светлана Чураева, Дамир Шәрәфетдинов, Мөнир Ҡунафин, Лилиә Сәғиҙуллина, Илдус Фазлетдинов - һәммәһе лә күңелемә яҡын, һәммәһе лә төпкә егелеп эшләрлек ижадсылар.

*Беҙме инде бошмаҫ әҙәм,*
*Беҙме инде ҡырағай,*
*Араларҙа берҙәмлек юҡ,*
*Барыбыҙ тырым-тырағай.*
*Араларҙа берҙәмлек юҡ,*
*Ә ғүмер ҡыҫҡа ғына:*
*Бер килеп быуа алҡымдан,*
*Бер килеп башҡа һуға.*
*Бер-беребеҙҙән ситләшкәс,*
*Кемгә арҡа терәйһең?..*
*Илашыуҙан ниндәй файҙа*
*Алып киткәс берәйһен…*
*Ғүмер уҙа… Вакыт тигән*
*Машина китеп бара,*
*Тырым-тырағай йәштәрҙең*
*Башына етеп бара…*

Туған халҡымдың бер вәкиле булараҡ, тағы бер мәсьәләгә битараф ҡала алмайым: һуңғы йылдарҙа төрлө сайттарҙа республиканың асаба халҡына өйөлгән бысраҡ йөрәгемде әрнетә. Мин, мәҫәлән, һәр халыҡҡа оло ихтирам менән ҡарайым. Бер-беребеҙгә ҡарата ихтирамлы булып, дуҫ-татыу йәшәүгә ни етә! Быйыл Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылында башҡалабыҙҙа шул тиклем киң йөкмәткеле әллә күпме сара үткәрелде. Уларҙың һәр береһендә республикабыҙҙы төйәк иткән халыҡтарҙың бай мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, сағыу, зауыҡлы милли костюмдары менән танышыу мөмкинлеге тыуҙырылды. Һәр милләт үҙенсә матур, һәр милләттән нимәгәлер өйрәнергә була. Төрлө милләт вәкилдәре өсөн ҡалабыҙҙа Рәсәй буйынса тиңе булмаған 12 йәкшәмбе мәктәбе эшләп килә! Яңыраҡ Әрмән йәкшәмбе мәктәбенең 10 йыллыҡ юбилейы үткәрелде. Башҡорт дәүләт филармонияһының Ҙур залы (!) ошо халыҡ вәкилдәре менән шығырым тулы ине. Баҡтиһәң, туған телдәрен, мәҙәниәтен белеп үҫһендәр өсөн әрмәндәр Йәкшәмбе мәктәбенә балаларын хатта Ҡырмыҫҡалы, Өфө райондарынан йөрөтөп уҡыталар икән! Ә беҙҙең халыҡ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, балаһын башҡорт мәктәбендә уҡытмаҫ өсөн 40 сәбәп табырға әҙер! Һуҙ юҡ, беҙ киң күңелле, ҡунаҡсыл, заманса әйткәндә, толерант халыҡ. Әммә башҡа халыҡтарҙың әүҙемлегенә һоҡланып, үҙебеҙ тапалып ятып ҡалмайыҡ!

*Йәнем ҡубарыла һөйләһәләр,*
*Тыуған илкәйемде бөлгән тип,*
*Кемдер уға бысраҡ өйгән тип,*
*Кемдер унан әсе көлгән тип.*
*Бер бөгөнмө беҙгә ҡаныҡҡандар,*
*Һөйләгәндәр әсе ялғанын.*
*Онотолған тиеп уйлайҙармы*
*Ошо ерҙең көлгә ҡалғанын?*
*Көлгә ҡалғас, ҡабат ҡалҡыр өсөн*
*Ниндәй ҡөҙрәт кәрәк, билдәһеҙ...*
*Илкәйемә бысраҡ өйгән йәндәр,*
*Минең өсөн тере һөлдә һеҙ!*
*Тере һөлдә. Ҡурай моңон көткән*
*Ҡәберендә һуңғы башҡорттоң,*
*Ә бит һеҙҙе шундай яҡын күреп,*
*Ҡабул иткән минең баш йортом.*
*Тыныс урын эҙләп һыйынғандар,*
*Йә, әйтегеҙ әле, һеҙме шәп?*
*Аҫаба ла башҡорт ерҙәрендә*
*Минең халҡым түгел килмешәк!*
*Ҡыуанмағыҙ! Әле һеҙ белмәгән*
*Халҡым күңелендә серҙәр бар.*
*Урап та ғына ҡайтыр ерҙәр ҙә бар,*
*Ҡурай ҙа ғына тартыр ирҙәр бар!*

Яңы йылды, Аллаһы бойорһа, ап-аҡ намаҙлыҡ өҫтөндә ҡаршылаясаҡмын! Ә теләр теләктәрем күптән әҙер. Тыуған еребеҙ Башҡортостаныбыҙ имен булһын, халҡыбыҙ күпләп иманға килһен! Ер-һыуҙарыбыҙға ысын хужа булып, илебеҙҙең ҡеүәтен арттырырға, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, әҙәбиәтен үҫтерергә, рухи ҡомартҡыларын тергеҙергә насип итһен! Милләттәштәребеҙ йәшәгән һәр бишенсе йорттан илебеҙҙе данға күмерҙәй шәхестәр үҫеп сыҡһын! Халҡыбыҙ ишәйһен! Заманында күпләп ҡырылған башҡорт батырҙарының, сәсәндәренең, ишандарының, зыялыларының аҫыл генофонды тергеҙелһен! Ағинәйҙәрҙең фатиһаһын алған ҡыҙ-килендәребеҙ батыр улдар, гүзәл ҡыҙҙар тыуҙырһын! Тыуған еребеҙҙең ырыҫы артһын! Илйортобоҙға бәрәкәт килһен!

*Ғәзиз халҡым, кей түбәтәй!*
*Ғәзиз халҡым, әйт аҙан!*
*Ата-бабалар йолаһын*
*Тергеҙәйек ҡайтанан!*

*Ғәзиз халҡым, йәй намаҙлыҡ!*
*Теләк телә сәждәлә,*
*Ил-йортобоҙ тыныс булыр,*
*Урап үтер мең бәлә.*

*Ғәзиз халҡым, тарт тиҫбеңде,*
*Әйт һин: "Аллаһу әкбәр!"*
*Киң ҡөҙрәте менән Хоҙай*
*Һәр инсанды бүләкләр!*

*Ғәзиз халҡым, тот ураҙа,*
*Ғәзиз халҡым, сал ҡорбан.*
*Йөрәгеңдә иман артһын,*
*Күңелеңдә- миһырбан.*

*Ғәзиз халҡым, ҡалдыр "Ил" тип,*
*Доға ҡылырлыҡ бала,*
*Ошо изге еребеҙгә*
*Хужа булырлыҡ бала!*
*Лә иләәһә илләллаһ!*
*Лә иләәһә илләллаһ!*

**Зөлфиә ХАННАНОВА,**
**шағирә, Ш. Бабич исемендәге**
**республика йәштәр премияһы**
**лауреаты.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Президенты Рөстәм Хәмитов 21 декабрҙә Андрей Назаровты һәм Спартак Әхмәтовты республика башлығы советниктары итеп тәғәйенләү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Президенттың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Андрей Назаров инвестицион хеҙмәттәшлек мәсьәләләре өсөн яуаплы буласаҡ. Спартак Әхмәтов Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Ишембай ҡалаларын үҫтереү өлкәһенә контроллек итәсәк.

✔Алдағы йылда Өфө янындағы Жуков ауылында балалар баҡсаһы асыласаҡ һәм мәктәп төҙөлә башлаясаҡ. Был хаҡта "Ижтимағи электрон гәзит"тә үткән онлайн-конференция барышында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов белдерҙе. Ул, ауылды төҙөкләндереү эштәре башҡарыласаҡ, шулай уҡ транспорт мәсьәләһе лә хәл ителәсәк, тип ышандырҙы.

✔БР Президенты Рөстәм Хәмитов мәктәп уҡыусылары - "Президент көндәлеге" конкурсында еңеүселәр менән осрашты. Республика башлығы менән осрашыуға төрлө ҡала һәм райондарҙан 30 уҡыусы килде, уҡыу йылы башынан алып улар иң күп "бишле" алған. Республика Президенты еңеүселәрҙең һәр береһенең көндәлегендә иҫтәлекҡә яҙыу ҡалдырҙы, шулай уҡ уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе. Өфө ҡалаһындағы 136-сы мәктәптең 3 синыф уҡыусыһы республика башлығынан Президент шыршыһына саҡырыу алыу мөмкинлеге тураһында һорашты. Һөҙөмтәлә Рөстәм Хәмитов Яңы йыл тамашаһына конкурста еңеүселәрҙең барыһын да саҡырҙы.

✔БР Президенты Рөстәм Хәмитов "Ышанмайым" (Не верю) йәштәр йәмәғәт хәрәкәте лидерҙары менән осрашты. Осрашыу М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында үтте. "Ышанмайым" хәрәкәте Дәүләт Думаһына депутаттар һайлауҙан һуң барлыҡҡа килгән. Унда алты меңдән ашыу кеше иҫәпләнә, күпселеге - йәш өләләр.

✔БР Президенты Рөстәм Хәмитов 2013 йылда Өфөлә йәштәр командалары араһында хоккей буйынса донъя чемпионатына әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, донъя чемпионаты Башҡортостандың баш ҡалаһында 2012 йылдың 26 декабренән 2013 йылдың 5 гинуарына тиклем үтәсәк. Ултырышта әҙерлек буйынса төп мәсьәләләр ҡаралды. Республика Президенты Спорт һарайын реконструкциялау мәсьәләһенән әле үк хәл итә башларға ҡушты.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# УРАЛ БАТЫР ҠОТЛАНЫ...



**бөтөн республика балаларын…**

**"Нефтсе" мәҙәниәт һарайында республика мәктәптәренең иң лайыҡлы уҡыусылары өсөн Президент шыршыһы гөрләп үтте. Яңы йыл тантанаһында быйыл 780 бала ҡатнашты. Уҡыусыларҙы етеп килгән байрам менән Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡотланы.**

Республиканың төп шыршыһына райондарҙан килгән балалар "Салют" шифаханаһына урынлаштырылды. Унда улар өсөн күңелле уйындар, конкурстар, танышыу кисәһе ойошторолдо. Театрлаштырылған яңы йыл тамашаһында уҡыусыларҙы Ҡыш Бабай менән Ҡарһылыу, әкиәт персонаждары ҡаршы алды. Әммә тамашаның төп геройҙары, әлбиттә, балалар үҙҙәре ине. Уларға татлы күстәнәстәр, 4 телдә баҫылған "Урман әкиәттәре" китабы бүләк ителде.

Уҡыусылар бигерәк тә төп тамашаны - Яңы йыл әкиәтен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән көткәндәр. Ойоштороусыларҙың фантазияһы бай, әлбиттә. Әкиәттәре йыл да үҙенсәлекле килеп сыға. Быйыл ниндәй әкиәт иленә сәйәхәт ҡылды һуң балалар? Был юлы уларҙы Урал батыр эпосы геройҙары менән осраштырҙылар. Геройҙар таныш, балалар уларҙы ярата. Тик әкиәт башҡа, Яңы йылдағыса бит. Шуға уларға Ҡыш Бабай ҙа килеп ҡушылды. Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылын да тейешенсә оҙатып ебәреү ниәте менәндер, әкиәткә урыҫ әкиәттәре персонаждары ла индерелде. Әкиәттең сюжеты әкиәттәгесә - ябай һәм аңлайышлы. Урал батыр яуыз Әҙрәкә ҡулына эләккән Һомайҙы ҡотҡарырға тейеш була. Әммә үҙ көсө менән генә ул быға өлгәшә алмай. Урал Илья Муромец, Добрыня Никитич һәм Алеша Поповичҡа ярҙам һорап килә. Берҙәмлектә көс икәнен һәр бала аңлағандыр. Тик шуныһы аңлашылмай. Ни өсөн Урал урыҫ батырҙарынан йәш буйынса кесерәк һаналып, уларға ҡусты булып сыға һуң? Быны сценарийҙы яҙыусылар үҙҙәре лә аңламағандыр. Ҡобайырҙарыбыҙ урыҫ әкиәттәренән күпкә боронғораҡ, улар эпос бит.

Шулай ҙа ойоштороусылар бар күңелен биреп иҗад иткән тамаша балалар йөрәгенә изге орлоҡтар ғына һалғандыр. Ни тиһәң дә, әкиәт иленә иң аҡыллы уҡыусылар ғына сәйәхәт итте бит. Шуларҙың береһе - Хәйбулла районы Байғускар ауылынан Данир Баймырҙин. 7-се синыфта ғына белем алһа ла, ҙур-ҙур уңыштары бар. "Аҡмулла вариҫтары" конкурсында ҡатнашып, беренсе урын алған. Унда үҙем иҗад иткән шиғырҙарҙы ла һөйләргә насип итте, ти. Башҡорт телен, әҙәбиәтен ярата икән Данир. Иҗад емештәре район гәзитендә донъя күрә, иншалар ҙа яҙырға ярата үҙе. Данир теүәл фәндәрҙә лә уңыштарға өлгәшә. Математика буйынса Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашып, призерҙар иҫәбенә инә. Республика кимәлендә информатика буйынса үткән конкурста икенсе урын алғаны бар. "Байрам миңә оҡшаны. Әкиәт тә бик фәһемле булды. Урал батыр ҡобайырын уҡығаным бар. Ул бик боронғо. Ата-бабаларыбыҙ уны беҙгә аманат итеп ҡалдырған", - тине Данир.

9-сы синыф уҡыусыһы Айнур Кәбиров Дыуан районы Әбдрәшит ауылынан. Тик бишлегә генә уҡый. Төрлө олимпиадаларҙың даими ҡатнашыусыһы. Президент шыршыһына ул төньяҡ-көнсығыш райондары уҡыусыларының Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосопов ижады буйынса үткән конференцияһында уңышлы ҡатнашҡаны өсөн саҡырылған икән. "Яҡташ шағирҙың әҫәрҙәрендә топонимдар ҡулланылышын өйрәндем. Минең өсөн телдәрҙе өйрәнеүе ҡыҙыҡ, шул уҡ ваҡытта теүәл фәндәрҙе лә яҡын күрәм. Байрамда ҡатнашыуыма бик шатмын. Әкиәт тә оҡшаны. Үҙ эпосыбыҙҙы уҡып сыҡҡандан һуң Уралды мин милли батырыбыҙ, тип һанайым. Ул ғына башҡорт егеттәре өсөн бөтә яҡтан өлгө булып тора".

## …баш ҡала балаларын

**Нефтселәр мәҙәниәт һарайында шулай уҡ йыл да ойошторола килгән Баш ҡала шыршыһы байрамы үтте. Яңы йыл тантанаһына Өфөнөң бөтә районДарынан меңгә яҡын бала йыйылды. Байрам тамашаһында уҡыу алдынғылары, олимпиадалар еңеүселәре ҡатнашты. Улар өсөн дә иҫтәлекле бүләктәр, татлы күстәнәстәр, күңелле уйын - конкурстар әҙерләнгәндәр ине. Уҡыусы ни тиклем яҡшы уҡып, өлкәндәрсә фекер йөрөтмәһен, ул барыбер бала булып ҡала. Бала күңелендә генә байрам тойғоһо бөтә сағыулығында балҡый. Был бигерәк тә Яңы йыл байрамында күренә.**

Артур Ишбаев - 8-се синыфта белем ала. Ҡалала үҫһә лә матур итеп башҡортса аралаша. Инглиз телен ныҡлап өйрәнеп алырға теләй. "Телдәрҙе ни тиклем күберәк беләһең, шул тиклем яҡшыраҡ, шулай ҙа туған телем барыбер иң яҡыны. Тик мәктәптә, дуҫтар араһында үҙ телемдә бик үк аралашып булмай. Күберәк атай-әсәй менән башҡортса һөйләшәм", - ти Артур. Инглиз теле буйынса ҡала олимпиадаларында призлы урындар яулаған. Спортты үҙ итә. Волейбол, тенниска йөрөй. Гүзәл Лоҡманова йыр түңәрәгенә йөрөп, моңло ғына итеп башҡорт йырҙарын башҡарырға өйрәнгән икән. "Гөлсөм Бикбулатованың йырҙары оҡшай, - ти. - Йыр күңел өсөн, яратҡан фәндәрем - химия менән биология. Медицина университетына инергә теләйем, үҙемдә табип итеп күрәм".

## …социаль төркөмдәге балаларҙы

**Баш ҡалала аҙ тәьмин ителгән, имен булмаған ғаиләләрҙә үҫкән балалар, шулай уҡ ғәрип балалар өсөн ете социаль шыршы байрамы үтәсәк. Бындай сараларға бөтәһе 3200 баланы йәлеп итеү ҡаралған. Шыршыға килә алмаған 388 баланы комплекслы хеҙмәтләндереү үҙәге хеҙмәткәрҙәре ҡотлаясаҡ.**

Беренсе шыршы байрамы йома көндө "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында үтте. Байрамға өлкәнерәк синыфта уҡыған балаларҙың күбеһе ҡустыларын-һеңлеләрен етәкләп килгән.

Апалы-ҡустылы Әлиә һәм Азат Ғәлиндар Шамонино ҡасабаһынан килгән. Әлиә үҙе 10-сы синыфта белем ала. Иң яратҡан шөғөлө - биатлон. "Саңғыла шыуырға бик яратам. Өй эргәһендә генә урман. Ә биатлонға мәктәптә йөрөйөм. Конькиҙа ла шыуам, баскетбол, волейболды үҙ итәм", - ти спортсы ҡыҙ. Ҡустыһы ла унан өлгө алып, төрлө спорт төрҙәрен өйрәнергә әҙер.

Әлфиә Хамаева әле 1-се синыфта ғына уҡыған әнеһе менән килгән. "Беҙ ҙә буш ваҡытта конькиға баҫабыҙ. Яңы йылды бик ныҡ көттөк. Был байрамға ла ашҡынып килдек, - ти улар. - Яңы йылда әйтелгән теләктәр, хыялдар тормошҡа ашыуына ышанабыҙ. Иң ҙур хыялыбыҙ - ерҙә бөтә кешеләр бәхетле булһын".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрамдар, күңелле ваҡиғалар үтеп тора, ә уларҙан ҡалған хис-тойғолар беҙҙә ғүмер буйына оҙатып бара. Ысын байрам тойғоһо - тормош маяғы. Яңы йыл иҫтәлектәре балалар өсөн үҫкәс тә ошо маяҡ уты булып балҡыһын.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**



## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының йомғаҡлау ултырышы үтте. Унда Башҡарма комитет ағзалары, Рәсәй төбәктәре, Башҡортостан ҡалалары һәм райондарының ҡоролтай рәйестәре, Дәүләт Думаһы депутаттары Иршат Фәхретдинов һәм Сәлиә Мырҙабаева ҡатнашты. Ултырышта ҡатнашыусылар төп башҡорт ойошмаһының 2011 йыл өсөн эшмәкәрлеген анализланы, алдағы осорға бурыстар билдәләнә һәм 2012 йылға эш планын раҫланы. Сарала башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтен үҫтереүгә өлөш индергән өсөн ҡайһы бер әүҙем эшмәкәрҙәргә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Йәмәғәт премиялары тапшырылды.

✓Рәсәйҙә "Зебраға һунар" акцияһы башланды. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләренә тап килмәгән йәйәүлеләр үткәүелдәрен табып, уларҙы тәртипкә килтереү - уның төп маҡсаты. Был акция барыһының да ярҙамы мөһим: граждандар кешеләр күҙенән ситтә ҡуйылған "зебра" билдәләре, йәки ҡар ҡаплауы арҡаһында күренмәгән юл һыҙаттары, башҡа төрлө унайһыҙлыҡтар һәм ҡағиҙә боҙоуҙар күҙәтелгән урындар тураһында хәбәр итә ала. Халыҡтан килгән бөтә мәғлүмәттәр ҙә ҡараласаҡ, тип ышандырҙылар республика автоинспекцияһында.

✓Магнитогорскиҙың "Крашенинников китапханаһы" хоҡуҡи һәм эшлекле мәғлүмәт үҙәгендә тарихсыларҙың һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Башҡортостан тарихына арналған форумы үтте. Форум инициаторы булып "Салауат" башҡорт йәмәғәт ойошмаһы сығыш яһаны. Форум эшендә Көньяҡ Уралдың билдәле ғалимдары һәм ҡала йәштәре вәкилдәре ҡатнашты. Башҡортостандың билдәле тележурналисы Салауат Хәмиҙуллиндың доклады айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

✓Быйыл республика аграрийҙары ауыл хужалығы техникаһы һатып алыу өсөн дәүләттән ҙур ярҙам алды. Тиғыҙ айҙа ауыл эшсәндәре 2,5 миллиард һумдан ашыу суммаға 2566 техника берәмеге һатып алған. Ағымдағы йыл аҙағына тиклем был һан тағы ла артасаҡ һәм өс миллиард һумдан ашыу суммалыҡ өс мең самаһы техника берәмегенә етәсәк. Ауыл халҡы өсөн шуныһы ҡыуаныслы: был техника хаҡының 40 процентын республика бюджеты ҡаплай.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЗАКОНДАРҘЫ КҮҘӘТӘЙЕК!



**Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссия ла ошо көндәрҙә үҙенең сираттағы ултырышын йыйып, эшләнгәндәргә, үтәлгәндәргә һәм үтәлмәгәндәргә йомғаҡ яһап, киләсәккә пландар билдәләне.**

- Биш йыл элекке хәл-торош менән сағыштырғанда, бөгөн бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтелә баш ҡалабыҙҙа, - тине үҙ сығышында хакимиәт башлығы урынбаҫары, Комиссия рәйесе Сынтимер Баязитов. - Эшебеҙ һөҙөмтәһен Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Комиссия ултырышында ла ыңғай баһаланылар һәм баш ҡаланың йөҙө үҙгәреүен билдәләнеләр. Бөгөн 2011 йылға билдәләнгән пландың барлыҡ пункттары ла тигәндәй үтәлде. Ошо осорҙа бихисап ултырыштар, күсмә ултырыштар үткәрелде, Терминология комиссияһына мең ярымдан ашыу предприятие етәкселеге ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. 2007 йылдан алып мөрәжәғәт итеүселәр һаны өс меңдән ашып китә. Урамдарҙың, туҡталыштар атамаларының, визуаль тышҡы рекламаларҙың, алтаҡталарҙың дөрөҫ яҙылышын тикшереү һәм хаталарҙы төҙәтеү буйынса ҙур эш башҡарылды. Республика әҙиптәренең дуҫлыҡ тураһындағы фекерҙәре яҙылған баннерҙар урамдарға икенсе төҫ бирҙе...

Ултырышта шулай уҡ Дим һәм Ленин райондарында Закондың үтәлеше барышы тураһында мәғлүмәт тыңланды.

-Ленин районы хакимиәтенең һәм уның барлыҡ бүлектәренең бланкылары дәүләт телдәрендә яҙылған, - тине үҙ сығышында район башлығы урынбаҫары Мирхәт Ҡаҙарғолов. - Компьютерҙарға башҡорт алфавитын уҡыған программалар ҡуйылған. Мәғлүмәт-аналитика, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте бүлектәрендә башҡорт шрифты ҡулланыла, махсус органдарҙа документтар дәүләт телдәрендә тултырыла. Райондың эре предприятиелары халыҡҡа тәҡдим иткән тауарының ярлыҡтарында дәүләт телдәрендә мәғлүмәт бирә, иғландар ике телдә яңғырай. Район биләмәһендә үткән саралар тураһында ҡала хакимиәте сайтында 182 мәғлүмәт донъя күрһә, шуларҙың 19-ы башҡорт телендә. Йылдың беренсе һәм икенсе яртыһына дөйөм алғанда 34719 дана гәзит-журналға яҙҙырылһа, шул иҫәптән 1384 дана башҡорт баҫмаһы алдырыла. Райондың 11 мәктәбендә 20 милләт балаһы белем ала. Бер - башҡорт, бер татар мәктәбе, ике йәкшәмбе милли мәктәп эшләй. 2011 йылда мәғариф учреждениеларында 1234 башҡорт балаһы уҡыһа, шуларҙың 315-е туған телендә белем ала. Был былтырғы менән сағыштырғанда 9 процентҡа күберәк. 2-се Башҡорт лицейында, 25-се урта мәктәптә, 46-сы лицейҙа башҡорт телен тәрәнәйтеп 224 бала өйрәнә. 8 белем биреү учреждениеһында башҡорт теле өйрәнелә. 18 балалар баҡсаһының береһендә 140 бала башҡорт төркөмөндә тәрбиәләнә, ике балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәнеү төркөмдәре асылған, шулай уҡ мәктәпкәсә учреждениеларҙа халҡыбыҙҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен һәм туған телен өйрәнеү түңәрәктәре эшләй. Музыка мәктәптәрендә уҡытыу ике дәүләт телендә алып барыла, ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡумыҙ кластары эшләй.

Мирхәт Ҡаҙарғолов быйыл Ленин районындағы 35-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльза Толомбаеваның район, ҡала конкурстарында ғына түгел, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2011" Төбәк-ара конкурсында Гран-при яулап, Бөтә Рәсәй бәйгеһендә юғары педагогик оҫталыҡ номинацияһында еңеү яулауы, бихисап рәхмәт хаттарына һәм махсус призларға лайыҡ булыуы тураһында ла билдәләп китте.

Дим районы ла юғарыла телгә алынған Законды тормошҡа ашырыуға яуаплы ҡарай. Бында 8 мәктәптә башҡорт телен туған тел булараҡ 364 бала өйрәнә, 278 бала башҡорт телендә уҡый, былтырғы менән сағыштырғанда был 42 балаға күберәк. Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен балаларҙың 85,5 проценты өйрәнә. Районда 34 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы эшләй, быйыл 104-се урта мәктәп уҡытыусыһы Наилә Буранғолова "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2011" конкурсының этаптарында еңеү яулап, төбәк-ара конкурс финалсыһы исемен яуланы. Билдәләп кителеүенсә, Дим районы - ҡала шарттарында ысын һабантуй уҙғарыусы берҙән-бер район булараҡ та дан ҡаҙанған. Һәм, әлбиттә, барлыҡ мәҙәни саралар ҙа бында дәүләт телдәрендә алып барыла. Шулай уҡ димдәр милли көрәште үҫтереүгә лә ҙур иғтибар биреүе менән маҡтауға лайыҡ. "Орион" Йәш таланттар балалар йортонда милли көрәш секцияһында 7 йәштән 15 йәшкә тиклем 30 бала күнекмә үтһә, "Батыр" спорт үҙәгендәге көрәш секцияһында 80 кеше шөғөлләнә.

- Законды тормошҡа ашырыу сиктәрендә коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү бүлеге тарафынан даими рәүештә юл билдәләрен, туҡталҡаларҙы, аншлагтарҙы, реклама таҡталарын дөрөҫ яҙыу буйынса эш алып барыла. Күсмә тикшереү барышында асыҡланған хаталар буйынса предприятиеларға, ҡыҙыҡһыныусы ойошмаларға хаталарын күрһәтеп хаттар ебәрәбеҙ һәм уларҙан яуаптар килә, - тине үҙ сығышында Дим районы хакимиәте комиссияһының яуаплы сәркәтибе Рәмзиә Әсәнова. - 2011 йылда комиссияның дүрт ултырышы үтте, уларҙа 12 мәсьәлә ҡаралды, предприятиеларҙың һәм учреждениеларҙың Законды үтәү һәм хаталарҙы төҙәтеү буйынса сығыштары тыңланды.

Эйе, эш бара, әммә проблемалар ҙа юҡ түгел. Сығыш яһаусылар билдәләүенсә, тәржемәләр дөрөҫ булһа ла, алтаҡталар, реклама тәҡдим итеүсе ойошмалар уларҙа ниндәй ҙә булһа хата ебәрә. Бер хатаны төҙәттерһәң, икенсе урында хата ебәреү осраҡтары ла булғылай. Шулай уҡ предприятие, ойошмаларҙың сит ил атамалары менән аталыуы ла проблемалар тыуҙыра. Ләкин улар менән көрәшеүе еңел түгел, сөнки ниндәйҙер икенсе ҡалала теркәлгәндәр, етәкселәре йыш алышына, шуға улар менән эшләү оҙайлы ваҡытҡа һуҙыла. Ҡайһы берҙә шәхси эшҡыуарҙар төрлө теркәү урындарынан үтеп бөткәс кенә урындағы терминология комиссияларына мөрәжәғәт итә, шуға ла төрлө аңлашмаусылыҡтар килеп тыуа. Ә инде Закон талаптарын улар эшҡыуарлыҡҡа аяҡ салыу тип баһалай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законы ҡабул ителде лә, эштәр үҙенән-үҙе алға китте, тип уйлау дөрөҫлөккә лә, ысынбарлыҡҡа ла тап килмәҫ ине. Закон нимәнелер эшләү өсөн нигеҙ генә бирә. Шуға ла был мөһим эштә бер-беребеҙгә иғтибарлы, ихтирамлы булып ҡына етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә мөмкиндер, моғайын. Ә төп етешһеҙлек бөтөн ерҙә лә бер үк - ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығарғандағылай, бер хатаны төҙәткәнсе, икенсеһен яһап ҡуйыу. Тимәк, хаталарҙы бөтөрөү өҫтөндә ҙур түҙемлек менән эшләргә лә эшләргә әле.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ҠЫШ БАБАЙ...

## һәр балаға килергә тейеш



**Кемдер ҡышты яратмай, кемдер битараф, ә минең өсөн ҡыш - иң матур миҙгел. Иртәнге саф һауа, аяҡ аҫтында шығырлап ятҡан ҡар, күктән өйөрөлөп-өйөрөлөп ергә яуған ҡар бөртөктәре, ут яҡтыһында сихри төҫтәр менән балҡыған ерҙең аҡ япмаһы - барыһы ла үҙҙәре менән бергә сафлыҡ, паклыҡ һәм таҙалыҡ алып килгәндәй. Ә Яңы йыл байрамын көтөү, уға әҙерләнеү - тулҡынландырғыс та, матур ҙа тойғолар бүләк итеүсе мәл.**

Бүләк тигәндәй, Яңы йылдың бүләкһеҙ булмауын һәм, һис шикһеҙ, алыҫ илдән ишле аттарына ултырып Ҡыш бабайҙың килеүен һәр бала белә һәм түҙемһеҙләнеп көтә. Бала саҡтың мөғжизәле ваҡыттарын оҙағыраҡ һуҙыу һәм бәләкәстәргә байрам бүләк итеү - һәр ата-әсәнең бурысы, тип һанарға була. Ауылда Ҡыш бабай ролен туғандар йәки күрше ағай-ҙар үҙ өҫтөнә алһа, ҡалала был мәсьәләне хәл итеүҙе төрлө байрам ойоштороу агентлыҡтары, фирмалары атҡара. Аҡсанды түләп, өйөңә Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыуҙың килеп етеү ваҡытын билдәләп, балалар өсөн тәғәйен бүләктәрҙе Ҡыш бабайҙың тоғона тултырып, бары тик көтөргә генә ҡала. Әлбиттә, бындай хеҙмәттәр осһоҙ түгел һәм һәр кемдең, айырыуса студент ата-әсәйҙәрҙең кеҫәһенә һуға. Ләкин был сәбәп арҡаһында студент "балалар" Ҡыш бабай мөғжизәһенән мәхрүм ҡалырға тейеш түгел.

Шуға күрә былтырғы Яңы йыл алдынан үҙемдең бер-нисә дуҫ егет һәм ҡыҙ менән һөйләшеп-кәңәшләштек тә, был изге бурысты үҙ өҫтөбөҙгә алырға булдыҡ, йәғни артыҡ ҡиммәт булмаған хаҡ ҡуйып, студенттар ғаиләһендәге балаларҙы ҡотларға йөрөнөк. Декабрҙең һуңғы ике аҙнаһы беҙҙең өсөн ошо шатлыҡлы мәшәҡәттәр менән үтте. Көнөнә бер-нисә студент ғаиләһенә барып, балаларҙы ҡотланыҡ, бүләктәр тараттыҡ, йырҙар йырланыҡ, бейенек. Тиҙ арала беҙҙең Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыуҙар "отряды" хаҡында күп кеше белде. Беҙгә эш көндән-көн артты, ә был, үҙ сиратында, беҙҙең кеҫәгә күберәк аҡса ла төшөрҙө, тигән һүҙ.

Шулай итеп, балаларға ике аҙна байрам бүләк иткәндән һуң "отрядтағы" һәр Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу эшләгән аҡсаһына үҙенә лә бүләк яһаны. Был бүләктәрҙең ғүмеребеҙҙә үҙебеҙ эшләп тапҡан тәүге аҡсаға алыныуы, ә аҡсаларҙың шундай хәләл көс менән табылыуы беҙҙе айырыуса һөйөндөрә.

**Ҡыш бабайҙың һөйләгәндәрен Сәлимә АРЫҪЛАНОВА тыңланы.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Тоҙ ултырһа



❖ 2 йомортҡаны 100 грамм һеркә эссенцияһына һалырға. Йомортҡаларҙың тышы иреп бөткәс, шекәрәһен алып ташлап, йомортҡаны 30 грамм аҡ май менән болғатырға. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы ауыртҡан быуындарға һөртөргә.

❖ Картуфты яҡшылап йыуырға һәм ҡабығы менән 3-5 мм ҡалынлығында киҫәктәргә турарға. Картуф ни тиклем бәләкәйерәк була, шул тиклем яҡшыраҡ. 1 килограмм картуфты 3 литр ҡайнап торған һыуға һалырға һәм бер сәғәт бешерергә. Һуңғараҡ әнис (укроп), петрушка, кинза, сельдерейҙы турап һалығыҙ һәм 10 көн дауамында ошо рәүешле әҙерләнгән аҙыҡты ғына ашағыҙ. 10 көндән һыҙланыуҙар баҫыласаҡ.

❖ Билгә һәм ҡулдарға тоҙ ултырһа, алма һеркәһе һеңдерелгән һәм төйөлгән ала миләүшә (лаванда) һибелгән йөн туҡыманы билгә һәм ҡул суҡтарына урап йоҡларға.

❖ Үксәгә тоҙ ултырһа, баҡыр тасты йылытып, өҫтөнә йөн туҡыма һалырға һәм тас һыуынғансы шунда баҫып торорға.

❖ 4 ҡалаҡ дөгөнө 8 сәғәт буйына 2 литр һыуға һалып ҡуйырға. Һуңынан йыуырға, 20 минут бешерергә. Ике стакан бешкән дөгө килеп сығасаҡ. Бер стакан дөгөнө көн дауамында ашап бөтөрөргә кәрәк.

## Ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙары

Иртән һәм йоҡлар алдынан ас ҡарынға мумие ҡабул итергә. Дауаны 25-28 көн дауам итергә. Сир ныҡ аҙған булһа, ун көндән дауалау курсын яңынан ҡабатларға. Мумиены 1:20 нисбәтендә һөттә иретергә тәҡдим итәм. Шулай уҡ һыуға болғатһағыҙ ҙа була. Түмәнә ҡарап, бал өҫтәргә ярай.

## Фарингит

1 өлөш прополис экстракты, икешәр өлөш глицерин йәки персик майы алығыҙ һәм яҡшылап болғатығыҙ. Хроник фарингит ваҡытында көнөнә бер тапҡыр ошо май менән танауҙың лайлалы тиресәһен майлағыҙ. Дауаны 10-15 көн дауам итергә. 1 аппликацияға 2-2,5 мг препарат китә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...



# ЯҢЫ ЙЫЛҒАСА ҠАЛДЫРМАЙ...

## бөгөн үк айығайыҡ!

**Яңы йыл байрамы алдынан, бөтөн ил ун көн дауамына һуҙылған ялдарҙы көткән саҡта һеҙгә "Әйҙәгеҙ, айығайыҡ!", тип өндәшергә ашығам. Яңы йыл байрамын шампан шарабынан тыш күҙ алдына килтермәһәгеҙ ҙә, балағыҙға ла уны үҙегеҙ һалып биреп тәмләтергә күнекһәгеҙ ҙә, был юлы туҡталып, бер аҙ уйланып алығыҙ: һин, ата-әсәй, киләсәктә баландың эскесе булыуын теләйһеңме ни?**

Ҡыҙғанысҡа күрә, күптәр эскеселәрҙең ҙур өлөшөн байрамдарҙа ғына "мәҙәни" эсеүселәр тәшкил иткәнен белмәй ҙә, белергә лә теләмәй. Был турала Себер федераль университеты профессоры, тарих фәндәре докторы, Рәсәйҙә айыҡлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе, 30 йыл эскелек темаһын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе Виктор Кривоноговтың лекцияларында күп әйтелде. Уйлап ҡарағыҙ, бер кеше лә был донъяға эскесе булып тыумай бит. Беренсе синыфҡа барғанда улар айыҡ, ә мәктәпте тамамлағанда ул балаларҙың 99 проценты алкоголле эсемлек татып ҡараған була. Ғалим әйтеүенсә, уларҙың 50 процентына ата-әсә үҙҙәре һона рюмканы. Сөнки атай менән әсәйгә, шулай уҡ уҡытыусы һәм табиптарға, зыялыларға, байрамдарҙа аҙ ғына алкоголле эсемлек эсергә ярай, урамда эскәнсе, өйҙә эсһен, тигән ҡараш һеңдерелгән. Шуға ла бөгөнгө ололарҙы тулыһынса айыҡ йәшәргә мөмкин икәнлегенә ышандырыуы ла ауыр. Шулай һәр байрам һайын "мәҙәни" эсә торғас, кеше эскеселәр рәтенә баҫыуын баҫмаҫ та, бәлки, әммә ул инде эсмәүселәр рәтендә лә түгел, шуныһы үкенесле. Етмәһә, ул үҙенең балаһынан да үҙе кеүек эскесе яһаясаҡ.

Эсеүҙең зыяны тураһында халыҡҡа мәғлүмәт тә етешмәй. Мәҫәлән, XIX быуат уртаһында Швейцарияла бер төркөм ғалимдар байрамдарҙа ғына берике тапҡыр эсеү ҙә ҡатын-ҡыҙ организмына ни тиклем зыян килтереүен асыҡлай. Мәғлүм булыуынса, ҡатын-ҡыҙ енес күҙәнәктәре ҡыҙ бала әсә ҡарынында саҡта уҡ барлыҡҡа килә һәм йәшәү ваҡыты эсендә бөтөнләй яңырмай. Ҡатын-ҡыҙ һирәк-һаяҡ эсә икән, уның ошо енес күҙәнәктәре зарар күреүе һәм тап зыян күргән күҙәнәктең аталанып, сирле бала тыуыуы ихтимал. Был мәғлүмәтте бер ҡайҙа ла яҙмайҙар, уны юғары уҡыу йорттарында һөйләмәйҙәр, әгәр ҙә быны белгән булһалар, тыумыштан әсәлек инстинкты көслө булған гүзәл заттарыбыҙ алкоголле эсемлекте ауыҙ итеп тә ҡарамаҫ ине.

Хәҙер халыҡтың үҙенең айығырға теләге бар, эргәбеҙҙә айыҡ тормош алып барған йәштәрҙең күбәйә барыуы күҙәтелә. Республикала былтыр ғына барлыҡҡа килгән "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте ойошторған саралар хәҙер үҙ сафтарына йөҙәрләгән йәштәрҙе йыя ала. 2001 йылда хәрәкәт "Айыҡ ауыл" конкурсын үткәрҙе, унда республиканың 41 районынан 100 ауыл ҡатнашты, был да халыҡтың ҡотолғоһоҙ был афәттән арынырға теләүенең күрһәткесе булып тора. Бар халыҡты айыҡтырыуҙы маҡсат итеп ҡуймайбыҙ, исмаһам, бер генә кешене тормош упҡынына тәгәрәүенән яҡлап алып ҡала алабыҙ икән, был үҙе үк ҙур уңыштың башы булып тора. Киләһе йылда ла "Балалар һәм йәштәр өсөн айыҡ йыл" тигән девиз менән эштәрҙе тағы ла дауам итәсәкбеҙ.

Эскелек - ул халҡыбыҙҙың, киләсәгебеҙҙең, балаларыбыҙҙың дошманы.

Һеҙҙең айыҡ булыуығыҙ иң тәүҙә һеҙҙең ғаиләгеҙгә, балаларығыҙға кәрәк. Шуға, әйҙә, иртәгәге көнгә, яңы йылға ҡалдырмайынса, бөгөн айығайыҡ. Һис булмаһа, Яңы йылды айыҡ ҡаршылауҙан башлайыҡ был изге ғәмәлебеҙҙе.

**Роберт ДӘҮЛӘТШИН,**
**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте рәйестәше.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Календарҙа билдәләнгән байрамдарҙан тыш, тыуған көн, туй, мәктәпте йәки уҡыу йортон тамамлау тантанаһы, балалар өсөн байрамдарҙың күплегенә хайран ҡалырлыҡ. Һәр кем теге йәки был тантананы ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ итеп үткәрергә теләй. Ә быға нисек өлгәшергә? Һәр кеше эште тантана уҙасаҡ урынды билдәләү һәм биҙәүҙән башлай. Элегерәк ул һауа шарын тултырып элеүгә һәм плакаттар яҙыуға ҡайтып ҡалһа, бөгөнгө көндә төрлө ысул ҡулланып, йәнһеҙ урынды ла күҙ ҡамашырлыҡ итеп биҙәп була, ә ошо юҫыҡта эшләүсе махсус ойошма, фирмалар эште күпкә еңеләйтә. Бындай фирманың эше нимәгә ҡайтып ҡала? Кешелә байрам кәйефе тыуҙырыу нимәһе менән ҡыҙыҡлы? Ошондай һәм башҡа һорауҙарға "Декор-ведиһг" агентлығы етәксеһе Гөлшат ЗӘЙҘУЛЛИНА яуап бирә.**



# ҺҮҘҘӘН ЭШКӘ КҮСӘЙЕК!

### Ни өсөн нәҡ ошо өлкә?

Һәр ваҡиғаға һәм күренешкә тик позитив ҡараштан сығып ҡарайым. Был сифатым миңә гел ярҙам итте. Мәктәптә уҡығанда ла, юғары уҡыу йортонда белем алғанда ла, күп кеше ҡатнашлығында ойошторолған саралар уртаһында ҡайнаусы, һәр көндән байрам ноталары табып, тирә-йүндәгеләрҙең кәйефен күтәреүсе булдым. Нәҡ ошо сифатым мине университетта уҡыған саҡта уҡ байрам ойоштороу өлкәһенә эшкә алып килде. Шуға күрә, ҡулыма диплом алғас та эшкә бында ҡалдым. Бер-нисә йыл тәжрибә туплағандан һуң төрлө байрамкисәләрҙе биҙәү буйынса үҙ агентлығымды асырға ҡарар иттем һәм бөгөнгө көндә миндә даими - 6, килешеү буйынса тағы бер-нисә кеше эшләй. Эштәрем уңышлы ғына бара, сөнки беҙҙәге хаҡ һәм сифаттың идеаль нисбәте клиент базаһының ҙурайыуына һәм заказдарҙың артыуына килтерә. Үҙ эшеңә яуаплы ҡараһаң, реклама артабан үҙенән-үҙе тарала, сөнки беҙҙең хеҙмәт менән ҡулланған кеше үҙенең дуҫтарына, туғандарына һәм таныштарына нәҡ беҙҙең агентлыҡты тәҡдим итә, ә кешенең психологияһы шундай: ул төрлө ялтырауыҡ ҡағыҙҙарға түгел, ә ауыҙҙан сыҡҡан һүҙгә нығыраҡ ышана.

### Байрам уҙғарыуға - яңы ҡараш

Хәҙер кеше ғаилә байрамын, туй, тыуған көндәр, балалар өсөн ойошторолған байрамдарға тик өҫтәл артында ғына уҙасаҡ сара итеп ҡарамай. Был осраҡта байрам үткәреләсәк урындың матур һәм оригиналь, үҙенсәлекле итеп биҙәлеүе тәүге урында булырға тейешлегендә шик юҡ. Бөгөнгө көндә был эш залға һауа шарҙары элеп йәки сәскә ҡуйып сығыуға ғына ҡайтып ҡалмай, сөнки бөгөнгө көн технологияһы, биҙәү алымы һәм саралары күпкә алға киткән, үҫешкән. Хәҙерге ваҡытта байрам сараһын биҙәү төрлө идеяны, фекерҙе үҙ эсенә ала һәм был һәр айырым байрамды үҙенсәлекле һәм онотолмаҫлыҡ итергә мөмкинлек бирә. Биҙәлгән зал килгән ҡунаҡтарҙы үҙенең матурлығы, оригиналлеге, сағыулығы менән таң ҡалдырырға һәм, әлбиттә, һәр биҙәү теге йәки был байрамдың стиленә тура килергә, шулай уҡ байрамды үткәреүсе хужаларҙың да күңеленә ятырға тейеш.

Һәр байрам уникаль һәм үҙенә айырым ҡараш һәм мөнәсәбәт талап итә. Мәҫәлән, туй тантанаһы биҙәлеше еңеллек һәм нәфислекте күҙ алдына баҫтыра һәм, әлбиттә, бындай сараға биҙәлгән зал ҡунаҡтарҙы үҙенең ауырлығы менән баҫмаҫҡа һәм тантана сәбәпселәре - кейәү менән кәләштең матурлығын ҡапламаҫҡа тейеш. Ә балалар өсөн ойошторолған байрам, киреһенсә, үҙенең төҫтәр сағыулығы, күңеллелеге менән күҙгә бәрелеп торорға тейеш. Башҡа байрамдарҙың да үҙенсәлеген күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Мәҫәлән, залды биҙәүҙән тыш, ашъяулыҡтан алып өҫтәлгә ҡуйыласаҡ тәрилкәләр ҙә зал интерьерына, тантанаға тура килергә, бер-береһен тулыландырып, залға биҙәк өҫтәргә тейеш.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕР РӘХМӘТ ӨСӨН...

## күберәк изге ғәмәлдәр ҡылайыҡ!



**Ноябрь аҙағында Мәләүез ҡалаһында үткән "Изгелек эшләйек" республика ижади марафонында төрлө йәштәге байтаҡ кеше менән игелек, миһырбанлыҡ, изге ғәмәлдәр тураһында һөйләшергә тура килгәйне. Изгелек төшөнсәһен һәр кем үҙенсә аңлағанын, үҙенең күңел торошонан, эске халәтенән тормош тәжрибәһенән сығып баһалауын аңланым шунда.**

Мәҫәлән, ҡасандыр үҙе финанс ауырлығын кисергән кеше мохтаждарға бағыусы ярҙамын күрһәтеүҙе иң изге ҡылыҡ тип иҫәпләй. Ә ҡасандыр ҡаты ауырып түшәктә ятҡан кеше үҙен аяҡҡа баҫтырырға бөтә көсөн һалған медицина хеҙмәткәрҙәрен Алиһәгә, изге фәрештәләргә тиңләй. Бер ниндәй сәбәпһеҙ яҡынына бүләк тәҡдим итеүҙе лә, автобуста оло йәштәгеләргә урын биреүҙе лә, белмәгән кешегә юл өйрәтеп ебәреүҙе лә, әсә-атаһына ярҙам итеүҙе лә изге эштәр рәтенә индереүселәр булды.

Сөләймән исемле егеттең яуабы оҡшаны миңә: "Кемгәлер ярҙам иткәне өсөн кеше аҡса һорамаһа йәки башҡа төрлө иғтибар, бүләк, хатта рәхмәт һүҙе өмөт итмәһә - шул изгелек була. Юғиһә, йыш ҡына, хатта рәхмәт тә әйтмәне, тигәнде ишетергә тура килә. Тимәк, ул ярҙамы өсөн ниҙер көткән булып сыға. Бындай әҙәмдәр рәхмәт һүҙенең ни тиклем ҙур көскә, оло мәғәнәгә эйә булғанын белмәй ҙә булһа кәрәк. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара, тип, атай-олатайҙарыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Ысынлап та, ябай ғына ошо һүҙҙе ишетһәң, күңел яҡтырып, донъя нурланып, еңел булып киткән һы-

Шулай уҡ төҫтәргә лә ҙур иғтибар биреү мөһим. Уларҙың тантана уҙасаҡ урынға ғына түгел, хатта йыл миҙгеленә лә тура килеүе байрамға тантаналы төҫ бирәсәк. Ғөмүмән, был эштә ваҡ, әһәмиәтһеҙ нәмә юҡ, барыһы ла бер-береһен тулыландырып килеүсе элемент булараҡ сығыш яһай һәм залды биҙәгән оҫталар ошо юғарылыҡҡа етһә, тантананың уңышлы үтеүенә ҙур аҙым эшләнгән, тигән һүҙ. Минең агентлыҡ нәҡ ошоға ынтыла ла инде.

### Эшҡыуарлыҡ - тимәк, хәрәкәт итеү

Ни өсөн мин тап ошондай эшкә тотонорға булдым? Ни өсөн нәҡ үҙемде эшҡыуар булараҡ күрҙем һәм был өлкәлә эшләргә, яңынан-яңы офоҡтар асырға һәм киңлектәрҙе айҡарға ҡурҡманым? Бер яҡтан ҡараһаң, башҡа өлкәлә лә яраткан эшеңде эшләргә була. Был осраҡта һиңә бер нәмә хаҡында ла борсолорға, уйларға, ниндәйҙер хәл ителәһе мәсьәлә, төрлө проблемалар хаҡында баш ватырға кәрәкмәй, сөнки барыһы ла һинең өсөн уйланылған, эшләнгән һәм һин бары тик кемдеңдер фекерен, идеяһын тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итеүсе ролендә генә сығыш яһайһың. Ләкин миҙалдың икенсе яғы бар. Кемгәлер эшләү үҙеңдең ижади үҫешеңә ҡамасаулау тигән һүҙ, ә мин нәҡ үҙемдең идея һәм уй-хыялдарымды тормошҡа ашырырға теләйем. Эйе, ҡайһы саҡта ул идея ифрат шәп килеп сығыуы, икенсе осраҡта иһә ахмаҡлыҡ булып күренеүе, ҡайһы берҙә тормошҡа ашмаҫҡа һәм финанс яҡтан ғына түгел, ә рухи яҡтан да ҙур юғалтыуҙарға алып килеүе бар. Ләкин эшҡыуар һүҙенең тамырына күҙ һалайыҡ, ул "эш" һүҙенән килеп сыҡҡан, тимәк, эшҡыуарлыҡ - эшләүҙе, башҡарыуҙы, хәрәкәт итеүҙе, алға ынтылыуҙы үҙ эсенә ала. Минең бер урында тороуҙы, йә булмаһа ҡул ҡаушырып, эш көтөп ултырыуҙы енем һөймәй. Шуға күрә кемдеңдер "шулай эшләгәндә ҡайһылай һәйбәт булыр ине", "ошоно эшләп ҡарарға ине" һәм башҡа ошондай һүҙҙәр һөйләп, ваҡытын бушҡа үткәреүен күреп йәнем әрней, сөнки үҙем күптән инде ҡоро һүҙҙән эшкә күстем.

Донъяның ғәҙелһеҙлеге, мәғәнәһеҙлеге, ауырлығы хаҡында күп һүҙ йөрөтөргә була, тик батырсылығың етеп, тормошоңдо үҙ ҡулыңа алып, уны яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырышыу күпкә ҡыҙыҡлыраҡ һәм файҙалыраҡ, тип уйлайым. Һәм минең өсөн быны нәҡ эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эҙләү, табыу, хәл итеү яҡшы, сөнки эшҡыуарлыҡтан килгән килем алып барылған эшмәкәрлектең кешегә кәрәк булыу-булмауының, тимәк, ниндәйҙер кимәлдә тормоштоң үҙгәреүен йәки бер урында тороуын күрһәтеүсе аныҡ миҫал. Әгәр ҙә һин ысынлап та кешегә кәрәкле, ҡыҙыҡлы һәм файҙалы эшмәкәрлек менән булһаң, килем буласаҡ, ә киреһенсә икән, тимәк, бер кемгә лә кәрәкмәгән эш менән булышаһың, тигән һүҙ. Ошо факттан сығып ҡарағанда, минең эшем кешегә кәрәк һәм тормошто сағыуыраҡ итеүҙә һәм матур иҫтәлектәр ҡалдырыуҙа үҙ ролен теүәл үтәй.

### Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр

Эшҡыуарлыҡ менән булыу үҙеңә оҡшап етмәгән, күңеленә ятмаған ысынбарлыҡты үҙгәртергә мөмкинлек бирә, ә тирә-яҡта ниндәйҙер яҡшы үҙгәреш булһын өсөн, тәү сиратта, үҙеңдә ошондай үҙгәрештең булыуы мөһим. Тимәк, был өлкәлә эшләүсе, тәү сиратта, үҙе өҫтөндә аныҡ, көсөргәнешле эш алып бара, үҙен яҡшы яҡҡа үҙгәртә. Эшҡыуар - позитив ниәттәр, уй-хыялдар менән йәшәргә һәм эшләргә бурыслы, сөнки шул ваҡытта ғына ул үҙенең эшмәкәрлеге аша файҙа килтерергә һәм тирә-яҡҡа шатлыҡ өләшергә мөмкин. Ә тирә-яҡтағыларҙың эшҡыуар башҡарған эшкә рәхмәт тойғоһо уға туҡтамай ижад итеү сығанағы булып тора һәм артабан үҫеүгә көслө стимул бирә. Эшҡыуарлыҡ кешегә яуаплылыҡ ҡына һалмай, шулай уҡ төрлө хәүеф-хәтәргә, көтөлмәгәнлеккә әҙер булыуҙы һәм уларҙан сығыу юлын табыуҙы ла күҙ уңында тота. Был өлкәлә эшләүемдең нигеҙендә, беренсенән, үҙемә оҡшаған эшмәкәрлектән лайыҡлы килем алыу булһа, икенсенән, үҙ эшен асырға теләгән, ләкин ниндәйҙер кәртәне үтергә (бында кешенең ялҡаулығын, үҙ-үҙенә ышанысы юҡлығын һәм шулай уҡ төрлө административ кәртәләрҙе алырға була) ҡыймаған кешегә, айырыуса йәштәргә, ниндәйҙер кимәлдә өлгө булыу теләге лә ята. "Йөҙ ҡат ишеткәнсе, бер ҡат күр", тиҙәр, бында ла шулай: оҙон итеп һөйләгәнсе, үҙеңдең эшмәкәрлегең аша барыһын да күрһәтеү һәм асыҡлыҡ индереү күпкә тәьҫирлерәк. Ләкин уңышлы эшҡыуар булыу өсөн бары тик көслө теләк кенә етмәй, бының өсөн ныҡышмалы эш тә, бизнеста күптән эшләгән кешеләр менән аралашыу ҙа һәм, иң мөһиме, ваҡыт менән дөрөҫ эш итә белеү кәрәк. Шулай уҡ был өлкәлә эшләүсе башҡа эшҡыуарҙы, фирманы үҙеңдең конкурентың итеп түгел, ә коллегаң булараҡ ҡабул итеү ҙә күпкә отошло. Шәхсән үҙем ошо юлдан атлайым һәм әлегә тиклем бының өсөн үкенес тойғоһо кисергәнем юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрам, тәү сиратта, күңел торошо. Шуға күрә күңел тыныслығы булмаһа һәм йөрәкте төрлө борсоуҙар өйкәһә, бер ниндәй ижадсы ла, ойоштороусы ла байрамға тантана төҫө бирә алмаясаҡ. Ә был өлкәлә эшләүсе эшҡыуарҙың күп уңышы нәҡ клиенттың кәйефенә, күңел торошона бәйле. Шул уҡ ваҡытта үҙ-үҙенә һәм башҡаларға адекват күҙлектән сығып ҡараған, һәр аҙымына аныҡ һығымта эшләй белгән һәм һөҙөмтәле эшкә йүнәлтелгән тормош позицияһы булған эшҡыуарҙың барлыҡ башланғыстары ла уңышлы буласағына шик юҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

маҡ, ошо ваҡытта ихлас әйтелгән рәхмәт ҡабул булалыр, тип уйлайым", - тигәйне ул.

Кеше мөнәсәбәттәре лә баҙар иҡтисадына күсеп барған мәлдә йәшәйбеҙ. Бәләкәй генә йомош өсөн дә бүләк өмөт итәбеҙ, кемдер ярҙам иткәне өсөн үҙебеҙ ҙә аҡса һонорға әҙербеҙ. Яңыраҡ автобусҡа ингәндә сумкаларын мендерергә ярҙам иткән үҫмергә оло йәштәрҙәге ханым аҡса һуҙҙы. Егет тә юғалып ҡалманы: эргә-тирәһендәгеләрҙең ғәжәпле ҡарашын тойһа ла, ҡағыҙ киҫәген йомарлап кеҫәһенә тыҡты. Ҡатын да, үҫмер ҙә ҡәнәғәт ҡалды, әммә иң мөһим ғәмәл башҡарылманы - рәхмәт һүҙе әйтелмәне. "Изгелектең әжере - изгелек бит, ярҙамы өсөн аҡса түләп, егетте шунан мәхрүм иттегеҙ ", - тинем. "Бирһен, бирергә ҡулымдан килә, бер түгел, ике пенсия алам. Минең рәхмәтте кеҫәһенә һала алмай бит ул", - тине ханым эре генә ҡиәфәттә.

Күптән түгел бер таксист та: "Күптәр хәҙер рәхмәт һүҙен ҡулланмай. Аҡсаһын ҡулға тотторалар ҙа ишекте "шап" ябып сығып китә. Ҡайһы берҙә түләмәйенсә ысын күңелдән рәхмәт әйтһендәр ине, тип уйлап ҡуям. Шуғамы икән, эшемдән кинәнес ала алмайым", - тип торғайны.

Бәйғәмбәребеҙ,әҙәм балаһы саң бөртөгө тиклем йәки унан да кесерәк изгелек ҡылған булһа ла, ул юғалмай; кем дә кем кескәй генә насарлыҡ эшләй икән, ул да онотолмаясаҡ, уның да язаһы буласаҡ, тигән һәм кешеләргә күберәк изгелек эшләргә бойорған. "Изгелектәрҙә, хәйерле эштәрҙә бер-берегеҙ менән уҙышығыҙ, ярышып йәшәгеҙ", - тигән.

Һәр кемебеҙҙең йыл һайын иҫке йылды оҙатҡанда, Яңы йылдан яңыса йәшәй башлайым, тигән йәшерен ниәте була. Унда беҙ төрлө теләктәребеҙҙе, маҡсаттарыбыҙҙы индерәбеҙ. Мәҫәлән, Яңы йылдан спорт менән даими шөғөлләнәсәкмен, ваҡытымды төрлө сериалдарға бүлмәйәсәкмен йәки тренажерҙарға йөрөйәсәкмен, туғандарыма ваҡытты күберәк бүләсәкмен һ.б. Ошондай уйҙарыбыҙ араһында Яңы йылда изге эштәр күберәк ҡыласаҡмын, тигән маҡсатыбыҙ ҙа урын алһын ине.

Әйҙәгеҙ, ысынлап та, бер-беребеҙгә мәрхәмәтлерәк булайыҡ, бер-беребеҙгә эскерһеҙ ярҙам итәйек. Тирә-йүнебеҙҙәгеләргә яғымлыраҡ, ихласыраҡ булайыҡ. Зарланмайыҡ, шөкөр итәйек. Күркәм сифаттарыбыҙ менән бер-беребеҙҙең тормошон биҙәйек, ярышып-уҙышып хәйерле эштәр башҡарайыҡ. Беҙҙең арабыҙҙа һәр беребеҙҙең йылы ҡарашына, яҡшы һүҙенә, ярҙамыбыҙға, иғтибарыбыҙға, яратыуыбыҙға мохтаждар бик күп. Бәйғәмбәребеҙ, ярҙам итер өсөн зәғифтәрҙе (ауырыуҙарҙы) эҙләп кенә йөрөгөҙ, арағыҙҙа шундайҙар булып тороуы сәбәпле, һеҙгә ярҙам да, йәшәр өсөн ризыҡ та бирелеп тора, тигән.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...



# ТАРИХЫБЫҘҘЫ ӨЙРӘНӘЙЕК!

## Уны белмәйенсә, киләсәккә барып булмай

**Күптәр тарих - "ул ҡоро факттарҙан, сәйәси осорҙарҙан, бер хакимдың икенсе хакимға алмашыуынан ғына тора" тип фекер йөрөтәлер. Ләкин тарихты комплекслы процесс рәүешендә аңлау дөрөҫөрәк булыр. Тарих фәнендә лә, башҡа өлкәләрҙәге һымаҡ, бер ябай ҡанун йәшәй: барҙан юҡ булмай, юҡтан бар булмай.**

Тарихтың иң төп асылы - ул тәжрибә. Тәжрибә, үҙ сиратында, кешенең мәҙәни үҫешендә һәм уның менталитетында сағыла.

Шул уҡ ваҡытта тарихта сәйәси етәкселәрҙең эшмәкәрлеге төрлө яҡтан өйрәнелә. Әйтәйек, Рәсәй императоры Александр Беренсенең бөйөк сәйәсмән булып формалашыуына уның бала саҡ тәрбиәсеһе йоғонто яһай. Йәмғиәт уйлап сығарған төрлө сәйәси-стратегик технологиялар, алдынғы фекер йөрөтөү, ғилми асыштар, техниканың алға китеүе хатта ҡайһы бер илдәрҙә боролоштарға алып килгән. Былар барыһы ла бик ҡыҙыҡлы.

Рәсәй тарихының ҡайһы бер һынылышлы осорҙарына килгәндә, мәҫәлән, XX быуаттың иң мөһим ваҡиғаһы - ул белем биреү системаһын модернизациялау. Совет идарасылары грамотаһыҙлыҡты тулыһынса тигәндәй юҡҡа сығара. Илдә меңәрләгән уҡыу йорто ишектәрен аса, уҡытыусылар әҙерләнә. Бөтә халыҡ рухи яңырыу кисерә.

Башҡортостан тарихына уның географик урынлашыуы, ҡаҙылма байлыҡтары булыуы ла ҙур йоғонто яһай. Элегерәк башҡорттарҙың ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғын алыуы һәм ошо хоҡуҡты яҡлап көрәшеүе уларҙы халыҡ булараҡ формалаштыра.

Башҡортостан тарихында 1917-1920 йылдар ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Был көсөргәнешле осорҙа алдынғы ҡарашлы йәштәр Башҡорт автономияһын төҙөүгә өлгәшә.

Тарихты өйрәнеү алымдары ла төрлө. Ысынбарлыҡты төшөнөүҙә тәүсығанаҡҡа таяныу зарур. Тарихи документтар, теге йәки был тарихи осорҙоң көнүҙәк көнитмешен сағылдыра, бынан тыш, бәлки, айырым кешеләрҙең кәйефен, донъяуи ҡарашын да тасуирлай.

Башҡортостан тарихында иң сағыу осор - ул XVIII быуаттың 30-сы йылдарындағы башҡорт ихтилалдары. Ниндәй күренекле етәкселәр булған! Уларҙың береһе - башҡорт батыры Миндеғол Юлаев, йәки Ҡараһаҡал. Билдәле булыуынса, ул үҙен хан тип таныта. Уның төрлө халыҡтар араһында дәрәжәһе юғары була, уҡымышлылығы, бер нисә тел белеүе билдәле.

Халыҡҡа килгәндә, шуныһы мәғлүм. Ихтилалдар хужалыҡтарға ҙур зыян килтергән. Ләкин улар иҙеү, эҙәрлекләүгә ҡаршы дәррәү күтәрелгән. Халыҡ үҙенең ергә булған аҫаба хоҡуҡтары өсөн көрәшкән. Йәғни улар менән иҡтисади мотив идара иткән.

Батша администрацияһының да маҡсаттары бик үҙенсәлекле. Беренсенән, башҡорт өлкәһен тулыһынса яулап алыу һәм һалымға ултыртыу. Икенсенән, Урал ерҙәре - Урта Азияның киң биләмәләрен, сауҙа юлдарын һәм ҡаҙылма байлыҡтарын баҫып алыу буйынса бер плацдарм ролен башҡарырға тейеш була. Әйтергә кәрәк, Уралдағы ер байлыҡтары байтаҡ рус металлургтарының ҡыҙыҡһыныуын уята.

Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ. Күп кенә тотҡонға эләккән кешеләрҙең ғаиләһен, балаларын алпауыттарға бирәләр, ә ҡайһыларын Балҡан илдәренә хеҙмәткә ебәрәләр. Ошо кешеләрҙең дә яҙмышы эҙләнеүҙәргә мохтаж.

Тимәк, әйтелгәндәрҙән сығып фекер йөрөткәндә лә, тарих - ул көнүҙәкте өйрәнеү, йәшәйеш, сәйәси мәсьәләләрҙең иҡтисади юҫыҡтарға бәйләнешен, етәкселек итеү алымдарын анализлау. Тарих халыҡтың ауыҙ-тел ижадында, йыр-моңонда сағылыш тапҡан, был иһә мәҙәнилектең айырылмаҫлыҡ өлөшө.

Ә инде ҡалыплашҡан, әммә бер заманда ла актуаллеген юғалтмаған фекергә килгәндә, тарих - ул беҙҙең шанлы ла, данлы ла тарихыбыҙ, уны, тамырҙарыңды белмәйенсә, киләсәккә барып булмай. Шуның өсөн, әйҙәгеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек!

**Рәсих ЗӘЙТҮНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның өлкән уҡытыусыһы.**

***✓ Хыялдарҙы тормошҡа ашырыу түгел, йәшәп танһыҡ ҡанманы. Шуға күрә лә, ғүмерегеҙҙең ҡәҙерен бөгөн белеп, йәшәрегеҙҙе бөгөн йәшәп, изге ниәттәрегеҙҙе бөгөн атҡарып ҡалығыҙ, тип бөтә донъяға ҡысҡырыр инем.***

# АХЫРЫЗАМАН МЕНӘН бөгөнгө ғүмеребеҙҙе

**Бейек тауҙың күркәмлеге, олпатлығы ситтән, алыҫтан тороп ҡарағанда яҡшыраҡ күренә, тиҙәр. Тап шуның кеүек, ҡайһы бер ваҡиғаларҙың мөһимлеген, әһәмиәтле булыуын билдәләү өсөн дә шул ваҡиға булып үткәндән һуң күпмелер ваҡыт үтеүе талап ителә. Барыһын да ваҡыт һынай. Шуға күрә лә һәр йылды оҙатҡан саҡта унда булып үткән ваҡиғаларҙы күҙ уңынан үткәргәндә һәм уларҙы башҡалары менән сағыштырып ҡарағанда ғына күп нәмәгә күҙ асылып ҡала, ҡайһы бер ваҡиғалар әһәмиәтен, төҫөн юғалта, ҡайһылары үҙенең әһәмиәте менән балҡый төшә, хәтер һандығында урын ала. Гәзитебеҙҙә "Ситтән тороп диалог" рубрикаһын тап ошо маҡсатта астыҡ та инде. Унда һәр ваҡыт баш ҡалабыҙҙан алыҫта йәшәүсе дуҫтарыбыҙ, әүҙем авторҙарыбыҙ ҡатнаша, үҙенең теге йәки был ваҡиғаға, күренешкә, фекергә мөнәсәбәтен белдерә. Был юлы ситтән тороп һөйләшеүҙә Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе шағир, прозаик һәм журналист, гәзит уҡыусыға "Ябай кешенең ҡатмарлы фекерҙәре" яҙмалары менән таныш сәмле һәм тәрән фекерле авторыбыҙ Урал МОСТАФИН, Мәләүеҙҙә йәшәүсе дуҫыбыҙ һәм рухташыбыҙ, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, "Көнгәк" гәзитенең баш мөхәррире, журналист Сәйфулла ӘМИРОВ, Әбйәлил районының Хәлил урта мәктәбе уҡытыусыһы-новаторы, педагог-психолог, шағир һәм драматург Радик ӨМӨТҠУЖИН ҡатнаша.**

**► Уҙып барған йылда ил тормошонда ла, республикала ла бик күп ваҡиғалар булды, үҙегеҙҙең шәхси тормошоғоҙҙа ла хәтерҙә ҡалғандары булмай булмағандыр. Уларҙың ҡайһыһы һеҙҙең өсөн төп ваҡиға итеп нарыҡланыр?**

**С. ӘМИРОВ:** Дүртенсегә олатай булыуым шәхси тормошомдағы иң иҫтәлекле ваҡиға һәм оло бәхет тип теркәлер хәл, тип уйлайым. Республика кимәлендәгеһе - Миәкә районы Илсеғол ауылы янындағы Нарыҫтауҙа Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (с.ғ.с) сәхәбәләре ҡәберенә уларҙың исемдәре яҙылған таҡтаташ, семәрле тимер комплекс урынлаштырыу, унда меңәрләгән кеше йыйылып, зыярат ҡылыу. Ә донъя кимәлендәге ваҡиға - ул беҙҙән 600 яҡтылыҡ йыл алыҫлығында Ергә оҡшаш планета асылыуы.

**У. МОСТАФИН:** 2011 йылда донъя торошона сағыу тәьҫир иткән, тормош ағышына йәки йәшәйеш шарттарына киҫкен үҙгәрештәр индергән таң ҡалдырырлыҡ йәиһә аңды албырғатырлыҡ хәл-ваҡиғалар булманы кеүек. Донъя халыҡтарының йәшәйешен, киләсәген хәл итерҙәй процестарға Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының битараф булыуы хайран ҡалдыра. Төрлө милләттәрҙең иң алдынғы ҡарашлы һәм абруйлы вәкилдәрен берләштергән ойошма донъяуи хәл-ваҡиғаларҙы ыңғай баһа биреп, тәьҫирле йоғонто яһап, кешелек өсөн хәүефһеҙ яҡҡа йүнәлтә алырға хаҡлы һәм тейештер, тип ышанһаң, улай түгел икән. Үҙҙәрен американлылар тип атаған халыҡтар төркөмө Ер шарының төрлө төбәктәрендә, бер ниндәй тыйыуһыҙ, нимә теләһә, шуны ҡылды. Бигерәк тә сағыу миҫал - 2011 йылда АҠШ-тың ҡуштандары менән мосолман илдәренә дөйөм һөжүме. Был һөжүмдең маҡсаты мосолман илдәрен бер-береһенә ҡаршы ҡуйып тарҡатыу, көсһөҙләндереү һәм, һөҙөмтәлә, үҙҙәренә тулыһынса буйһондороу ине. Улар үҙ маҡсаттарына ҡәҙимге өлгәште: күп илдәрҙә хөкүмәт етәкселеге алышынды, Европа, Африкала Американың йоғонтоһо көсәйҙе, НАТО-ның абруйы нығынды.

**Р. ӨМӨТҠУЖИН:** Ваҡиғаларҙың донъя, ил, республика, район, ауыл кимәлендәгеләре күп булды инде ул. Әммә улар минең ихтыярға, йоғонтоға һәм тырышлыҡҡа бәйле булмағас, уларҙы мин ситтән күҙәтеүсе ролендә генә ҡатнашам. Шуға күрә үҙемә бәйлеләрен генә атап үткем килә. Уҙып барған йылдың төп ваҡиғаһы - быйыл ҡыҙым беренсе класҡа уҡырға барҙы, оло донъяға тәүге аҙымдарын яһаны. Был уның үҙе өсөн дә, әсәһе менән минең өсөн дә, олатаһы менән өләсәләре өсөн дә ваҡиғаларҙың ваҡиғаһы. Шәхсән үҙемә генә килгәндә, минең сценарий буйынса төшөрөлгән "Алмабикә" исемле башҡорт кинофильмы зәңгәр экрандарға сыҡты һәм, әйтергә кәрәк, ҙур ғына резонанс алды. Бынан тыш тағы ла "Башҡорт теле уҡытыусыһы" район конкурсында Гран-при яуланым. Алла бойорһа, республика конкурсында ҡатнашырмын, тием.

**► Мөғжизәләргә ышанаһығыҙмы, әллә барлыҡ мөғжизәләр кешенең фиҙаҡәрлегенә, ныҡышмалы хеҙмәтенә генә бәйле, тип уйлайһығыҙмы? Шулай ҙа, Яңы 2012 йылда ниндәй хыялығыҙҙың тормошҡа ашыуын мөғжизә итеп күргегеҙ, шуға ышанғығыҙ килә?**

**С. ӘМИРОВ:** Мөғжизәләргә ышанам. Улар бөтәһе лә кешенең ысынбарлыҡты нисек ҡабул итеүенә бәйле. Ҡәҙимге әйберҙе лә мөғжизә тип ҡабул итергә мөмкин, шулай уҡ ысын мөғжизәне лә тейешле әйбер тип һанарға була. Киләһе йылға пландар байтаҡ, тик уларҙың тормошҡа ашыуын мөғжизә тип түгел, ә ысынбарлыҡ тип ҡабул итәсәкмен. Был юҫыҡта кемдер уңышты тиҙерәк яулай, икенселәргә иһә уны көтөргә кәрәк.

**У.МОСТАФИН:** Мөғжизә көтөү өсөн кеше үҙенең күңелен уны ҡабул итергә әҙерләргә, өйрәтергә, күңелен аса белергә тейештер. Сөнки, ғәҙәттә, беҙ көндәлек йәшәйештәге үҙебеҙ өсөн уңай, яҡшы, файҙалы күренештәрҙе лә ваҡытында күреп, баһалап, күңелебеҙ менән ҡабул итеп, ҡыуана белмәйбеҙ. Мөғжизә көткән кеше уға ҡаршы бер аҙым булһа ла эшләргә тейеш. Мөғжизә үҙенә ышанған тырыш, һәләтле кешеләргә генә осраусан. Мәҫәлән, ҡаты ауырыған кеше тороп китһә, "Үәт, мөғжизә!" тиҙәр. Уның күпме көс, тир, һыҙланыуҙарҙан күҙ йәштәрен түккәнен кем күргән дә, кем белгән? Әйтеүе генә анһат! Уйлап ҡараһаң, көн дә балаларыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы, яҡындарыбыҙҙы күреп, күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыу, уларҙың имен-һау йән-тәндәренең йылыһын тойоу үҙе тормошҡа ашҡан хыял! Иҫ киткес мөғжизә! Сөнки был бәхеткә бөгөн яҡты донъяла йәшәгәндәр генә эйә! Теге донъялағылар был турала хыяллана ла алмай. Улар был донъяның михнәттәренән дә, рәхәттәренән дә мәхрүмдәр. Беҙ шуны аңлайбыҙмы? Көндәлек тормош мәшәҡәттәренән арынып, бер-беребеҙгә йылы һүҙ әйтергә, йылы ҡараш бүләк итергә әҙербеҙме? Кемделер маҡтап, кемделер хуплап, кемделер арҡаһынан һөйөп ебәрергә һәләтлебеҙме? Ай-һай, күптәр әҙер түгелдер, сөнки йәнебеҙҙә ҡырыҫлыҡ, тәкәбберлек арта.

Ғүмере буйы Баймаҡ районында йәшәп тә, Талҡаҫ күлен күрмәгән кешеләр бар. Мин үҙем, ике йыл буйына көн һайын Темәскә йөрөп эшләгән осорҙа, көнөнә ике тапҡыр Бәхтигәрәй ауылы тәңгәлендәге Ирәндектең иң бейек түбәләренең береһе - Соҡаташ (985м) эргәһенән үткән һайын, ошо ҡая башына менеп, тирә-яҡты күрер кәрәк ине, тип хыялланып йөрөнөм. Пугачев ихтилалы баҫтырылғас, ул тау башында ҡасҡындар йәшеренеп ятҡан, унда борондан ҡалған эре-эре таштарҙан ҡоролған ҡәлғә кеүек ҡоролмалар бар икән, тигән риүәйәттәр ҙә ишеткәнем булды. Ләкин, һәр ваҡыттағыса, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, ул маҡсатыма өлгәшмәнем. Хәҙер, үҙаллы бара алмаҫ хәлгә ҡалғас, һау саҡта еңел генә тормошҡа ашырырлыҡ маҡсат хыялға әүерелде. Һау кешегә ябай ғына атҡарырлыҡ маҡсат бер мәл тормошҡа ашмаҫлыҡ мөғжизәгә әйләнер тип кем уйлаһын? Яҙмыш нимә ҡылмай әҙәм балаһы менән: бурыстарҙы үтәү, хыялдарҙы тормошҡа ашырыу түгел, йәшәп танһыҡ ҡанманы. Шуға күрә лә, ғүмерегеҙҙең ҡәҙерен бөгөн белеп, йәшәрегеҙҙе бөгөн йәшәп, изге ниәттәрегеҙҙе бөгөн атҡарып ҡалығыҙ, тип бөтә донъяға ҡысҡырыр инем. "Бөгөн эшләреңде иртәгәгә ҡалдырма", тип халыҡ бушҡа әйтмәгән.

**Р. ӨМӨТҠУЖИН:** Мөғжизәләргә ышаныу булмаһа, фиҙаҡәрлектең, ныҡышмалы хеҙмәттең мәғәнәһе юҡ. Ғөмүмән, кешене донъяла мөғжизәгә ышаныу көсө йәшәтәлер, тим. Кеше был донъяла ниндәй уңыштарға ғына өлгәшмәһен, улар барыһы ла сағыштырмаса баҫҡыс. Шуға күрә, бер тапҡыр үргә артылып, уның мөғжизәлеген татығас, артабанғы үрҙәр барлыҡҡа килмәһә, был кимәл ғәҙәтигә әүерелә һәм мөғжизә булыуҙан туҡтай. Шул уҡ ваҡытта мөғжизәгә ышаныу һәм ынтылыу бер туҡтауһыҙ мөғжизә артынан ҡыуыуҙы ла аңлатмайҙыр, тим. Әйтәйек, шундайын һыу һөлөгөндәй сибәр ҡыҙға ғашиҡ булған егет уның күңелен яулауҙы мөғжизәгә өлгәшерҙәй маҡсат итеп ҡуя һәм быға өлгәшә, ти. Артабан уларҙың мөхәббәт емеше булып балалары тыуыуы - икенсе мөғжизә, икенсе балалары тыуыуы - өсөнсө, дүртенсеһе - дүртенсе, ә инде ейәндәре донъяға һөрән һалыуы - мөғжизәнең мөғжизәһе була ала.

**► Хәҙер "Кем эшләмәй - шул ашамай" тигән мәҡәл үҙенең әһәмиәтен юғалтты. Ҡыл да ҡыбырҙатмайынса, көнө-төнө тир түккән кешегә ҡарағанда яҡшыраҡ йәшәгән кешеләрҙең һаны көндән-көн арта ғына бара. Намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһе лә хәҙер тик түбән хаҡҡа ялланып эшләүсе гастарбайтерҙар өсөн генә ҡулланылған һымаҡ. Ни өсөн?**

**С. ӘМИРОВ:** Был ваҡытлыса күренештер, тип уйлайым, сөнки уны коммунистар заманында йыш ҡабатлаһалар ҙа, мәҡәл байтаҡ йылдар элек барлыҡҡа килгән. Тимәк, ул ниндәйҙер партия идеологияһы түгел, ә уны кешелек үҫешендәге төп принциптарҙың береһе тип ҡабул итергә кәрәк. Ни өсөнмө? Гастарбайтерҙар ҙа, килмешәктәр ҙә дәүләт нигеҙен тәшкил итә алмай, сөнки улар илдең яһалма граждандары.

Яһалма - ул ваҡытлыса, ул ҡасан да булһа юҡҡа сыға. Ил етәкселеге быны аңлағас, атап үтелгән мәҡәл дә эшләй башлаясаҡ, гастарбайтерҙар ҙа үҙ илдәренә кире ҡайтасаҡ. Ҡарағыҙ, беҙҙә егерме йылдан ашыу уларҙың арзан хеҙмәте ҡулланыла, ләкин телебеҙҙә был атаманың тәржемәһе лә юҡ.

**У. МОСТАФИН:** "Кем эшләмәй, шул ашамай" - ғәҙел принцип, йәшәйеш тәғлимәте ине әүәлерәк. Ул һәр шәхесте иҫ белгәндән хеҙмәткә өйрәтте, әүҙемлеккә күнектерҙе, фиҙаҡәрлеккә күндерҙе. Аяғында баҫып тора алған һәр ғаилә ағзаһының өй эштәрендә үҙенең бурыстары булды. Һәр кем ғаиләһе алдында үҙенең яуаплылығын танырға, тойорға өйрәнде. Өлгәшкән уңыштары өсөн лайыҡлы маҡтау, хуплауҙар, йылы һүҙҙәр ишетеп, йәне дәртләнеп үҫте. Бөгөн эшләмәй ҙә "...шашып ашай ташыйҙар". Шулай тип яҙғайным бер шиғырҙа. Ни өсөн ул әйтемдең бәҫе кәмене һуң? Кеше аңының анһатҡа тиҙ ылыҡҡаны, хәрәмгә еңел һатылғаны өсөн! Элегерәк һәр эш кешеһе хеҙмәтенә күрә эш хаҡы алды. Ниндәй хеҙмәттә, ҡайҙа эшләһә, күпме аласағын алдан белде. Ҡайһы эштә кем ниндәй эш хаҡы алыуы бер кем өсөн дә сер булманы. Эшсе нормаһын арттырып үтәһә, премияһын да алды, эш хаҡын да директорынан артыҡ алды. Ә хәҙер ойошмаларҙағы эш хаҡы - хөкүмәт кимәлендәге сер! Ваҡыты-ваҡыты менән йә уҡытыусыларға, йә врачтарға яҙа-йоҙа ғына хәйер өләшеләә, хәрбиҙәргә, милиция хеҙмәткәрҙәренә ҡәҙимге тос ҡына өлөш ташлайҙар, улар кәрәгерәк. Кемдәргә икәне бер кемгә лә сер түгелдер. Шуға ла "Үҫкәс кем булаһың?" тигән һорауға күп балалар, президент, олигарх, банкир булам, тиҙәр.

***Мөғжизә үҙенә ышанған тырыш, һәләтле кешеләргә генә осраусан. Уйлап ҡараһаң, көн дә балаларыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы, яҡындарыбыҙҙы күреп, күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыу, уларҙың имен-һау йән-тәндәренең йылыһын тойоу үҙе тормошҡа ашҡан хыял! Иҫ киткес мөғжизә! Сөнки был бәхеткә бөгөн яҡты донъяла йәшәгәндәр генә эйә! Теге донъялағылар был турала хыяллана ла алмай. Улар был донъяның михнәттәренән дә, рәхәттәренән дә мәхрүмдәр. Беҙ шуны аңлайбыҙмы? Көндәлек тормош мәшәҡәттәренән арынып, бер-беребеҙгә йылы һүҙ әйтергә, йылы ҡараш бүләк итергә әҙербеҙме? Кемделер маҡтап, кемделер хуплап, кемделер арҡаһынан һөйөп ебәрергә һәләтлебеҙме? Ай-һай, күптәр әҙер түгелдер, сөнки йәнебеҙҙә ҡырыҫлыҡ, тәкәбберлек арта.***

***✓ Улар баш ҡалабыҙҙан алыҫта йәшәһә лә, тормошҡа үтә яҡындар, шул тормоштоң эсендә ҡайнайҙар. Ошондайын ғәм, сәм, рух һәм ынтылыш бар сағында, бирешмәҫбеҙ, барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп сығырбыҙ, Алла бойорһа…***

# ЯНАУҘАРҘАН ҠУРҠЫП...

## йәшәргә онотмайыҡ



Бер кемдең дә уҡытыусы, доктор, игенсе, малсы, токарь, сварщик, инженер булғыһы килмәй. Бөтәбеҙ ҙә алыпһатарға әүерелһәк, кем кейендерер, ашатыр, мал үрсетер, йәшәйеш сығанаҡтарын үҫтерер, тормошобоҙҙо хеҙмәтләндерер икән? Хаж сәфәрен үҙ көсөң менән намыҫлы тапҡан аҡсаға ҡылыу сауаплы була икәне билдәле. Ҡайһы берәүҙәр хажға барыуҙы йыл һайын йөрөй торған экскурсияға әүерелдерҙе. Көс, тир түгеп алған аҡсаға улай уҡ иркен йөрөп булмайҙыр. Ҡайһы бер ғаиләләр аслы-туҡлы, мохтажлыҡ кисереп йәшәгән мәлдә артыҡ килемдәрен яңы фатир, машина, экскурсияларға исраф иткәнгә ҡарағанда, фәҡир, зәғиф, сырхау, етемдәргә сарыф итһәләр, сауабы күберәк булыр ине. Тура ултырып ҡырын һөйләп булмаҫ...

**Р. ӨМӨТҠУЖИН:** Ысынлап та, бөгөн донъяла хәләл көс менән тупланған бол ғына гонаһһыҙ икәнен онотоу күҙәтелә. Шуға күрә лә бөгөн күп осраҡта кем эшләмәй, шул ашай булып сыға. Бының сәбәптәрен аңлатыр өсөн том-том китаптар яҙырға кәрәк булыр ине. Шулай ҙа, был хәлдең сәбәптәрен бер генә һөйләм менән аңлатыу шарты ҡуйылһа, шулай тип әйтергә мөмкин булыр ине: был хәл дин менән дәүләт, әхлаҡ менән закондар араһындағы айырманың ҙур булыуынан киләлер, тип уйлайым.

**▸ Донъяла барған интеграция, глобалләшеү процестары милләтебеҙгә яңыса фекерләү һәм эш итеү талабын ҡуя. Беҙ үҙгәрмәһәк тә, фекерләүебеҙҙе үҙгәртергә бурыслы. Беҙ донъяла барған глобаль үҙгәрештәрҙән ситтә лә тороп ҡала алмайбыҙ, шул уҡ ваҡытта, һаҡланып ҡалабыҙ тиһәк, ул процестарға тулыһынса ҡушылыуҙан да тыйылырға тейешбеҙ. Шулай түгелме?**

**С. ӘМИРОВ:** Бында инде шуны аңлау мөһим: беҙ үҙгәрмәүҙән генә һанап кителгән процестар туҡтап ҡалмаясаҡ. Әҙәм ғәләйһи үәссәлләмдән алып донъя шул тиклем үҙгәргән, үҙгәрә һәм үҙгәрәсәк. Шуға күрә милләт үҙ йөҙөн юғалтмайынса, ул үҙгәрештәрҙе ҡабул итеп, заман талаптарына ҡушылырға бурыслы.

**У.МОСТАФИН:** Әлбиттә, йәшәү дәүерендә кеше аңы камиллаштырған йәшәү шарттарынан, фән, ғилем үҫеше һөҙөмтәләрен ҡулланыуҙан, яңы тормош тәжрибәләрен үҙләштереүҙән, бөтә донъя халыҡтары файҙаланған көнкүреш уңайлыҡтарынан баш тартыу ахмаҡлыҡ булыр ине. Ләкин глобалләшеү, интеграция барышында кешеләр, халыҡтар бер-береһенән яҡшы ғәҙәттәр, юғары технологиялар, алдынғы тәжрибә, яңы эш ысулдары үҙләштереү менән бер рәттән, үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәрен дә юғалта. Мәҫәлән, әүәлерәк беҙҙең атай-олатайҙар осрашҡанда ике ҡул биреп күрешеп, яҡын күргән кешеләре менән хатта ярым ҡосаҡлашып, хәләхүәлен белешеп, осраған кешегә үҙенең ихтирамын, ышанысын күрһәтер ине. "Һаумыһығыҙ!" - был яғымлы, мәрхәмәтле, игелекле сәләмләүгә башҡорт халҡына ғына хас йомшаҡлыҡ, татыулыҡ, туғанлыҡ тойғолары һалынған. Үкенескә күрә, улай яҡын күреп иҫәнләшеү "моданан" сығып бара. Күптәр иғтибарһыҙ ғына "привет", "сәләм" тигән ауаздар менән сикләнә. Ошо ябай ғына миҫал ситтән үҙләштерелгән ғәҙәт, холоҡтар үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ниндәй тәрән тәьҫир яһауын күрһәтә. Ул яйлап бер милләт кешеләрен генә түгел, бер тоҡом, нәҫел ағзаларын да тарҡата, бер-береһенән һыуындыра, алыҫлаштыра.

Был осраҡта, япон халҡының милли традицияларына тоғролоғона һоҡланам. Башҡа илдәр, ерҙәрҙә ниндәй генә үҙгәрештәр бармаһын, улар осрашҡанда һаман да үҙҙәренә генә хас тыйнаҡлыҡ менән баш эйеп тәбрикләшә, улар ғына бер-береһенә иғтибарлы, ихтирамлы, ярҙамсыл. Балаларына бигерәк тә һаҡсыл, йомшаҡ, ололарына иҫ киткес итәғәтле мөнәсәбәттәрен һаҡлайҙар. Шуға күрәлер ҙә, бер-береһенә таяныс, ышаныслы булғандары өсөн, япон халҡы ғына үлемесле ҡыйралыш, һәләкәттәрҙе берҙәм һәм лайыҡлы кисерә белә.

Башҡорт халҡы борондан башҡаларҙан ситләшеп йәшәмәгән, күршеләре, башҡа милләт халыҡтары менән һәр ваҡыт тығыҙ сауҙа-иҡтисади бәйләнештә торған, ләкин, ятҡа ярайым тип, үҙ асылына хыянат итмәгән. Бөгөн дә халҡыбыҙ өсөн интеграция, глобалләшеүҙең ыңғай яҡтары бәхәсһеҙ һәм байтаҡ, ләкин хәүефле һөҙөмтәләре телебеҙҙе боҙоп һөйләшеүҙә, боҙоҡ ғәҙәттәрҙә, тотанаҡһыҙ тәртиптә, әҙәпһеҙлектә, хәрәм менән хәләлде бутауҙа, мәғәнәһеҙ, маҡсатһыҙ йәшәүҙә асыҡ күренә. "Теле көсһөҙләнгән халыҡтың рухиәте менән бер рәттән йәшәү дәирәһе лә ҡыҫырыҡлана", тигән аҡыл эйәһе Ломоносов. Ниңә яттарға ярап, яттарға оҡшап, бер-береһен танымаған "ҡырҡ ата балаһы" булып йәшәгәндәргә эйәреү көслө икән беҙҙә, ғәжәп!

**Р. ӨМӨТҠУЖИН:** Был мәсьәләгә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарарға кәрәктер, тием. Ни өсөн тигәндә, меңәр йылдар буйы йәшәгән, үҙ фәлсәфәһе, мифологик эпосы булған милләт һуңғараҡ осорҙа формалашҡан милләттәр ыңғайына һикерәндәп, сабышып йөрөй алмай. Икенсенән, минеңсә, фекер бер ваҡытта ла үҙгәрмәй. Ул бар һәм буласаҡ. Ул - илаһи асыл, ул - абсолют хәҡиҡәт. Ә бына фекерҙе төрлө төҫтәге ҡағыҙға төрөп биреү, бәлки, фекерләү тип аталалыр ҙа. Шулай фекерләй торғас, изгелек эргәһендә яуызлыҡ, мөхәббәт эргәһендә нәфрәт хасил булғандыр ҙа, кем белә. Һәр хәлдә, һулыш алған һайын беҙ һайлау хоҡуғына эйәбеҙ: изгелекме ул, яуызлыҡмы, асылмы, әллә интеграциямы, әллә глобалләшеүме?

**▸ Бар донъя ахырызаман етәсәк, тип хәүефләнеп көткән 2012 йылдың 21 декабрь көнөн нисек үтер тип күҙаллайһығыҙ? Нимә генә тимә, халыҡта "Утһыҙ төтөн сыҡмай" тигән мәҡәл дә бар бит әле… Хоҙай нисек кенә мәрхәмәтле булмаһын, кешелектең гонаһтарын кисереп өлгөрә лә алмай киткәндер һәм бының өсөн хөкөмөн ебәреүе лә мөмкин, тигән уй ҙа инеп сыҡмаймы башығыҙға?**

**С. ӘМИРОВ:** Иманым камил, 2012 йылдың 21 декабренән һуң 22,23,24 декабрҙәр ҙә буласаҡ һәм беҙ, ошо һөйләшеүҙә ҡатнашыусылар, "Киске Өфө" гәзитенең 2013 йылдың 1 ғинуарында донъя күргән һанында мотлаҡ осрашасаҡбыҙ. Был дата Майя цивилизацияһындағы бер осор бөтөп, икенсеһенә күскәнде генә аңлата. Ахырызаман ҡасан етере тик Аллаһу Тәғәләгә генә билдәле. Ул биргәнгә шөкөр итеп йәшәйек, милләтебеҙҙе һан һәм сифат яғынан да үҫтерәйек.

**У. МОСТАФИН:** Йәшәү дәүерендә бөтә ҡазаларҙы ла үҙ башына әҙәм балаһы үҙе ойоштора. Шул ҡазаларҙың сираттағыһы ахырызыманды тыуҙырмаҫ тип кем әйтә ала? Атом бомбаһы запастары ер йөҙөнән кешелекте бер нисә тапҡыр юҡ итерлек күләмдә йыйылған, тиҙәр. Кешелек бөгөнгә ҡәҙәр 55 тапҡыр ахырызаманды кисергән, тигән фаразға ышанмаҫҡа дәлилдәр юҡ. 56-сы тапҡыр булыуына ниңә ышанмаҫҡа? Кешеләр йәшәү сығанаҡтарына, тәбиғи ресурстарына, үҙ һаулығына бөгөнгө кеүек йыртҡыстарса мөнәсәбәттә булыуын дауам итһә, тыныс, етеш ғүмере 100-150 йылдан артыҡ түгелдер, тип күҙалларға ла була.

Икенсенән, ерҙә йәшәүселәрҙең һаны юғары темптар менән арта бара, ә тәбиғи ресурстар, эсәр һыу запастары, аҙыҡ-түлек етештереү катастрофик рәүештә кәмей. Әгәр 1807 йылдан 1927 йылға тиклем 120 йыл эсендә халыҡтар һаны 1 млрдтан 2 млрдҡа тиклем артһа, һуңғы ваҡытта 12 йыл эсендә генә 6 млрдтан 7 млрдҡа тиклем артты. Эйе, һан яғынан кешелек әүҙем темптар менән үрсей, ә сифат яғынан хәлдәр нисек? Йәнебеҙҙә боронғо сабырлыҡ, сыҙамлыҡ, түҙемлек етерлекме икән? Кем баһалар? Бөгөн үк Ер шарында йәшәүселәрҙең 3 млрды эсәр һыуға, 2 млрды сифатлы туҡланыуға мохтаж. Һаныбыҙ артыу киләсәктә аҙыҡ-түлеккә, эсәр һыуға мохтажлыҡты тағы ла арттырыуы көн кеүек асыҡ. Тимәк, илдәр, халыҡтар араһында ғына түгел, айырым кешеләр араһында ла йәшәү сығанаҡтары өсөн көрәш киҫкенләшәсәк. Шул сәбәптән донъяла "көслөнөкө замана" принцибы урынлашһа, ахырызаман тыуҙы тигәнде аңлатыр ҙа инде. Ә был процестар төрлө төбәктәрҙә бөгөн үк күҙәтелә.

Өсөнсөнән, һәр быуындың ғүмерендә микроахырызамандар йыш булып тора. Бөтә хәл-ваҡиға, бәлә-ҡазаларҙы әҙәм балаһы үҙенә нисек ҡағылыуына ҡарап баһалай. Ул хәлдәрҙә кем нисек ҡатнаша, кем ниндәй зыян күрә, кем нисек кисерә - бөтә айырма шунда ғына. Донъяһы, тоҡомо, ғаиләһе ҡырылғандарға теләһә ниндәй ҡаза - ахырызаман. Кемдәр өсөндөр ахырызаманды 1917 йылда В.Ульянов, 1941 йылда - А.Шикльгрубер, 1991 йылда Б. Ельцин ойошторҙо. Шулай тип әйтеүселәр үҙҙәренсә хаҡлылар, сөнки, имен ҡалғандар өсөн замана болаһы кеүек кенә булһа, кемдәрҙер өсөн был осорҙағы үҙгәреш, юғалтыуҙар афәткә әүерелде. Шундай бер сираттағы донъяуи һәләкәттән һуң бер кем дә имен ҡалмаһа, ул хәл-ваҡиғаны кем ахырызаманмы, әллә икенсе бер күренешме тип баһалар?

"Утһыҙ төтөн сыҡмай". Кешеләр үҙҙәренең дөрөҫ йәшәмәгәнен төпкө аңдары менән яҡшы аңлай, шуға ла, ҡасан булһа ла, язаһын алырҙарын һиҙәләр. Ҡасан, ҡайҙан килер ул яза, шуны ғына күрәҙәләп маташалар ҡыҙыҡ өсөн. Экрандарҙағы ахырызаман менән янауҙарҙан ҡурҡып, йәиһә "тәтәй" тормошҡа ымһынып, алданып ултырып, бөгөнгө ғүмеребеҙҙе йәшәргә онотмаһаҡ ине.

**Р. ӨМӨТҠУЖИН:** Аң юғалтыу, аҡылдан яҙыу, бәлки, донъя ахырылыр? Аңыбыҙ томаланмаһа, рухыбыҙ саф булһа, өмөт саҡыһы бер ваҡытта ла һүнмәҫ, тим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иғтибар итһәгеҙ, беҙҙең әңгәмәселәребеҙ береһе лә йығылып китеп тормошҡа зарланманы, кемгәләр үпкәләмәне, асыу сығарманы, үтеп барған йылдағы ваҡиғаларға, тормошобоҙҙағы хәл-күренешкә һәүетемсә генә үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе. Нисек кенә булмаһын, негативҡа урын юҡ уларҙың күңелендә һәм уйҙарында. Ни өсөн тигәндә, улар баш ҡалабыҙҙан алыҫта йәшәһә лә, тормошҡа үтә яҡындар, улай ғына ла түгел, шул тормоштоң эсендә ҡайнайҙар. Ошондайын ғәм, сәм, рух һәм ынтылыш бар сағында, бирешмәҫбеҙ, барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп сығырбыҙ, Алла бойорһа...**

***Башҡорт халҡы борондан башҡаларҙан ситләшеп йәшәмәгән, күршеләре, башҡа милләт халыҡтары менән һәр ваҡыт тығыҙ сауҙа-иҡтисади бәйләнештә торған, ләкин, ятҡа ярайым тип, үҙ асылына хыянат итмәгән. Бөгөн дә халҡыбыҙ өсөн интеграция, глобалләшеүҙең ыңғай яҡтары бәхәсһеҙ һәм байтаҡ, ләкин хәүефле һөҙөмтәләре телебеҙҙе боҙоп һөйләшеүҙә, боҙоҡ ғәҙәттәрҙә, тотанаҡһыҙ тәртиптә, әҙәпһеҙлектә, хәрәм менән хәләлде бутауҙа, мәғәнәһеҙ, маҡсатһыҙ йәшәүҙә асыҡ күренә. "Теле көсһөҙләнгән халыҡтың рухиәте менән бер рәттән йәшәү дәирәһе лә ҡыҫырыҡлана", тигән аҡыл эйәһе Ломоносов. Ниңә яттарға ярап, яттарға оҡшап, бер-береһен танымаған "ҡырҡ ата балаһы" булып йәшәгәндәргә эйәреү көслө икән беҙҙә, ғәжәп!***

Әмир ҒҮМӘРОВ
ойошторҙо.

ӘЙҘӘГЕҘ...



# ЙОЛАЛАРЫБЫҘҘЫ ТЕРГЕҘӘЙЕК!

**Халҡыбыҙҙың борон-борондан һаҡланып килгән матур йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре бихисап. Уларҙың быуындан-быуынға тапшырылып, беҙҙә тәрбиәләүе, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлауы әһәмиәтле. Шундай матур йолаларҙың береһе ул - ҡиәмәтлек ҡыҙ, ҡиәмәтлек ул ҡабул итеү.**

Байым ауылында йәшәгән Зөлфиә Рахманғолова һәм уның ҡиәмәтлек әсәһе Рәҡиә инәй Арыҫланова менән осрашыу күңелемдә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Рәҡиә инәй 8 балаға ғүмер биргән бәхетле әсә. Тик бер ҡыҙының вафат булып ҡалыуы ғына уны мәңгелек ҡайғыға һала. Йылдар үткәс, ауылдарына килен булып төшкән йәш уҡытыусы ҡыҙҙы күреп, Рәҡиә инәй терт итеп ҡала. "Шул тиклем минең ҡыҙыма оҡшағайны ул. Хатта танауҙарына тиклем..." - тип йылмайып хәтерләй хәҙер инәй. Ә Зөлфиә апай был иҫтәлекле ваҡиғаны шулай хәтерләй:

- 1979 йыл тамамланып, 80-се йыл башлана торған декабрҙең һуңғы көнө. Беҙҙә ошо миҙгелдең матур бер көнөндә туйға саҡырҙылар. Минең Байымға килен булып төшкәнемә алты йыл. Ике ҡыҙым бар. Миңә - 26, иремә 28 йәш. Туйҙа шул тиклем кеше күп. Туған-тыумаса, күрше-күлән, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар-береһе лә ҡалмаған. Шул мәжлестә Рәҡиә апай миңә: "Ҡыҙым, һин кем булаһың әле? Беҙ быйыл көҙ генә Ҡуяндар ауылынан күсеп килдек. Һине күреп йөрөйөм, бик итәғәтле, аҡыллы бала күренәһең. Ҡайһы яҡтан килдең, ата-әсәйең кем?"-тип өндәште. Мин бер аҙ үҙем менән таныштырҙым. Ата-әсәйем мәрхүм булыуын әйттем. Шул саҡ Рәҡиә апай: "Мин һине үҙемә ҡиәмәтлек ҡыҙ итеп алһам, риза булырһыңмы?"-тип һораны. Мин бер аҙ аптырап ҡалдым. "Ҡыҙым, риза бул, ҡатнашып йәшәрбеҙ. Минең ҡыҙҙарым алтау ине. Әнисәм үлеп ҡалды. Мин һине шул балама оҡшатам. Башҡа ҡыҙҙарым алыҫта йәшәй", - тине. Туйҙа ултырған ҡунаҡтар: "Зөлфиә, риза бул, Рәҡиә апай яҡшы кеше",- тип өгөтләне. Мин ризалыҡ бирҙем.

23 февраль байрамына Рәҡиә апай беҙҙә, үҙенең туғандарын, шаһит итеп мәктәп директоры Разия Вәдүт ҡыҙы Ирназарованы ла ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ҡыҙым, кейәүем, тип ҡулдәк кейҙерҙе, башҡаларға ла бүләктәр таратты. 8 март байрамына Рәҡиә апайҙа ҡунаҡта булғандарҙы мин саҡырҙым һәм ризалыҡ билдәһе тип бүләктәр бирҙем. Шул көндән алып, 31 йыл әсәле-ҡыҙлы булып йәшәйбеҙ. Былтыр бар балалары йыйылған табында әсәйем: "Ошо балама ғына мал бирмәнем", - тип, миңә бер башмаҡ бирҙе. "Әсәйеңдән иҫтәлек итеп тот",-тине ул.

Балалар бәләкәй булғанда уларҙы әсәйҙәргә ҡалдырып китә инек. Әсәйемдең башҡа балалары һәр саҡ "апай" тип өҙөлөп тора, бүләген дә, күстәнәсен дә тотоп килә-бер туйҙан да ҡалдырмайҙар. Һуғым аштарын бергә ашайбыҙ, һәр байрамда бергәбеҙ. Ҡайғымды ла, шатлығымды ла уртаҡлашырлыҡ, аҡыл-кәңәштәрен биреүсе Кеше менән осраштырҙы мине яҙмыш. Әсәй, тип әйтә алыуым менән бик бәхетлемен...

Эйе, күмәк бала тәрбиәләп үҫтереп тә, тағы берәүһен сит тип тормай йөрәгенә баҫҡан, уны ишле ғаиләгә алып, оло бәхет бүләк иткән Әсә - Рәҡиә инәй алдында, уның лайыҡлы, хәстәрлекле, изге күңелле балаһы - Зөлфиә апай алдында баш эйге килә. Ошондай кешеләр бар саҡта, беҙҙең башҡортобоҙҙа ғаилә бәҫе һәм ҡото тағы ла артыр, иншалла.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**
**Баймаҡ районы.**

АФАРИН!

# ГЕЛ ЙЫЛМАЙЫП ЙӨРӨЙӨМ,

## шуға дуҫтарым күп минең...



**(Башы 1-се биттә).**

- "Сулпылар" фестивале нисек үткәнен, уның нисек төшөрөлгәнен яҡшы белә инем, сөнки мин үҙем дүрт йәшемдән "Тамыр" студияһында шөғөлләнәм. Бәләкәйерәк саҡта тауыҡ себеше кеүегерәк көлкөлө ролдәрҙә уйнап йөрөһәм, урта төркөмгә күскәс, йырлай-бейей башланым һәм был шөғөлдәрҙең күңелемә ныҡ оҡшағанын аңланым. Хәҙер сәхнәлә үҙемде ярайһы ғына ышаныслы тоям, оялыу кеүек тойғолар кисермәйем. Төрлө программаларға төшкәндә, режиссер апай-ағайҙар йылмайырға ҡуша, хатта мәжбүр итә, шуға хәҙер гел йылмайып йөрөү минең ғәҙәтемә инеп китте. Ҡайҙа барһам да, кем менән генә һөйләшһәм дә, йылмаям да ебәрәм. Йылмаймаған кеше аралашып бармай, уның менән һөйләшеүе лә еңел түгел, ә минең дуҫтарым күп. Ғөмүмән, гел йылмайып йөрөгәҙ, тип әйткем килә балаларға.

"Сулпылар"ҙа быйыл бигерәк тә һәләтле ҡыҙҙар һәм малайҙар ҡатнашты. Улар араһынан миңә бигерәк тә Баймаҡ ҡалаһынан Азамат Ғөбәйҙуллин, Ҡариҙел районынан Алина Нәбиуллина, Учалы ҡалаһынан Миләүшә Суфиянова һәм, әлбиттә, үҙем оҡшаным. Былай айырып әйтеүе лә ауыр, йырсыларҙың һәр береһен маҡтарға ғына мөмкин. Тапшырыуҙарҙы төшөрөүе лә көстө ала, уларҙың барыһы ла ундай саҡта ла үҙҙәрен батырҙарса тотто. Мәҫәлән, "Сулпылар"ҙың финал өлөшөн бигерәк оҙаҡ төшөрҙөк, минең синыфташтарым да килгәйне, хатта уларға ла оҙаҡ ултырырға тура килде, ялҡып та киткәндәрҙер инде.

Конкурс өс турҙан тора. Мин беренсе турҙа "Уҡытыусыма" тигән йырҙы башҡарҙым, икенсеһендә йырым "Тимер атым" тип аталды. Өсөнсө турға "Нисек шаҡ ҡатырайым" тигән бик күңелле йыр һайланым. Был йыр шаян малайҙар тураһында. Тормошта ла ҡыҙҙар - тыныс, малайҙар шуғыраҡ була. Мәктәптә лә беҙ беренсе синыфта уҡығанда бер йүгерергә тотонһаҡ, дежурныйҙар тотоп, яҙып алғансы хәлебеҙ бөтөп саба торғайныҡ. Студияла ла малайҙар менән шаярырға әҙер генә торабыҙ, мәҫәлән, оператор Урал ағайҙы берәй нисек шаяртырға була, ул бер ҡасан да үпкәләмәй. Малайҙар менән дуҫлашыуы ла еңел, ә ҡыҙҙар менән һөйләшкәндә уларҙы гел көлдөрөргә кәрәк, улар шуны ярата. Көлдөрөргә теләмәһәң дә көләләр.

Телевизор ҡараусылар йырҙарымды бик яратты, минең өсөн байтаҡ ҡына тауыш бирҙеләр, хәҙер инде уның иҫәбен дә теүәл генә иҫләмәйем, шулай ҙа уларҙың барыһына ла ҙур рәхмәт әйтәм. Финалға үткән йырсылар тураһында сюжет әҙерләнә, уның бер йырына клип төшөрөлә.

Өләсәйҙәр "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тип әйтәләр бит, был мәҡәл тап миңә ҡарата әйтелгән кеүек. Апай-ағайҙарым да, ҡусты-һеңлеләрем дә булмағанға күрә, өйҙә мин атайым менән әсәйемдең берҙән-бер ярҙамсыһы. Был эштәрҙе яратмаһам да, әсәйемә һауыт-һаба, иҙән йыуышам. Атайыма өйҙә ремонт эштәрендә булышам.

Айырым "Тамыр" каналы асылғас, беҙҙең эшебеҙ ҙә артып китте, тапшырыуҙарға йышыраҡ төшөргә тура килә. Быға тиклем "Семәр"ҙә Семәркәй менән һүрәттәрҙе ҡарап, уларҙы баһаларға тура килә ине, "Сәнгелдәк"-тә төшә инем. Әле Яңы йыл әкиәттәре эшләйбеҙ, текстар ятлайбыҙ, бер көндө төнгә өстә ҡайтырға тура килде, көскә-көскә карауатыма барып етеп, йоҡлап киттем. Әсәйем дә "Тамыр" студияһында эшләй, беҙ күп итеп төшһәк, улар ҙа уны монтажлап ултырырға тейеш булалар һәм төнгә тиклем эштән ҡайтмайҙар. Ә әсәй өйҙә булмаһа, күңелһеҙ.

Үҙемә Яңы йыл әкиәте төшөрөргә ҡушһалар, унда ваҡиғалар Йыһанда барыр ине. Планеталар буйлап сәйәхәт итеү ҡыҙыҡ та инде, Марста йәшәүселәргә барып, оса торған кораблдәрегеҙ ҡайҙа, нисек йәшәйһегеҙ, тип һорар инем. Яңы йылда барыһына ла теләктәренең тормошҡа ашыуын теләйем, минеке лә шулай уҡ ысынға әйләнһен. Ҡыш бабай барығыҙға ла бүләктәр, кәнфиттәр алып килһен. Ҡышҡы каникулды минең кеүек рәхәтләнеп саңғыла, санала шыуып, ҡар бәрешеп уйнап үткәрегеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мөғжизәле байрамда сер ҡапсыҡтарын алдан сисмәй торайыҡ әле, тип, Руслан менән енеүселәрҙең исемдәрен атамаҫҡа булдыҡ. "Сулпылар" телевизион конкурсының финалына барыһы 11 малай һәм ҡыҙ үтте. Уларҙың кемеһе ниндәй баһаға лайыҡ булыуын 31 декабрҙә "Сулпылар" тапшырыуын ҡарап белерһегеҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

КӨЛКӨФӨ



# АЙҘАР ҺӘМ... ВӘХИТ

## Гөрһөлдәү тауышы ишетһәгеҙ...

Баш ҡалабыҙ Өфө урамында йөрөп ятһам, ҡаршыма киң яурынлы, баһадир кәүҙәле берәүҙең килә яткаһын күреп ҡалдым. Ундайҙар әллә ҡайҙан диҡҡәтте үҙенә тарта бит. Икенсенән, ҙур кәүҙәле кешеләрҙә агрессия булмай, улар, асылда, нескә күңелле булыусан. Иғтибарлыраҡ ҡараһам, урам тултырып килеүсенең кем икәнен аңғарҙым. Эйе, тап үҙе, урыҫ телле башҡорт яҙыусыһы, шағир һәм тәржемәсе, Ейәнсура үһөргәне, "Башкирский девственник" романы авторы Айҙар Хәсәйенов үҙе килә ята, имеш. Янығараҡ мине төртмә теле менән бер "сағып" алыуы иҫкә килеп төштө. Эш былайыраҡ булды: "Башҡортостан" сауҙа үҙәгенә инһәм, ул ике ят әҙәм менән йөрөп ята. Айҙарҙың Мәскәүҙән килгән дуҫ шағирҙары икән. Айҙар оло нәҙәкәтлек менән беҙҙе таныштырҙы һәм илебеҙ баш ҡалаһынан килгән йәш шағирҙарға минең хаҡта шундайыраҡ характеристика бирҙе: "Он, несмотря на свою деревенскую внешность, пишет гениальные стихи, является классиком башкирской литературы, фәлән-төгән..."

Юҡ, мин Айҙарға үпкәләмәнем, ауылдан сыҡҡан кеше ауыл кешеһенә оҡшай инде ул. Шуға күрә уның был һүҙҙәрен комплимент итеп ҡабул иттем. Әле лә уның урам тултырып баҫып килеүен күргәс, халҡыбыҙҙың "Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр, тир, бөләр илдең балаһы бер-береһенә бахыр, тир", тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, үҙенә лә йыйылып китерлек комплимент әҙерләнем дә, килеп етер-етмәҫтән, һоғондорҙом:

-Айҙар, мин һинә алыҫтан уҡ иғтибар иттем. Тотош башҡорт ауылы килә ятамы, тиһәм, унан да күберәк, тотош башҡорт кавалерия полкы икән дә. Нимә, 1812 йылғы Ватан һуғышына 200 йыл тулыуға репетиция үткәреп йөрөйһөңмө?..

Айҙар был һүҙҙәремә гөрһөлдәп көлөүе менән яуап бирҙе. Яңы йыл көндәрендә Өфө урамында гөрһөлдәү тауышы ишетһәгеҙ, аптырамағыҙ: ул Айҙар Хәсәйенов булыр, минең һүҙҙәрҙән һуң ҡыуанысынан ул шулай туҡтай алмай көлөп йөрөй...

## Саранамә-кастинг

Өфөнөң иң баш Ҡыш бабайы Ҡарһылыуына кейәү һайлау йәһәтенән праймериз һымағыраҡ саранамәкастинг үткәргән, имеш. Уның һөҙөмтәләре буйынса бәхет ҡояшы нурҙары Башҡортостандың халыҡ артисы, "Арыҫлан" ир-азаматтар клубының әүҙем ағзаһы Вәхит Хыҙыровҡа йылмайған. Ҡыш бабайға кейәүҙәрҙән бҙл кандидатураһында туҡталырға Вәхиттең һуңғы клуб ултырыштарының береһендә яһаған белдереүе этәргес көс яһаған икән. Иҫегеҙҙә булһа, клубта барған күп ҡатынлылыҡ тураһындағы бәхәстә Вәхит Хыҙыров: "Ике көләш алып була, өсөүгә хәл етенкерәмәҫ", - тип әйткәйне. Үҙенә Ҡарһылыуҙың икенсе ҡатынлыҡҡа килеүе хаҡында ишеткәс, Вәхит: "Был праймериз менән мин прәме риза. Тик яҙ еткәс, Ҡарһылыуҙы ҡайҙа һаҡтармын икән? Баҫсамдағы атайым ебәргән ҡаҙҙарҙы һаҡтай торған ҡар базын иркенәйтеп ҡаҙмағанда..." - тип әйткән, имеш.

Һәр хәлдә, Ҡарһылыу үҙе лә Вәхиткә битараф түгел икән. Ул хатта Вәхиттең фамилияһына күсергә ризалыҡ биргән. Уны беҙ Яңы йылдан һуң Хыҙырова Ҡарһылыу Ҡышбабаевна тип беләсәкбеҙ инде.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Һуңғы йылдарҙа милли сәнғәтебеҙҙең киң массалы сағылышының мөһим бер сараһына әүерелә бара "Байыҡ" телевизион фестивале. Ни тиһәң дә, "Юлдаш" телеканалын бер нисә миллион кеше ҡарай. Был телепроект булараҡ, "Байыҡ" телевизион фестиваленең отошло яғы ғына түгел, уны ойоштороусыларҙың яуаплылығын талап итеүсе фактор ҙа. Күптән түгел "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында фестивалдең гала концерты тулы аншлаг менән уҙҙы. Сара шуны күрһәтте: йылдан-йыл популярлаша, камиллаша бара был бейеү байрамы. Фестивалде алып барыусы тележурналист, телевидениеның баш мөхәррире Рита Өмөтбаеваның "Байыҡ" фестиваленең телевариант башланғысы һәр йәһәттән хуплауға ғына лайыҡ. Уға, хөрмәтле жюри ағзаларына, ғөмүмән, халҡыбыҙ өсөн үтә лә мөһим был сараны үткәреүҙә һәм күрһәтеүҙә ҡатнашыусы барыһына ла рәхмәт һүҙҙәре әйтергә генә ҡала. Әйтергә кәрәк, йыл һуҙымында телеэкран аша конкурста сығыш яһаусыларҙы күҙәтеү, хәҙер килеп гала концертты тамаша ҡылыу бейеү сәнғәтен, ғөмүмән, сәнғәтебеҙҙе үҫтереү йәһәтенән мөһим проблемаларҙың барлығын да аңларға ярҙам итте. Ана шулар хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп үтмәксемен.**

# ҺИНЕ ҠАРАП, "БАЙЫҠ",

## күңелдәр ҡалды байығып…



Әйттергәндәр, теттергәндәр - сибайҙар.

### Башҡорт һикереп бейемәй

Залдағы меңләгән тамашасы һымаҡ, мин дә күберәк республика районларынан, ҡалаларынан килеүсе бейеү оҫталарының сығышын күрергә теләнем. Уларҙың урынына күберәк үҙебеҙҙең профессиональ бейеү коллективтары һәм Рәсәйҙең башҡа республикаларынан һәм күрше дәүләттәрҙән фестивалдә ҡунаҡ булып килеүселәр сығыш яһаны. Был хәл аңлашыла ла: данлыҡлы "Байыҡ" ана шулай бар донъя халыҡтары бейеүҙәре араһында үҙенсәлекле һынланыш алырға тейеш. Был бейеү сәнғәтебеҙҙе яңы дәүерҙә һәм яңы шарттарҙа оло донъяға сығарыуға ынтылыш та. Әммә был төүге ынтылыш түгел, заманында данлыҡлы бейеүселәребеҙ: Мөхәммәт Иҙрисов -"Байыҡ", Рәшиҙә Туйсина "Заһиҙә" бейеүҙәре менән донъя сәхнәләрен яңғыратҡайны.

Икенсенән, был фекерҙе бик күптәр яҡлай, профессиональ башҡорт бейеү сәнғәте хәҙерге көндә халыҡсанлыҡтан, милли традицияларҙан, рухи тамырыбыҙҙан алыҫлаша бара кеүек. Быны хәҙерге заман лөғәте менән әйткәндә, бейеү сәнғәтендәге ассимиляция, глобаллашеү тип тә атарға мөмкин булыр ине. Беҙҙең профессиональ бейеү ансамблдәренең бейеүендә башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш, мари, испан һәм башҡа халыҡтар элементтарының бергә буталыуы был фестивалдә, "Байыҡ" конкурсында ҡатнашҡан һәүәҫкәрҙәр йөнәшендә айырыуса күҙгә салынды. Бәлки, ул шулай уҡ та булып тойолмаҫ ине, әгәр ҙә ансамбль сығышынан һуң киләһе номерҙа бер ниндәй ҙә профессиональ белеме һәм өйрәтеүсеһе булмаған бәйгесе сығыш яһамаһа. Бәҡтиһән, беҙҙең профессионалдар халыҡсанлыҡты юғарыға күтәреү урынына, милли традицияларыбыҙҙан ситләшә генә бара икән. Ҡасан һәм ҡайҙа күргәнегеҙ бар һеҙҙең урыҫ, татар, сыуаш, мари, испан, чечен, осетин, ҡаҙаҡ, эстон, төрөк бейеүҙәренә башҡорт элементтары уҡмашып киткәнен? Башҡорт бит бер ваҡытта ла һикереп бейемәй, һәр хәлдә, ике аяғы ла бер үк ваҡытта юғарыға күтәрелмәй, бер бейеүҙә бер үк хәрәкәт ике тапҡыр ҡабатланмай, ҡабатланған хәлдә лә ул бейеүҙең сюжеты буйынса кәрәкле урында ҡулланыла.

Үҙ-үҙенә тогро булыуға ҡарағанда, башҡаларға оҡшарға тырышыу еңелерәкме икән? Бәлки, шулайҙыр. Әллә совет осоро сәйәсәтенең барлыҡ милләттәрҙе бергә ҡушып, берҙәм совет халҡы барлыҡҡа килтереү сәйәсәте башҡорт бейеү сәнғәтендә ошолай сағылыш тапҡанмы? Ярай, был хәл шул осор идеологияһы һөҙөмтәһе лә булды, ти, ә нинә хаталарҙы хәҙер төҙәтмәҫкә? Бындай бейеүҙәрҙе һалыусыларға Фәйзи Гәскәров, Йөнғәле Вәхитов, Йәүҙәт Бикбирҙин кеүек бейеү маһирҙарының һалған бейеү өлгөләренә күҙ һалыу ҙа етер ине. Әйткәндәй, мин мәрхүм Йәүҙәт Бикбирҙиндың яңы бейеү һалғанда нисек эшләгәненә шаһит булғаным бар. Башына бер фекер килһә, ул ашау-эсеүен, йоҡоһон онотоп, ҡара тиргә төшөп, тәүлектәр әйләнәһенә бейей торғайны. Ул сәхнәлә бер нисә секундта һынланыш алыр бер генә хәрәкәтте аҙналар буйына ижад итте. Гала концерт барышында Йәүҙәттең исеме телгә алынды алыныуға, әммә уның ҡайны бер бейеүҙәре бөтөнләй башҡа ҡуйыусыныҡы тип аталып, призлы урын яуланы. Беҙ уның һәр бейеүен, һәр хәрәкәтен беләбеҙ һәм киләсәктә үтәсәк фестивалдәрҙә бындай хәлдәргә юл ҡуйылмаҫ тип ышанабыҙ.

### Бейеүебеҙ асылы

"Башҡорт бейеүе шул уҡ сәсәнлек сәнғәте кеүек, импровизацион характерлы. Мин Өфөгә 1-се Республика мәктәп-интернатҡа уҡырға килгәнсе ауылда апаруҡ ҡына баҫыусы бейеүсе инем, концерттарҙа янғыҙ бейенем. Әммә унда барғас, бейегем килмәне, сөнки мәктәп-интернатта ҡуйылған бейеүҙәрҙе башҡарыр өсөн минең фекерем һәм тойғом талап ителмәгәс, бейеүҙең ҡыҙығы ҡалманы", тигәйне бер мәл Юлай ағай Ғәйнетдинов. Миненсә, башҡорт бейеүенең асылы күрөнә ошо һүҙҙәрҙә. Әйтәйек, ҡуйылған профессиональ бейеүҙе башҡарыу өсөн иң тәүҙә хәтер, теүәллек талап ителһә, халыҡсан бейеүҙе башҡарыу өсөн хис, йөрәк талап ителә. Йөрәктән сыҡҡан йөрәккә етә, тигән һымаҡ, фестивалдә икенсе характерҙағы бейеүселәрҙең тамашасыға ныҡыраҡ тәьҫир итеүе барыбер һиҙелде. Профессионалдарҙың сығышы был йәһәттән кино, ә конкурста ҡатнашыусыларҙыҡы театр тамашаһы кеүек. Ә бит театрҙа ваҡиға бына хәҙер, ошо моментта бара, хистәр ҙә, тойғолар ҙа, фекерҙәр ҙә әле, ошо мәлдә генә ярала. Әле генә яралған хис, тойғо, фекер тере була һәм ул терелек тамашасыға күсә.

Бынан бер йыл элек уҙған конкурстағы фекерҙәремде тағы ла ҡабатларға мәжбүрмен: донъяға яралғандан алып ат өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта беҙҙең йөрәкте ҡуҙғатыр, ғәмде уятыр өсөн бейеүҙәребеҙҙән ат тояғы тауышы ишетелергә тейеш. Йыл һуҙымында телевизор аша конкурс барғанда беҙ был тауышты аныҡ ишеттек, ә бына гала концертта линолеум түшәлгән сәхнәлә ат тояғы тауышы тамашасыға ишетелмәне. Бары тик "Мираҫ" ансамбле сығышында ғына беҙ был һөҙөмтәне тойҙоҡ. Улар бейеү барышында көйҙә туктатып, ат тояғы тауышы сығара башлауы булды, тамашасы гөлт итеп тоҡанды. Башымды ҡырҡырға бирәм: ат тояғы тауышы ишетелмәй икән, тамашасының йөрәге ҡупҡалиймай, йөрәге туламай, һөҙөмтәлә шундай оҫта башҡарылған бейеүҙең һөҙөмтәһе лә юҡҡа сыға. Ә кавказ халыҡтары бейеүҙәренә килгәндә, уларҙың бейеүенә беҙҙеке кеүек "ат тояғы тауышы" характеры хас булмағас, тамашасыларҙы ҡуҙғытыу йәһәтенән беҙҙең сәхнәгә ҡуйылған бейеүҙәр ҡайтышыраҡ күренде.

### Тағы ла…

Гала концертты алып барыусылар үҙ сығышында конкурс-фестивалдең 3-сө тапҡыр үтеүе тураһында әйтеп үтте. Мин уларға әҙерәк кенә төҙәтмә индереп үтәм: конкурс 4-се тапҡыр үтте. Уның тәүгеһе 1996 йылда Баймаҡ районында булды. Уны арҙаҡлы ил ағаһы Әкрәм Ниғмәтуллин ойоштторҙо. "Байыҡ" бейеү конкурсында ул саҡта Урал арьяғы һәм көньяҡ Башҡортостан районлары бейеү оҫталары ҡатнашты. Атаҡлы бейеүсе, "Байыҡ"ты донъя кимәленә алып сығыусы Мөхәммәт Иҙрисов конкурстың жюри рәйесе булды. Юлай Ғәйнетдинов үҙенең быйыл ғына донъя күргән "Ҡурай һәм Ҡурайсылар" китабында конкурс аҙағында "Байыҡ" оҫтаһының бейер алдынан әйткән һүҙҙәрен килтерә һәм был күренешкә үҙенең баһаһын бирә: "Ғүмер буйы "Байыҡ"ты бейенем, бейегән аҙымдарым бер нисә йөҙ саҡрым булғандыр, әммә әле һеҙҙең алдығыҙҙа әйләнеп баҫырға ҡыймай торам", - тигәйне. Был, әлбиттә, мәшһүр бейеүсенең арзан ҡыланыуы түгел, ә халыҡ сәнғәте, халыҡ таланттары алдында баш эйеүе. Тәүҙә көй булған, шунан бейеү, тип әйтергә ярата Мөхәммәт ағай. Ысынлап та, мәшһүр көй нигеҙендә мәшһүр бейеү тыуған. Байыҡ сәсәндең мираҫынан ошо бер миҫал ғына ла уның ни хәтле бөйөк шәхес, ижадсы икәнен күрһәтә..."

Ә бит, уйлап ҡараһаң, ошо һүҙҙәрҙә халыҡ сәнғәтенең асылын һаҡлауға йүнәлтелгән ни тиклем оло яуаплылыҡ ята.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Риза НӘҘЕРБАЕВ:** "Байыҡ" телевизион фестивален йыл дауамында күҙәтеп барам һәм уның гала-концертына Баймаҡ районынан уҡ килеп етәм. Үҙем ауыл кешеһе булһам да, башҡорт мәҙәни донъяһында нимә барғанын белеп торам.

Был гала-концерттың әһәмиәтен ҡайны берәүҙәр, бәлки, аңлап та етмәйҙер, ул кешенең тәненә, йөрәгенә шундай ҡеүәтле энергия бирә, ҡыуанып йәшәү өсөн дәрт-дарман алып, йәшәреп ҡайтып китәм. Бының сәбәбе - башҡорт бейеүенең Хоҙайҙың халҡыбыҙға бүләк иткән бер мөғжизә булыуындалыр. Үҙем йырлай ҙа, бейей ҙә белмәйем, әммә йыр-моңдо ла, бейеүҙе лә күңелем менән тоям, уларҙы яратам, бының өсөн артыҡ һәләт кәрәкмәй, бары тик йөрәгеңдең ихласлығы ғына кәрәк. Аллаһы Тәғәләнең бер ҡөҙрәте түгелме ни инде ошо?

"Байыҡ" йылдан-йыл камиллаша бара, профессиональ йәһәттән үҫешә. Быйыл гала-концерт өсөн дә тағы күберәк тырышлыҡ һәм матди саралар һалынғанлығы күренеп тора. Сәхнәлә йәштәр күберәк булһа ла, улар менән бер рәттән, оло быуын вәкилдәренең сығышы сараны тағы ла баҙлатып ебәрә. Костюмдары сағыу, дөрөҫ итеп тегелгән, элек район мәҙәниәт йорттарында бөтә бейеүҙәрҙе лә бер костюм менән бейегән замандар бар ине. Тик ҡайны саҡта баһалауҫыларҙың ҡарары менән килешмәгән саҡтар була, талаптар бигерәк юғары, әммә башҡорт бейеүе дөрөҫ йүнәлештә үҫешһен өсөн ҡатылыҡ та кәрәктер. Алыҫ ауылдан килгән икән, үҙенсә тырышҡан, ярай, шуның өсөн генә булһа ла юғары балл ҡуйыйыҡ, тип кенә бейеү сәнғәтен үҫтереп булмай. Бейеүҙе килештерә алмаған йәш кеше конкурстан үтмәһә лә, был сәнғәтте яратһа, бейеүҙән туҡтап ҡалмаясаҡ бит, киреһенсә, ныҡышып, тағы ла оҫталығын арттырырға тырышасаҡ. Шөкөр, халҡыбыҙ һәләтле, беҙ инде ҡартайғанбыҙ, хәҙер йәштәр ошоно аңлап, бейеүҙәребеҙгә, моңобоҙға тоғролоҡ һаҡлай алһа ине. "Байыҡ" йәш кеше күңелендә тап ошо сифаттарҙы тәрбиәләүе менән дә әһәмиәтле.

**Гүзәл НАҘАРҒОЛОВА:** Башҡортостан юлдаш телевидениеһының үҙенсәлекле бер визит карточкаһына әүерелгән "Байыҡ" проектын яратмаған кеше юҡтыр ул. Форсаты сыҡҡан һайын уны ҡарап, бейеүселәр менән бергә янып-көйөп ултырыусыларҙың араһында йәше лә, ҡарты ла булыуына иманым камил. Тапшырыуҙың шул тиклем танылыу яулауы, унда ҡатнашырға теләк белдереүселәрҙең күп булыуы халҡыбыҙҙың бигерәк дәртле булыуы тураһында һөйләй.

Гала-концерт быйыл тағы ла сағыуыраҡ булды, тип иҫәпләйем, тик сәхнәлә күберәк конкурстың ҡатнашыусылары сығыш яһаһа, тамашасыға ла, бейеүселәргә лә күңеллерәк булыр ине, сөнки уларҙың күбеһе барыбер номинация алыр өсөн генә булһа ла ауылынан килгән, сәхнә кейемен кейгән. Оло апайҙарҙың, ағайҙарҙың сығышын, ҡайһы бер төбәктәрҙә генә һаҡланған саф башҡорт бейеүе өлгөләрен күреү баш ҡала тамашасылары өсөн дә бер мәртәбә булыр ине. Былтыр, унан алдағы йылда ат, торна һәм башҡа йәнлек, ҡош-ҡорт булып бейеү модаға инеп киткәйне, уларға ҡарағанда быйылғы концерттағы "Байыҡ" бейеүенең төрҙәрен, "Генерал Игзаков" кеүек бейеүҙәрҙе халыҡ күпкә яҡшыраҡ ҡабул итте кеүек, "Байыҡ"тың исеме есемен тулыһынса аҡланы. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бейеүҙәренең гүзәл өлгөләрен дә сығарыу зарур хәҙер сәхнәгә.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

✓ *Аждаһа йылында донъяға килеүсе ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ҙур билдәлелек яулай. Бының өсөн уларға көслө заттың ярҙамы кәрәкмәй, хатта тик ир-егеттәр һөнәре һаналған өлкәләрҙә лә Аждаһа ҡатын-ҡыҙ уңыш ҡаҙана.*



ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...



# АЖДАҺА ЙЫЛЫНДА ТЫУЫУСЫЛАР...

## юғары рух көсөнә эйә

**Аждаһа йылында тыуыусыларға 2012 йылда 96, 84, 72, 60, 48, 36, 24 һәм 12 йәш туласаҡ. Ә бына 60 йәшлек юбилейын туйлаусылар тап Ҡара Аждаһа йылында донъяға килгән.**

Аждаһа йылында тыуыусылар юғары рух һәм йәшәү көсөнә эйә. Улар шул тиклем ғорур һәм үҙаллылар. Үҙ һүҙен һүҙ итмәй ҡалмайҙар. Хатта бер аҙ дыуамалыраҡ күренһә лә, уларҙың идеялары һәр ваҡыт үҙенсәлекле һәм һөҙөмтәле була. Аждаһалар өсөн ысын дуҫ табыуы ауыр. Әммә табылған дуҫына тулыһынса ышаныусандар. Аждаһа юхалана белмәй, ике йөҙлөләнеү улар асылында түгел. Бала сағынан уҡ булдырған принциптарынан тайпылмайҙар. Улар үҙҙәренән генә түгел, ә тирә-яғындағыларҙың да тулыһынса камил булыуын талап итә.

Ҡытайҙа борон Аждаһа титулын императорҙар йөрөткән. Шуға күрә был кешеләр властың төрлө билдәләрен үҙ эсенә ала. Аждаһалар бик әүҙем. Бер ҡасан да ҡәнәғәтләнеү хисе кисермәйҙәр, һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашығалар, эшһеҙ тора алмайҙар. Күп кенә Аждаһалар уңыш ҡаҙана. Әммә ғорурлыҡ һәм маһайыусанлыҡтары арҡаһында бар тормоштарын селпәрәмә килтерергә мөмкиндәр. Тик үҙ хистәрен контролдә тоторға өйрәнеп кенә улар ысын мәғәнәлә бөйөк шәхескә әүерелә.

Аждаһа ике йөҙлөлөктө шул тиклем яратмай, хатта ҡайһы бер осраҡта яҡшы мөнәсәбәтте, һөйөү хисен дә юхаланыу итеп ҡабул итеүе бар. Был ситуацияла улар кешегә үтә биҙҙергес тупаҫлыҡ, кәмһетеү менән ҡарай.

Аждаһа асыуы ҡабарғанда ҡурҡыныс, ләкин хистәрен ауыҙлыҡлай белә. Башҡаларҙы ла хаталары өсөн тиҙ ярлыҡай, хатта үҙ ғәйебен дә танып, ғәфү үтенергә мөмкин. Ул ололарҙы ололоҡлай, ғаиләһен ҡәҙер итә. Әгәр ҙә ниндәйҙер ауыр шарттар арҡаһында яҡындары менән бәйләнеш өҙөлә икән, уларға ярҙам кәрәк булғанда Аждаһа һис икеләнмәйенсә ярҙам ҡулы һуҙа.

Аждаһалар алыштарҙан ҡурҡмай һәм тиҙ генә еңеү яулай. Тик уларҙың бер генә етешһеҙлеге - ғорурлығы еңелеүгә килтерергә мөмкин. Сөнки улар яҡындарының кәңәшенә ҡолаҡ һалмай, бер ҡасан да ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәй, дошмандарының көсөн баһалап еткермәй. Бик ышаныусан булғанлыҡтан, Аждаһа үҙенә янаған ҡурҡынысты ваҡытында toймай, шуға күрә әҙерләнеп тә өлгөрмәй. Әгәр ҙә Аждаһаның ниндәйҙер маҡсаты бар икән, юлына ҡаршы төшөүҙән файҙа юҡ. Ул барыбер алдына алғанын эшләйәсәк.

Аждаһалар сәйәхәт итергә ярата. Улар йә иртә өйләнә, йә бөтөнләйгә яңғыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Улар өсөн ғаилә йылыһын ятраҡан эше, бихисап дуҫтары алмаштыра. Аждаһалар менән аралашыуы ауыр, сөнки сер һаҡлай белмәйҙәр. Көйөп киткән мәлдәрҙә улар бар уйҙарын асып һалыуы бар. Аждаһалар тыумыштан лидер. Ҡайһы ваҡытта улар хаҡында "паровоз алдында йүгереүсе", тиҙәр.

Аждаһа йылында донъяға килеүсе ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ҙур билдәлелек яулай. Бының өсөн уларға көслө заттың ярҙамы кәрәкмәй, хатта тик ир-егеттәр һөнәре һаналған өлкәләрҙә лә Аждаһа ҡатын-ҡыҙ уңыш ҡаҙана. Шулай уҡ Аждаһа йылында тыуған ҡатын-ҡыҙҙы рәнйетергә ярамай, юғиһә, улар ҡыйырһытыусыны маҡсатлы рәүештә язаламайынса туҡтамай. Аждаһа ҡатын-ҡыҙҙар көслө заттан үҙҙәрен тиң күреүҙе талап итә. Улар өсөн бер-береһен хөрмәт итеүгә ҡоролған йәмғиәттә йәшәү бәхет. Был гүзәл заттар береһенә лә көнләшеп ҡарамай, шуға күрә ваҡ этлектәр һәм мәкер ҡормай.

Әгәр ҙә бала Аждаһа йылының көслө дауыл, йәшенле көнөндә донъяға килһә, уның бар ғүмере көтөлмәгән ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығыу, көрәштә үтәсәк. Ә тыныс көндә тыуыусылар яҙмышы бәхетле, улар һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек йөҙөп йәшәйәсәк, тип һанай ҡытайҙар.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠЫМЫҘ ЭСӘЙЕК -

## милләт йәшәһен, сирлеләр сихәтләнһен

**Бөгөн беҙҙе уратып алған ер, һыу, һауабыҙ аяуһыҙ бысраныуға дусар ителгән заманда көн дә тәғәм ҡылған икмәгеңә ҡәҙәр уйланыбыраҡ, шикләнеберәк ҡарарға тура килә. Был һүҙҙәр өсөн изге икмәккәй рәнйемәһен, ғәфү итә күрһен инде, ғәйеп ризыҡта түгел, беҙҙең үҙебеҙҙә. Тирә-яҡ мөхит, экологияны һаҡламау, уға ҡороҡҡослоҡ ҡылыу ахырҙа ғәҙел яза рәүешендә кешелектең үҙенә кире ҡайта. Үҫемлекселек продукттары фәҡәт нитраттан тора кеүек хәҙер, айырыуса үҙең үҫтермәгән һәм һатып алынғаны, ситтән килтерелгәне пластик уйынсыҡтарға оҡшаш: хуш еҫе лә, тәме лә булмаған ялтыр алмалар, башҡа шундай "тәтәй" емеш-еләк. Уларҙың файҙаһынан зыяны күберәктер, моғайын. Эсәр һыуыбыҙ сифаты тураһында һөйләп торорға ла түгел.**



Хас та ғибрәтле әкиәттәге кеүек: ризыҡ күп, шөкөр, баҙар, магазин кәштәләре һығылып ята, ә шулай ҙа уларҙы һатып ала һалырға күңел тартмай. Кем нисектер, мин үҙем матур натюрмортлы картина эргәһенән үткәндәй, ҡарап ҡына китәм бындай рәттәрҙе. Емеш-еләк һуттары, ҙур пластик һауыттарға тултырылған эсәр һыу ҙа тулып ултыра. Уларҙы ла әллә ни (йәйҙе иҫкә алмағанда) үтемле тип әйтеп булмай. Ҡайһы илдең ниндәй шарттарҙа эшләүсе линияһында етештерелгәндер, ниндәй ингридиенттар ҡушылғандыр йылдар буйы һаҡланырға тейешле был эсемлектәргә - етештереүсеһе үҙе генә белә. Ә инде пластик һауыттарҙағы һыуҙы һыу үткәргестәрҙән тултырыуҙары хаҡында әллә күпме төрлө легендалар ишетергә тура килде бит инде. Был тиклеме беҙгә ҡараңғы, ләкин һатып алыусы хәҙер барыбер тауар, ризыҡ ярлыҡтарын ентекләп уҡырға тырыша (ундағы мәғлүмәттең дөрөҫлөгөнә бер кем дә гарантия бирә алмай, әлбиттә).

Гәзит уҡыусы фекер ебенең ҡайҙа йүнәлеүен аңлағандыр инде, ниһайәт. Бындай шарттарҙа иң яҡшыһы - үҙебеҙҙең республикала етештерелгәнде һәм тағы ла һәйбәтерәге - шәхси хужалығында үҫтерелгәнде ҡулланыу.

Үкенескә ҡаршы, һәр кемдең дә бындай мөмкинлеге юҡ, айырыуса ҡала халҡының. Шулай ҙа аптырап ҡалырға ярамай. Организмды даими рәүештә шлак һәм токсиндарҙан таҙартып (1), матдәләр алмашыныуын көйләп (2), витамин һәм микроэлементтарға бай аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк биреп (3) йәшәгән осраҡта буйтым ғүмер һөрөргә мөмкин әле, күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ һис тә. Әле генә әйтеп киткән ошо өс ҡағиҙәне бер юлы хәл итеү мөмкинлеге барлығын да беләһегеҙҙер, моғайын? Был хаҡта "Киске Өфө"нөң быйылғы 41-се һанында ҡымыҙ һәм ҡымыҙ менән дауалау эшенә 50 йыл ғүмерен бағышлаған төплө белгесебеҙ - медицина һәм иҡтисад фәндәре докторы, профессор, академик, РФ һәм БР-ҙың атҡаҙанған табибы Әмир Шамаев сығыш яһағайны. Уның һөйләгәндәрен тыңлағас, миндә: "Их, ҡымыҙ ғына эсеп торһаң, ашамай йәшәргә лә була икән дәһә!"- тигән фантастик уй тыуғайны башта. Ләкин бында бер ниндәй фантастика ла юҡ, ҡымыҙ - хаҡһыҙ (енәйәттәрсә!) онотолған үҙе бер фантастика! Башҡорт далаларына килеп ҡымыҙ менән дауаланыусы XIX быуат ғалимдарының береһе шулай тип яҙып ҡалдырған: "Ҡымыҙға бер өйрәнһәң, уны башҡа төр эсемлектәр менән алыштырыу мөмкин түгел. Ул һыуһынды ҡандырып ҡына ҡалмай, асығыуҙы ла баҫа, тик шул уҡ ваҡытта ҡымыҙ эсһәң, аҙаҡ күпме теләйһең, шунса ашарға ла була, ғөмүмән, ашамай ғына торорға ла мөмкин - асыҡтырмай".

Табип-ғалим булараҡ, Әмир Ғабдрахман улы Шамаев ҡымыҙҙың түбәндәге шифалы үҙенсәлектәрен билдәләй: "Бейә һөтө һыйырҙыҡынан аҡһым һәм углевод составы буйынса ныҡ ҡына айырылып тора. Ошо ике компоненттың нисбәте яғынан бейә һөтө ҡатын-ҡыҙ - әсә һөтөнә яҡын тора. Әлеге көндә Ер шарында йәшәүсе халыҡтарҙың күпселеге аҙыҡты үҙләштереүҙә булышлыҡ итеүсе триптофан, лизин һәм метионин тигән өс төр аминокислотаға мохтажлыҡ кисерә. Ҡымыҙ тап бына ошо алыштырғыһыҙ аминокислоталарҙың ифрат бай сығанағы булып тора ла инде".

Бына ошо һүҙҙәрҙән һуң нисек итеп милләттәштәргә, әйҙәгеҙ, ҡымыҙ эсеп кенә йәшәйек, тип өндәшмәҫһең! Тик ҡайҙан алырға һуң уны - ҡымыҙҙы? Ҡымыҙ илендә ҡымыҙға сарсап йәшәйбеҙ бит байтаҡтан бирле.

Әлбиттә, республикабыҙҙа йылҡысылыҡты үҫтереү мәсьәләһе көн үҙәгенә ҡуйыла, тик эш һүҙҙә генә тороп ҡалмаһын ине. "Йылҡысылыҡ менән ҡымыҙ - әҙер милли бренд. Беҙгә яңынан бер ни ҙә булдырырға кәрәкмәй, ата-бабаларыбыҙ беҙҙең өсөн бөтәһен дә эшләгән", - тип әйткәйне бер сығышында РБ Президенты Р. Хәмитов.

Өфөнөң аҙыҡ-түлек магазиндары кәштәләрендә ҡымыҙ күренгеләй, әлбиттә, ләкин уны һатып алыусы һирәк. Дөрөҫөн әйткәндә, улар кәштәгә килеп ҡунаҡлағансы уҡ эсемлектең шифа бирерҙәй файҙалы мөҙҙәте үтеп киткән була шул инде...

Ә бына ауыл халҡы был йәһәттән отошлораҡ хәлдә. Ауылда теләгән бер (елкәһе булған) кеше бейә тотоп, рәхәтләнеп ҡымыҙ эсеп йәшәй ала. Ойоштороусыһы булһа, ширҡәттәр йәки фермер хужалығына берләшергә мөмкин. Шул саҡта инде улар үҙҙәрен һәм ауылдаштарын ғына түгел, ә тотош район халҡын да яңы бешелгән, шифалы ҡымыҙ менән тәьмин итеп тора ала. Хәйер, бындай изге эш менән мәшғүл уңғандар юҡ түгелдер ҙә республикабыҙҙа, тик беҙ улар хаҡында белмәйбеҙҙер. Ундай ҡымыҙсылар бар икән - эш тәжрибәләре, хәл-әхүәлдәре хаҡында беҙгә хәбәр иттерһәләр икән. "Киске Өфө" гәзите бар республика халҡын уңған ҡымыҙсылар менән таныштырыуға бик шат булыр.

Ҡымыҙҙың организмды ғына түгел, тотош йәшәйешебеҙҙе сәләмәтләндерерлек ҡеүәте бар. Араҡынан ағыуланып, күҙҙәре тонған, мейеләре шыйыҡланған, нервылары ҡаҡшаған алкоголиктарҙы үлемесле һәләкәт ҡосағынан тартып алыуҙа, уларҙы таҙарындырыуҙа, дауалауҙа бер ҙур ярҙам һәм ысын мәғәнәһендә тәбиғи шифа була алыр ине ул - ҡымыҙ!

Халҡыбыҙ сәләмәт һәм һәр саҡ айыҡ булһын, тиһәк, әйҙәгеҙ, ҡымыҙ эсеп кенә йәшәйек!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Хәҙер, шөкөр, барыһы ла бар, табындар муллыҡтан һығылып тора. Тик хәҙер икенсе нәмә башты ҡаңғырта: табынға ҡунаҡтарҙы аптыратырлыҡ ниндәй ризыҡ әҙерләргә һәм уларҙы нисек төрләндерергә? Быны әле лә Яңы йыл табынын биҙәү өсөн төрлө салаттар рецепттары яҙылған журналдар аҡтара, интернетта эҙләнәләр хужабикәләр. Ә, бәлки, мода артынан ҡыуып, төрлө салат-малаттар, яңынан-яңы ысулдар буйынса әҙерләнгән табындарҙы бер яҡ ситкә ҡуйып тороп, үҙебеҙҙең башҡорт милли ризыҡтарына өҫтөнлөк бирербеҙ, йәмәғәт? Ни тиһәң дә, табиптар ҙа, ғалимдар ҙа, кеше ниндәй ерҙә тыуған, уның организмы шул ерҙә үҫтерелгән йәки етештерелгән ризыкты яҡшыраҡ үҙләштерә, тип белмәй әйтмәйҙәр. Бына, мәҫәлән...**

# БАШҠОРТ АШ-ҺЫУЫНАН АУЫҘ ИТӘЙЕК!

### Бишбармаҡ



Башҡорт милли ризыҡтары табынында, моғайын, төп урынды бишбармаҡ алып торалыр. Уны бешереү өсөн мотлаҡ майлы ит кәрәк. Әгәр ит майлы булмаһа, һурпаға ҡаҙ ите ҡушып ебәрергә лә мөмкин. Итте, ҡайнап сыҡҡас, тандыр утта бешерәбеҙ (ҡаҙ итен мотлаҡ ҡайнар һурпаға һалырға!), бешеп сығырға ярты сәғәт ҡала тоҙ һалабыҙ. Бишбармаҡ өсөн бешкән иттең һурпаһы туҡмаслы аштыҡы кеүек күп булырға тейеш түгел.

Аш ҡайнаған арала ҡамыр баҫып, уны йоҡа итеп йәйәбеҙ. Бишбармаҡ һалмаһы ҡаты булмаһын өсөн ҡамыр баҫҡан йомортҡага бер аҙ һурпа ҡушабыҙ. Ҡамыр ҡулға йәбешмәҫлек итеп баҫып, уны бер аҙға табаҡ менән ҡаплап һалып ҡуябыҙ. Һуңынан йоҡа йәймә итеп йәйеп, яҡтары 3-4 сантиметрлы ромбиктар ҡырҡабыҙ.

Ит бешеп сыҡҡас, һурпаны һарҡытабыҙ ҙа, уға ромбиктарҙы һалып бешерәбеҙ һәм бешеп сыҡҡас, уларҙы дуршлагка алып, бер аҙ һарҡытҡас, тәрән тәрилкәләргә йәйеп һалабыҙ, өҫтөнә тигеҙ киҫәктәргә туралған ит, ҡулса йәки ярымҡулса итеп туралған һуған һалабыҙ. Табынға һурпаһын айырым һауытта, йәшел тәмләткестәр ҡушып бирәбеҙ. Ҡорот та тәҡдим итергә мөмкин.

### Бауырһаҡ



Дүрт йомортҡаны күпергәнсе туҡып, уға дүрт ҡалаҡ һыу өҫтәп, бер семтем тоҙ һалып, иләнгән, йылыла ултырған он ҡушып, ҡалаҡ менән генә туҡыйбыҙ. Әүәләрлек масса барлыҡҡа килгәс, онда еңелсә әүәләп, өҫтөнә табаҡ йәки таҫтамал ябып, 30 минутҡа ҡалдырабыҙ. Ошо арала бешереү өсөн май әҙерләйбеҙ. Ҡайнатыуға күп өлөштә көнбағыш майы алына, уға һары май йәки ҡаҙ майы ҡушырға кәрәк.

Ярты сәғәт үткәс, бысаҡ менән кәрәгенсә ҡамыр киҫеп алып, уның киҫелгән яғын онға манып, бау кеүек итеп әүәләйбеҙ. Ошо "бау"ҙы аҙға ғына һалып тороп, шуны тигеҙ генә өлөштәргә ҡырҡабыҙ. Ҡамыр ныҡ онло булмаһын. Бысаҡҡа йәбешмәһен өсөн бысаҡты онға манып-манып алабыҙ, бысаҡҡа ҡамыр йәбешһә, уны икенсе бысаҡ менән ҡырып төшөрәбеҙ.

Майҙы ҡайнатырға ҡуйып, уның ҡыҙғанлығын белеү өсөн бер бауырһаҡты һалып ҡарайбыҙ, ул ҡапыл ҡабармай, яйлап ҡына ҡабара икән, бауырһаҡтарҙы һалырға мөмкин. Бауырһаҡтар ҡабарып сыҡҡас, утҡа ултыртабыҙ һәм уттың ҡыҙыулығын яйлап арттырабыҙ. Бер туктауһыҙ болғап торабыҙ. Шулайтһаң, тигеҙ бешә.

Бешкән бауырһаҡтарҙы дуршлагка һарҡытып алғанда майҙы уттан алып торорға, икенсе партияны һалғанға тиклем майға тағы бер аҙ май өҫтәп, уның бер аҙ һыуынғанын көтөргә тура килер, сөнки ҡыҙыу майға һалһаң, бауырһаҡтар ярыла. Бешкән бауырһаҡтарҙы тәрән табаҡҡа һалып, уның өҫтөнә шәкәр пудраһы һибеп болғарға ла мөмкин.

### Ваҡ бәлеш



Һөттө ҡайнатып, йылымыс ҡына итеп һыуытабыҙ йәки һыу ҡушабыҙ ҙа, йылымыс булғас, әсетке һалып әсетәбеҙ. Мәҫәлән, бер стакан һөткә бер стакан һыу, ярты стакан көнбағыш майы, әсетке, са-малап тоҙ һәм саҡ ҡына шәкәр ҡомо һалабыҙ. Йылы урынға ҡуйып ҡабартабыҙ. Ҡабарғас, ҡамырҙан бер формалағы ваҡ ҡына түнәрәктәр эшләп таҡтаға һалабыҙ. Улар ҡабарғансы фарш әҙерләйбеҙ. Фарш йомшаҡ һәм һутлы булһын өсөн уға бер аҙ һөт йә һурпа ҡушыла, тәмләткестәр һалып болғатыла. Шулай уҡ төрлө ит (һыйыр малы, һарыҡ, ҡаҙ йәки ат ите) ҡушылған фарш та тәмле килеп сыға. Ҡамыр ҡабарғас, уларҙы ҡул менән генә йәйгеләп, әҙер фаршты уртаһына йәйеңкерәп һалабыҙ, фарш тигеҙ булып ятһын. Ҡамырҙың ситтәрен тартыбыраҡ бөрәбеҙ, тап уртаһында тишек ҡалдырабыҙ. Табала май ҡыҙҙырып, ваҡ бәлештәрҙе майға түңкәреп, йәғни тишекле яғын майға тәүҙә һалабыҙ, сөнки киреһенсә эшләгәндә, фаршты һурпаһы һыуынан майға төшөп, май ян-яҡҡа сәсрәйәсәк. Табынға йылы килеш сынаяҡтарға йәшел тәмләткестәр һалынған һурпа менән бирергә мөмкин.

### Бәлеш



Теләһә ниндәй бәлеш бешерер өсөн сөсө ҡамыр уңайлы. Уны маргаринға баҫабыҙ, саҡ ҡына һөт, самалап тоҙ һалабыҙ. Ҡамыр йомшаҡ ҡына итеп баҫыла. Әҙер булғас, уны ике өлөшкә - береһен ҙурыраҡ, икенсеһен бәләкәйерәк итеп бүлергә кәрәк. Ҙурыраҡ өлөштә табаның ситенә сығырлыҡ итеп йәйергә, табаға һалғас, уны алдан әҙерләнгән эслек менән тултырырға кәрәк (эслеккә дөгө менән йөҙөм, ит менән картуф, йәки балыҡ менән дөгө, кәбеҫтә һ.б. һалырға мөмкин). Эслек һалынғас, уның өҫтөнә иретелгән һары май ҡойорға. Йәки эслекте болғаған ваҡытта уҡ уға иретелгән һары май һалып болғарға кәрәк. Аҡ май бармай, сөнки иреһә, уның һыуы сыға. Ҡамырҙың икенсе өлөшөнән йәймә йәйеп, уны бәлештең өҫтөнә ҡапларға, ситтәрен тоташтырып, төрлө формала семәрләргә мөмкин. Бәлеш ҡамырының өҫтө ҡабарып тормаһын өсөн уны тигеҙ генә итеп сәнске менән тишкеләп сығырға кәрәк. Духовкала тандыр ғына утта бешерәбеҙ.

### Ҡаҙылыҡ



Ҡаҙылыҡты йыуабыҙ ҙа (уның яртыһы май, яртыһы ит булһа, яҡшы), самалап тоҙ һөртөп, бер аҙ тундырабыҙ. Тултыра торған эсәкте ебетеп, уның бер башын бәйләп, 3-4 иле ҡалынлығында таҫма һымаҡ итеп ҡырҡылған ҡаҙылыкты тултырабыҙ. Ҡаҙылыҡты бик оҙон итергә лә ярамай. Уртаса оҙонлоҡта булғас, бәйләп, элеп ҡуябыҙ. Бешергәндә ярылмаһын өсөн һыуға һалыр алдынан энә менән тишкеләп сығабыҙ.

### Бауырҙан паштет

Бауырҙы артыҡ ваҡ итмәй генә турап, тоҙ һалып бешерәбеҙ. Бешеп сыҡҡас, һарҡытып, ит турағыстан үткәрәбеҙ, уға һуған, борос, самалап тоҙ ҡушабыҙ. Килеп сыҡҡан массаға аҡ май һалып баҫабыҙ ҙа, табаға һалып, өҫтөнә ҡырғыстан сыр ҡырып, майонезға болғап, бешкәндә аҡмаһын өсөн паштеттың уртаһында саҡ ҡына соҡор яһап, шунда тултырабыҙ. Кишер менән һуғанды табала майҙа ҡыҙҙырып һалырға ла була.

**Яңы йыл табынына ризыҡтарҙы Салауат районының Лағыр ауылынан Земфира ЙӘНТҮРИНА тәҡдим итте.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп тылсымыңды көсәйтергә?

**Был һығымталар һеҙҙең башығыҙға тонналыҡ кирбес кеүек килеп төшөр. Мин һеҙҙең менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ниәтләйем.**

Әгәр һеҙ өндәге төш халәтенә тормошоғоҙҙо яҡшыртыуға йүнәлтелгән күрһәтмәләргә ярашлы инһәгеҙ, был бик һиҙелмәһә лә, рухи батшалыҡ менән таныштығыҙ ҙа инде. Әммә ысынлап та шундай тулыһынса үҙегеҙ лайыҡлы тормош рәхәтен күрер өсөн миңә һеҙгә туранан-тура һөжүм итергә тура киләсәк.

Тәүҙә Аллаһ аңлатмаһын ҡабул итегеҙ. Мин уның хаҡында аңлы рәүештә һүҙ йөрөтмәнем. Аллаһ - ул Иждадсы, шуға ла мин Иждадсы тураһында һүҙ алып барҙым. Әммә Иждадсы үҙен Аллаһ тип атауға һис тә ҡаршы түгел. Мин дә ҡаршы түгел. Шулай булһын да. Аллаһтың барлығын танып, һеҙ уның менән бәйләнеште камиллаштырағыҙ. Аллаһ - ул Иждадсы, Иждадсы - ул Аллаһ. Беҙ Атайыбыҙҙы уның исеменә ҡарамай, уны ҡитғаның теләһә ниндәй мөйөшөндә нисек атауҙарына ҡарамаҫтан яратабыҙ.

**Ошо планетала йәшәгән ваҡыттан нисек күберәк файҙа алырға?** Кешелек планетаның мәңгелек хужаһы түгел. Ғәмәлдә, беҙ бында күптән түгел генә килгәнбеҙ. Әгәр Ер тарихы теүәл бер йыл дауам итеүен күҙ алдына килтерһәк, 1 ғинуар - уның барлыҡҡа килгән, 31 декабрь иһә бөгөнгө көн буласаҡ. Ошо йылдың мөһим этаптарын ҡараһаҡ, бында беренсе ябай бактерия февралдә барлыҡҡа килә, ә беренсе балыҡ - ноябрь һуңында. Динозаврҙар яҡынса 10 декабрҙә барлыҡҡа килә һәм 25-тәрендә планетанан юҡҡа сыға. Кеше тип аталған тәүге йән әйәһе 31 декабрҙә тыуа. Ә беҙ белгән кешелек 15 минутҡа һуңыраҡ, 23 сәғәт 45 минутта барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, беҙҙең ниндәйҙер милеккә хаҡыбыҙ бар, тип уйларға ярамай. Беҙ - был ҡунаҡхананың яңы ғына килеп йәшәй башлаусылары. Ҡанаттарҙы ҡағып, осорға һәм тотороҡло урын биләргә ваҡыт етте.

Планетаның күпселек кешеһе мейеһенең һул яҡ ярымшары менән генә файҙалана, әммә Иждадсы беҙгә уң яҡ ярымшарҙы юҡҡа ғына бирмәгән. Мейенең бер яҡлы ғына эшләүе бихисап проблемалар тыуҙырҙы ла инде. Беҙ үҙебеҙҙе, рухиәткә зыян килтереп, тик матди тормошҡа арнаныҡ. Ҡайһы берҙәребеҙ рухиәткә ял көндәрен генә бүлә, әммә дини биналарҙың тупһаһын аша атлап сығыу менән унда булған нәмәләрҙе онота.

Күптәребеҙ рухиәтһеҙлекте һайлай һәм үҙен хәрби хәрәкәттәр театрына бағышлай, наркопритондарҙы, төрмәләрҙе, эшһеҙҙәр өсөн урындарҙы, дауаханаларҙы тултыра.

Әммә мейеһенең уң яҡ ярымшарын эшләтеүселәр ҡыуаныслыраҡ һәм бәхетлерәк йәшәү рәүешен һайлаған. Быға һеҙ үҙегеҙ ҙә миҫал була алаһығыҙ. Һөҙөмтәлә һеҙ был планетала булыуығыҙҙан ҙур файҙа аласаҡһығыҙ, фәрештәләр, күҙгә күренмәҫ терәк - Илаһ һағы аҫтында әкиәти сәйәхәткә юлланаһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 26 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Забытый". Сериал
22.30 "Судьба на выбор"
23.30 "Большая американская дырка-3", 1-я серия
00.25 Ночные новости
00.40 "Как стать здоровым и богатым"
01.40, 03.05 "Как Гринч украл рождество". Фантастическая комедия
03.00 Новости
03.40 "Михаил Боярский. "Усы и шляпа - вот мои документы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 239-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 210-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 51-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5", 9-я и 10-я серии
23.05 "Дежурный по стране"
00.05 "Исаев". "Пароль не нужен", 5-я серия
01.00 "Вести+"
01.20 "Профилактика"
02.25 "Люди и манекены", 1-я серия
03.50 "Девушка-сплетница-2"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шаман". "Скрытая выгода". Сериал
21.25 "Дикий-2". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.50 "Сыщики". Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 00.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Автограф". Т. Кильмухаметов**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
00.00 "Замандаштар"
00.15 "Льется песня". Поет Р. Ефремов, 1-я часть

## 27 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Забытый". Сериал
22.30 "Сергей Бодров. Где ты, брат?"
23.30 "Большая американская дырка-3", 2-я серия
00.25 Ночные новости
00.50 "На самом дне океана". Драма
02.50, 03.05 "Гладиатор"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 240-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 211-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 52-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5", 11-я и 12-я серия
23.05 "Сваты. Жизнь без грима: Федор Добронравов". Док. фильм
00.05 "Исаев", 6-я серия
01.00 "Вести+"
01.20 "Профилактика"
02.25 "Люди и манекены"
03.50 "Девушка-сплетница-2"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шаман". "Черный Феникс"
21.25 "Дикий-2". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "ГРУ. Тайны военной разведки"
01.25 "Кулинарный поединок"
02.25 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Любимые мелодии"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Они верят в жизнь"**
**18.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым**
**18.15 "Взгляд без слов"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "День спасателя"**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Льется песня". Поет Р. Ефремов, 2-я часть**

## 28 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Забытый". Сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Большая американская дырка-3", 3-я серия
00.25 "Ночные новости"
00.50 "Иностранец". Триллер
02.40, 03.05 "Когда звонит незнакомец"
03.00 "Новости"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 212-я серия
17.55 Праздничный концерт ко Дню спасателя Российской Федерации
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5", 13-я и 14-я серии
23.05 "Сваты. Жизнь без грима: Татьяна Кравченко"
00.05 "Исаев". "Пароль не нужен", 7-я серия
01.00 "Вести+"
01.20 "Профилактика"
02.25 "Честный детектив"
02.55 "Люди и манекены"
04.10 "Девушка-сплетница-2"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шаман". "Самоубийца"
21.25 "Дикий-2"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
00.10 "Таинственная Россия: Остров Русский. Проклятие китайских пиратов?"
01.05 "Квартирный вопрос"
02.05 "Ставка на жизнь". Сериал
04.00 "Сыщики". "Золотой медальон"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.15 "За порогом"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Ашкадар тандары-2011". III Республиканский фестиваль народного фольклора. Передача I**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Всероссийский форум боевых искусств"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**23.45 Парад планет. I тур**

## 29 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Забытый", 4-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Большая американская дырка-3", 4-я серия
00.25 "Ночные новости"
00.50 "Молодожены". Комедия
02.40, 03.05 "Тристрам Шенди: история петушка и бычка". Комедия
03.00 "Новости"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 213-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 58-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5", 15-я и 16-я серии
23.05 "Сваты. Жизнь без грима: Олеся Железняк"
00.05 "Исаев". "Пароль не нужен", 8-я серия
01.00 "Вести+"
01.20 "Профилактика"
02.25 "Горячая десятка"
03.20 "Люди и манекены"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шаман". Сериал
21.25 "Дикий-2"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Женский взгляд"
00.20 "Всегда впереди. РГУ нефти и газа им. И. М. Губкина"
01.15 "Дачный ответ"
02.20 "Ставка на жизнь"
04.00 "Сыщики". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Ашкадар тандары - 2011". III Республиканский фестиваль народного фольклора. Передача II**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Комедии советского кинематографа на башк. яз.**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пятый угол"**
**23.45 Парад планет. II тур**

## 30 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.30 "Поле чудес"
19.55 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.45 "Снова ты". Комедия
01.40 "Голубоглазый Микки". Комедия
03.35 "Шалун"
05.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Мой серебряный шар. Виталий Соломин"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести ПФО"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Здравствуй, мама!" 59-я и 60-я серии
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 Юбилейный вечер Юрия Антонова на "Новой волне"
00.00 "Охота на пиранью". Боевик
03.25 "Частный детектив или операция "Кооперация". Комедия
05.00 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Сильная". Криминальная драма
21.30 "Русская сенсация-2011. Звездные итоги года"
23.35 "С любовью из ада". Остросюжетная драма
01.35 "Король Ральф". Комедия
03.35 "Сыщики". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**16.00 "Предновогодний слет драконов"**
**16.15 "Сулпылар"**
**16.45 "Оставлю вам любовь..." З. Исмагилов**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 Открытый чемпионат по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.45 Парад планет. III тур**

## 31 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Сезон охоты"
07.30 "Особенности национальной охоты в зимний период"
08.45 "Зима в Простоквашино"
09.00 Новости
09.10 "Карнавальная ночь"
10.25 "Золушка"
11.50 Новый "Ералаш"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ирония судьбы". Рождение легенды"
13.00 "Ледниковый период. Гигантское Рождество"
13.20 "Ледниковый период-3: эра динозавров". Полнометражный анимационный фильм
14.50 "Джентльмены удачи"
16.15 "Ирония судьбы, или с легким паром!", 1-я серия
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Ирония судьбы, или с легким паром!", 2-я серия
19.45 "Две звезды"
22.20 "Оливье-шоу". Новогодняя ночь 2012 на Первом"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Оливье-шоу". Новогодняя ночь 2012 на Первом"
02.30 "Дискотека 80-х"

### РОССИЯ 1
05.30 "Чародеи". Мюзикл
08.05 "Стиляги". Мюзикл
10.25 "Лучшие песни-2011"
12.20 "Юмор года"
14.00 "Вести"
14.20 "Юмор года". Продолжение
15.05 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". Комедия
16.45 "Бриллиантовая рука". Комедия
18.30 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия
20.05 "Новые приключения Аладдина". Мюзикл
22.15 "Новогодний парад звезд"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Новогодний голубой огонек-2012"
03.00 "Большая новогодняя дискотека"

### НТВ
05.35 "Каспер"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Морские дьяволы". Сериал
17.15 "Снова Новый". Комедия
19.20 "Опять Новый!" Комедия
20.50 "Очень Новый год"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Очень Новый год". Продолжение
00.30 "Новый год в деревне Глухарево"
04.30 "Бульдог шоу. Лучшее"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 Мультфильм**
**09.00 "Волшебное утро"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.45 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Деловой Башкортостан"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Замандаштар"**
**16.30, 20.30 "Итоги года"**
**17.00 "Сулпылар-2011". Гала-концерт**
**18.00 Новости. Итоги года**
**19.00 "Книга года". Новогодний огонек**
**21.30 "Парад планет". Финал**
**23.00 "Башкорт йыры". Гала-концерт**
**23.45 Новогоднее поздравление Президента РБ Р. З. Хамитова**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Р Федерации Д. А. Медведева**
**00.00 "Башкорт йыры-2011"**

## 1 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 "Две звезды". Лучшее
07.15 "Операция "С Новым Годом!"
09.00 Новости
09.15 "Про Федота-Стрельца, удалого молодца"
10.30 "Джентльмены удачи"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Ирония судьбы, или с легким паром!"
15.10 "Морозко"
16.30 "Шрэк навсегда"
18.00 Новости (с субтитрами)
18.10 "Ирония судьбы. Продолжение". Комедия
20.00 "Елки". Комедия
21.25 "Большая разница". Новогодний выпуск
23.00 "Красная звезда" представляет "20 лучших песен года"
01.05 "Ночь в музее"
02.50 "Пляж"
04.45 "Супердискотека 90-х"

### РОССИЯ 1
05.55 "Лучшие песни"
07.45 "Девушка без адреса"
09.15 Мультфильмы
10.05 "Самогонщики". "Пес Барбос и необычный кросс". Комедии
10.40 "Не может быть!" Комедия
12.20 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика"
14.00 "Вести"
14.10 "Бриллиантовая рука"
15.55 "Иван Васильевич меняет профессию"
17.35 "Песня года"
20.00 "Юмор года"
21.40 "Первый Новогодний вечер с Максимом Галкиным и Николаем Басковым"
22.55 "Новогодние сваты". Комедия
00.45 "Ширли-мырли". Комедия
03.15 "Летучая мышь"

### НТВ
05.25 "Спето в СССР: Ирония судьбы"
06.15 "Сердца трех", 4 серии. Приключения
08.15 "Русское лото"
08.40 "Сердца трех". Продолжение
11.30 "Паутина-2". "Пуля справедливости". Сериал
15.15 "Паутина-2". "Ненастоящий полковник"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Паутина-2". "Кодекс воровской чести"
22.55 "Эээхх, разгуляй!"
01.50 "Бомжиха". Мелодрама
03.50 "Бомжиха-2"

### БСТ
**07.00 "Близзард". Сказка**
**08.30 "Десятое королевство". Приключения**
**10.00 "Баурсак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.30 "Книга сказок"**
**10.45 "Гэлэмэт донья"**
**11.00 "Зеркальце"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Гора новостей"**
**12.00 "В стране Боронзаман"**
**12.40 "Шэп арба"**
**12.50 "Шатлык йыры"**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башмачки". Спектакль**
**16.00 "Дарман"**
**18.15 "Дарю песню"**
**19.30 "Юлдаш йыры-2011". Часть 1-я**
**21.15 "Урал Лото"**
**21.30 "Замандаштар"**
**22.00 "Байык-2011"**

✓ *Был йондоҙлоҡ аҫтында тыуыусылар бүләккә архитектура, скульптура йә һынлы сәнғәт буйынса махсус альбом алыуына шатланыр. Шулай уҡ бүлмәгә йәм бирерҙәй рәсем йә ыҡсым һын бүләк итергә мөмкин.*



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЯҢЫ ЙЫЛ БҮЛӘКТӘРЕ ҺАЙЛАЙЫҠ!

**Ҡуҙы** йондоҙлоғо аҫтында тыуыусы балалар һәм ололар күңеленә лә сағыу, ялтырауыҡлы бүләктәр хуш килер. Улар әүҙем тормош алып барғанлыҡтан, фитнес йә спорт менән бәйле әйбер бүләк итергә мөмкин. Малайҙар супер-мигалкалы уйынсыҡ автомат йә атыш булған компьютер уйынына шатланасаҡ, ә ҡыҙҙар өсөн бүләккә йомшаҡ арыҫлан уйынсығын алыу ҙур ҡыуаныс килтерәсәк.

**Буғаларға** иҙәнгә ҡуйыла торған ваза, энциклопедия йә архитектура буйынса альбом кеүек ҡалын китап бирергә мөмкин. Шулай уҡ яратҡан йырҙар тупланған диск та ҙур ҡыуаныс менән ҡабул ителәсәк. Әммә Буғалар тәм-том батшаһы булыуын иҫегеҙҙән сығармағыҙ, бүләгегеҙҙе ҙур шоколад ҡушып тапшырығыҙ.

**Игеҙәктәргә** аҡыл кимәлен, аң даирәһен киңәйтеү, эштәрҙе тиҙләтеүгә булышлыҡ итерҙәй бүләктәр оҡшаясаҡ. Шунлыҡтан, һәр төр китап та, компьютерҙы камиллаштырыу өсөн тәғәйенләнгән программалар ҙа берҙәй ихлас ҡабул ителер. Игеҙәктәр бүләккә кеҫә телефоны алыуға ла шатланыр. Балаларға логик уйындар, һәр төр башваттыстар һәм китаптар бүләк итергә мөмкин. Игеҙәк ҡатын-ҡыҙҙар йорт эштәрен мөмкин тиклем тиҙерәк атҡарып сығыуҙы хуп күрә һәм һеҙҙе кухня комбайны бүләк итеүегеҙ өсөн битәрләмәйәсәк.

**Ҡыҫалалар** һаҡсыл һәм хәстәрлекле булғанлыҡтан, әйберҙәрҙең сифатына бик ҙур иғтибар бирә. Ир-егеттәргә ҡиммәтле көшөлөк, баҫалҡы тондарҙағы галстук бүләк итергә мөмкин. Был йондоҙлоҡ аҫтында донъяға килеүсе ҡатын-ҡыҙ үҙенең наҙлылығын, йомшаҡлығын айырып торған бүләктәрҙе оҡшатыр. Балаларға ҙур әкиәттәр китабы тап килер. Ҡыҫаланың өйөнә гөлләмә тотоп килергә онотмағыҙ.

**Арыҫланды** уратып алған әйберҙәр зиннәтле, ҡупшы, бай һәм һуңғы модаға яраҡлы булырға тейеш икәнлеген белеһегеҙҙер. Кес кенә һауыттағы иң ҡиммәтле хушбуй, алтын, гәүһәр Арыҫлан күңеленә хуш киләсәк. Арыҫландар бүтәндәрҙән сағыулыҡ менән айырылып тороуҙы ярата, шуға күрә, ҡатындар өсөн косметика йыйылмаһы шәп бүләк. Малайҙар мажаралар китабы йә фильмына, ҡыҙҙар һәр төр сағыу кейемгә шатланыр.

**Ҡыҙ** йондоҙлоғонда тыуыусылар "Бүләк булһа ла, файҙаһы тейергә тейеш" тигән фекерҙә. Ҡыҙҙарға бирелгән бүләк ҡулланыуға уңайлы һәм ныҡлы булырға тейеш. Буғаларҙан айырмалы рәүештә, Ҡыҙҙар ыҡсым әйберҙәргә өҫтөнлөк биреүсән. Балаларға бүләккә ҡурсаҡ йә ваҡ деталле конструктор уйынсығы алыу отошло булыр.

**Үлсәүҙәр** өсөн бүләк тәү сиратта матур булырға тейеш. Әммә саманан тыш сағыу, күҙгә ташланып барған әйберҙәр Үлсәүҙәр күңеленә ятмаясаҡ. Был йондоҙлоҡ аҫтында тыуыусылар бүләккә архитектура, скульптура йә һынлы сәнғәт буйынса махсус альбом алыуына шатланыр. Шулай уҡ бүлмәгә йәм бирерҙәй рәсем йә ыҡсым һын, классик әҙәбиәт йә музыка өлгөһө бүләк итергә мөмкин. Ҡыҙ балаға селтәр итәкле ҡурсаҡ, ә малайға компьютер уйыны бүләк итә алаһығыҙ.

**Саян** өсөн тәғәйенләнгән бүләк үҙенсәлекле булырға тейеш. Әгәр ҙә Яңы йыл бүләге итеп китап бирергә уйығыҙ бар икән, триллер, детектив һәм психологик әҙәбиәт теҙелгән кәштәләр янында туҡталып китергә онотмағыҙ. Саяндар ҡурҡыныс, тулҡынландырғыс билдәһеҙлеккә ылыға. Был йондоҙлоҡ аҫтында тыуыусыларҙың күбеһе экстремаль спорт төрҙәре менән дә мауыға. Улар өсөн серфинг, ҡаяға менеү менән бәйле махсус ҡорамалдар алырға була. Саян ҡатын-ҡыҙ яҡшы хушбуй бүләк итеүегеҙҙе юғары баһалар.

**Уҡсы** йондоҙлоғо аҫтында донъяға килеүселәр сәйәхәт итергә ярата. Әгәр ҙә мауыҡтырғыс сәйәхәт ойоштороорға форсатығыҙ юҡ икән, уның менән бәйле барлыҡ әйберҙәрҙе алдан бүләк итә тора алаһығыҙ. Сит ил мәҙәниәте, теле, серфинг менән бәйле әйберҙәр юғары баһаланыр. Алыҫ илдәрҙән ҡайтҡан сувенирҙар ҙа Уҡсылар өсөн яраҡлы бүләк. Балаларға хәрәкәтле уйындар менән бәйле һәр нәмә оҡшар.

**Ылаҡтар** нәзәкәтле, классик стилдәге әйберҙәргә өҫтөнлөк бирә. Шуға күрә улар өсөн яҡшы бүләкте антиквар кибетендә эҙләргә кәрәк. Әгәр ҙә китап алһағыҙ, аҙ һан менән баҫылған классик әҙәбиәт өлгөһөн, йә энциклопедия һайлағыҙ. Ылаҡтарға үҙенең йәмғиәттә тотҡан урынын күрһәткән әйберҙәр ҡәҙерле. Биҙәнеү әйберҙәре лә ҡиммәтле таштарҙан булырға тейеш. Шулай уҡ был йондоҙлоҡ аҫтында тыуған ҡатын-ҡыҙҙар төрлө гөлдәр үҫтерергә ярата. Уларға үҫемлектәр, япон сәнғәте икебана тураһында китаптар бүләк итергә була.

**Һыуғоярҙарҙы** аңлаған яҡын дуҫтары һәм туғандары эргәләрендә булһа, улар өсөн ошонан да ҡиммәтерәк бүләк юҡ. Шулай ҙа улар экзотик сувенир йә ғәҙәти булмаған көндәлек тормош кәрәк-ярағын бүләккә алыуҙан баш тартмаҫ. Һыуғоярҙарға заманса әйберҙәр оҡшай, телевизор, интернет селтәре булған кеҫә телефоны менән бүләкләргә мөмкин. Һыуғояр өсөн билдәһеҙ, ят, үҙенсәлекле нәмәләр тураһында яҙылған китаптар ҡәҙерле. Шулай уҡ ололар ҙа, балалар ҙа ғәҙәти булмаған өй хайуанын алып ҡайтыуығыҙға ҡыуаныр. Мәҫәлән, яҡындарығыҙға бесәй урынына көҙән бүләк итегеҙ.

**Балыҡ** йондоҙлоғо аҫтында тыуыусыларҙың барыһы ла романтик. Аҙға ғына булһа ла хыял йә әкиәт донъяһына сәйәхәт иттергән бүләктәр тап килер улар өсөн. Йыр бүләк итеү - иң шәп вариант. Бынан тыш, Балыҡтар яҡшы хушбуйҙы юғары баһалай. Балалар өсөн иң мөһиме байрам төнөнөң әкиәти мажараларға бай булыуы. Тик ниндәй бүләк алыуығыҙ тураһында алдан әйтә күрмәгеҙ! Балыҡтар сюрприз ярата.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Өфө ҡалаһында йәшәүсе

**Сәрмәдиә Мирғәлим ҡыҙы ӘСӘҘУЛЛИНАны**

оло юбилейы - 70 йәше менән ҡайнар ҡотлайым!

Оло йөрәкле, киң күңелле, һөйкөмлө кеше Һеҙ. Башҡаларға эшләгән изгелектәрегеҙ үҙегеҙгә игелек булып ҡайтһын. Киләсәктә лә дуҫтарығыҙҙың, яҡындарығыҙҙың иғтибарын тойоп, ҡыуаныс-шатлыҡта, етешлек-именлектә йәшәргә яҙһын. Һеҙгә оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ һәм күңел тыныслығы теләйем.

**Ҡотлау менән Илүзә.**

* * *

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Ҡырмыҫҡалы районы** Шишмә ауылынан Гөлсинә Мөхәрәмованы, Иҫке Муса ауылынан Факиһа Өмөтбаеваны, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Назиә Бәшированы, **Ауырғазы районынан** Гөлнара Мөхәмәтйәновны, Фәүзиә Шәйәхмәтованы, Үрге Ләкәнде ауылынан Рәсимә Йәғәфәрованы, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Нажиә Баҡыеваны, **Өфө ҡалаһынан** Рәүиҙә Нәбиеваны, Нәзирә Насырованы, Гәүһәр Батталованы, **Әбйәлил районы** Амангилде ауылынан Йәүҙә Камалованы, Зөһрә Мәһәҙиеваны, Гөлсибәр Яҡуповалы, Мәләүез районы Ҡотош ауылынан Зифа Вәхитованы, **Баймаҡ районы** Ғәҙелбай ауылынан Фәрзәнә Ғәлинаны, Үрге Иҙрис ауылынан Рәмзиә Мостафинаны, Юлай Мостафинды, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Әнүзә Сираеваны, **Дыуан районы** Арый ауылынан Йәмил Нуриевты, **Балаҡатай районы** Яңыбай ауылынан Рәйсә Закированы, Айҙаҡай ауылынан Нуризә Шархиеваны, Түбәнге Үтәш ауылынан Нурия Йомағоловалы, **Туймазы районы** Илсембәт ауылынан Зөлфиә Маннановалы, **Мишкә районы** Яңы Аҡбулат ауылынан Дуня Александрованы, Бабай ауылынан Г. Ғабдулбариеваны, Яңы Троицк ауылынан Лилиә Муллағоловалы, **Архангел районы** Архангел ауылынан Айгөл Яппарованы, **Күгәрсен районы** Аҙнағол ауылынан Владик Ҡыҙрасовты, **Учалы районы** Наурыҙ ауылынан Мәфрүзә Камалованы, **Бөрө ҡалаһынан** Мөҙәрис Солтановты, **Бөрө районы** Суслов ауылынан Зилә Князеваны, **Ейәнсура районы** Ибрай ауылынан Миңһылыу Илембәтованы, Иҫәнғол ауылынан Рәзинә Әбделғужинаны, **Бәләбәй ҡалаһынан** З. Шириязданованы, **Йәрмәкәй районы** Күпсәнәй ауылынан А. Константиновалы, Түбәнге Ҡарамалы ауылынан Рәзидә Лотфуллинаны, **Илеш районы** Мари Мәнәүеҙе ауылынан Рәфиҙә Ғәлләмованы, Ишҡар ауылынан Гүзәл Садретдиновалы, **Стәрлетамаҡ районы** Күсәрбай ауылынан Гөлнара Әлимбаеваны, **Дәүләкән районы** Сапай ауылынан Фәнүр Лотфорахмановты, **Бүздәк районы** Ташлыкүл ауылынан Регина Хәкимованы, **Бүздәк ауылынан** Нәфисә Хөснөтдиновалы, Гөлнара Сәләхованы, Урҙайбаш ауылынан Гүзәл Ураҙбаеваны, Шарбаш ауылынан Лиза Атнағоловалы, **Федоровка районы** Иҫке Сытырман ауылынан Фирҙәүес Солтанғоловалы, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Эльвира Суфияновалы, **Әлшәй районы** Раевка ҡасабаһынан С. Шәриповалы, **Дәүләкән ҡалаһынан** А. Юлыеваны, **Яңауыл ҡалаһынан** Г. Миңлейәрованы һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Сәләмәтлегегеҙ ныҡлы, донъяғыҙ имен, бәрәкәтле булһын, киләсәктә аҡ бәхеттәр, тос уңыштар өлөшөгөҙгә төшөп торһон.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

## ЯРҘАМ ИТӘЙЕК!



Әбйәлил районы Хәлил ауылында йәшәүсе 11 йәшлек балаға - **Сәғитов Фәнгиз Васил улына - ашығыс рәүештә операция талап ителә.** Диагнозы - лейкоз. Операцияны тик сит илдәге клиникала яһайҙар һәм ул түләүле. Шуға күрә лә яңғыҙы өс бала тәрбиәләгән әсә һеҙҙән аҡсалата ярҙам һорай.

**Балаға ярҙам итегеҙ, зинһар!**

Лицевой счет:
**42307.810.7.0643.4006529,**
Сбербанк России, доп. Офис с. Аскарово, ул. Шаймуратова, 1.

*ИҒЛАНДАР*

## Ҡыш бабай, Ҡарһылыу һәм уларҙың дуҫтары һеҙҙән шылтыратыуҙар көтә!

Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында Яңы йыл кисәләре, шулай уҡ өлкәндәр өсөн корпоративтар ойошторабыҙ. 2012 йыл хужаһы Аждаһа ҡатнашлығында ҡыҙыҡлы сценарийҙар ҙа бар. Байрам кисәләре башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла. Шулай уҡ байрам алдынан Ҡыш бабайҙы өйгә саҡырып, балаларға оло шатлыҡ бүләк итергә лә мөмкин.

**"Афарин" ижад студияһы.**
**Телефон: 8-927-08-77-548.**

* * *

Дәүләт бюджет учреждениеһына төҙөлөш буйынса **директор урынбаҫары, юрист, ғилми хеҙмәткәр** талап ителә. Белешмә өсөн телефон: **272-77-43.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24, 25, 30 декабрь "Алтын аҫҡыс - remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 11.00, 14.00.

**25 декабрь** Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Шәүрә Дилмөхәмәтованың юбилей кисәһе

**26, 27, 28, 29 декабрь "Маугли, джунгли китабы"** (Р. Киплинг), Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу менән шыршы тирәләй Яңы йыл әкиәте. Башлана 11.00, 14.00.

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**24-30 декабрь "Аждаһаны кем уятыр?"** (Л. Исҡужина), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 11.00, 13.00.

✓ *Кеше йөрәген аңлау Йыһан серҙәрен аңлауҙан да ауырыраҡ. Йыһандың эштәре, йәғни уның яҙы һәм көҙҙә, йәйҙә һәм ҡышты булдыра икәне һәр кемгә асыҡ, ә бына Кеше йөрәгендә ниндәй хис-тойғолар йәшеренеүен аңлауы ауыр.*

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# БАРМОЛЕЙҘАРЫҢ - КҮП, АЙБОЛИТТАРЫҢ - АҘ,

## шуға әрней күңел, Ҡыш бабай!



**Үткән һанда сәсәндәребеҙҙең Яңы йыл теләктәре әйтеүҙәрен һорағайныҡ. Бына ул теләк-ҡотлауҙар.**

**ЫРЫҪ:**
Дарман туған, яҡтылыҡҡа
Аҡмуллабыҙ өндәне.
Хәҡиҡәтте аңлар өсөн
Мөмкинлектәр күп хәҙер.
Мәғлүмәтте үҙем алам
Етди канал, баҫманан.
Бик күп зомби-йәшниктәрҙең
Тауышын, өнөн ябам.
Бик тә файҙалы радио
Булыр "Мәскәү ауазы".
Арҙаҡлы уҙамандарҙы
Тыңлап аҡыл аламын.
Эткол туған, "егет һүҙе"-
Афарин шәхестәргә.
Әсәм ҡулланды был һүҙе
"Шәп, һәйбәт" мәғәнәлә.
Әле билдәһеҙ бит әле
Кем ағай ҙа, кем бабай?
Олоғая, бер тигеҙбеҙ,
Йәштә эш тормай былай.
Әгәр килһә һайлауҙарға
Һәммә тере һайлаусы,
Күҙ буярға алдаҡсыға
Ай-һай, ҡыйын булмаҡсы!
Ихтилалдар, ҡан ҡойоуҙар
Үткән тарихыбыҙҙа.
Инҡилапты уҙғарырбыҙ
Тыныс, закон юлында.
Кешелек донъяһы йәшәй
Таянып хоҡуҡтарға,
Ул хоҡуҡтар шулай уҡ бар
Рәсәй закондарында.
Тағы ла бар Ер шарында
Халыҡ-ара закондар.
Уларынан тайпылмаҫҡа
Рәсәйҙең вәғ(ә)ҙәһе бар.
Тормошто яҡшыртыу юлы
Төп халыҡтың ҡулында.
Тыныс йыйын-майҙандар -
Башҡа ысул юҡ, туған!
Яңы йылда йәш быуынға
Баяғы иҫке теләк:
Башҡорт, рус, инглиз телен
Мотлаҡ шәп белеү кәрәк!
Яңы йылда - яңы халыҡ,
Хуш күңелле аждаһа.
Буранайҙа һайлау тағы,
Аждаһаны алдама!

**ДАРМАН:**
Имен-аман ҡаршылағыҙ
Ал таңын Яңы йылдың.
Балҡыһын яҡты йондоҙҙай,
Аҡ нурҙар ябырылһын!
Донъя йәме татыулыҡта,
Йәшәү матур тиңлектә.
Бирһен Хоҙай ныҡлы һаулыҡ,
Иркен һулыш, киңлектәр!

**АҠЫҠ:**
"Киске Өфө", рәхмәт һиңә
Беҙҙе һиҙгән, күргән өсөн!
Беҙҙең әйткән фекерҙәрҙән
Әйтеш ебе үргән өсөн!
Киң күңелле, изгелекле
Кеше булып ҡалайыҡ гел.
Ап-аҡ ҡарҙар яуып торһон,
Иман нурын алайыҡ гел.
Уныш үрҙәренә үрлә,
"Киске Өфө" - хисле Өфө,
Ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшә,
"Киске Өфө" - көслө Өфө!

**БАТЫР:**
Йоҡлап ятһаҡ, юғалабыҙ -
Дөрөҫ әйттең, Ырыҫ братым:
Дөйөнҙе бәйләгәс кенә,
Аллаға тапшыраһың.
Кәрәк булһа, майҙандарға
Беҙ ҙә сығабыҙ,
Дошмандарҙы беҙ ҡырабыҙ,
Доғабыҙ - ҡылысыбыҙ.
Дәүләт тиһең дә йөрөйһөң,
Дәүләт - япраҡ саҡлы ғына,
Күпме уйҙар, күпме асыш
Исламдан сыҡты бына!
Ислам - ул гәҙеллек,
Ислам - ул әҙерлек
Хөкөм Көнөнә,
Ислам - ул... ул...
Берҙән-бер юл
Һәммәһенә!
Нимә була тағы Ислам?
Еттек төрлө һүҙҙәргә.
Тик нимәгә ҙур ағастың
Япраҡтарын өҙөргә?
Әҙләмәгеҙ башҡа юлдар,
Ҡайтығыҙ асылығыҙға,
Тәүбә итеп, гәфү үтенеп
Һеҙ шарран асылығыҙ ҙа,
Йүнәлегеҙсе Аллаһҡа.
Юҡ илаһ Унан башҡа!
Теләгемде һалмайым мин
Ҡыш бабайҙың тоғона -
Һеҙҙең бөтәгеҙ өсөн дә
Аллаһҡа ҡылам доға!

**ЭТКОЛ:**
Яңы йылға ҡотлау ҡабул итегеҙ,
Яҡын күргән кешеләргә илтегеҙ,
Хәсрәтегеҙ ташҡын булып ситкә аҡһын,
Шатлығығыҙ гөлдәр кеүек сәскә атһын!
Тыныс йоҡо теләп һеҙгә ҡояш батһын,
Иртән сәләм, тиеп көләп баҡһын!
Таң елдәре сәсегеҙҙән һыйпап үтһен,
Ҡояш һеҙгә шәлкем-шәлкем нурын һипһен!
Бәйге тамам, яҙмыш беҙҙе айырып китә,
Йөрәк әйтә: "Дуҫтарыңды ташлап китмә"!
Донъя тыныс түгел:
Бармолейҙарың - күп,
Айболиттарың - аҙ,
Шуға әрней күңел, Ҡыш бабай!
Тыныс булһын төндәр,
Аяҙ булһын көндәр.
Ожмах кеүек өндәр
Шуны килтер беҙгә, Ҡыш бабай!
Аҡ ҡарҙарға баҫып,
Ап-аҡ тоғон асып,
Аҡ толобон кейеп,
Аҡ бурандар өйөп,
Яңы йылда килде Ҡыш бабай,
Аҡ күңелең менән,
Пак күңелең менән,
Аҡ күгәрсен һынап,
Хызыр Ильяс булып
Килдеңме һин Ергә, Ҡыш бабай!
Бүләктәрең күптер,
Юҡтын үҙе юҡтыр,
Асып күрһәт тоғон, Ҡыш бабай!
Унда ниндәй бүләк,
Асып тоғон күрһәт?
Әллә яңылышып,
Кемгәлер әсе яҙмыш
Һалманыңмы унда, Ҡыш бабай?
Хәсрәтемдең утын
Йөрәгемә йотоп,
Күккә ҡуйҙым уны ҡаҙаҡлап.
Дуҫтарыма - нурым,
Ҡалһын ошо йырым,
Мин тегендә күскәс, аҙаҡтан.
Һау булығыҙ, дуҫтар,
Әгәр яҙмыш ҡуша,
Осрашырбыҙ әле тағы ла.
Ун икенсе йылда
Аллабыҙ бойорһа,
Осрашырбыҙ "әйтеш-майҙанда"!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Сентябрь айында "Ниңә арта фәҡирлек?" тигән һорауға яуап эҙләүҙән башланып киткән "Смснамә - шиғри әйтеш"ебеҙ аҙағына ла килеп етте. Башта уҡ шуны әйтке килә: гәзитебеҙҙәге был шиғри бәхәс беҙ көткәндән дә уңышлы килеп сыҡты һәм республикабыҙҙың киң йәмәғәтселек иғтибарына лайыҡ булды. Һәр хәлдә, район-ҡалаларға осрашыуҙарға барғанда уҡыусыларыбыҙ ауыҙынан был яңылыҡҡа ҡарата тик хуплау һүҙҙәре генә ишетәбеҙ. Күп кенә уҡыусыларыбыҙ смс-әйтешткә ҡатнашыусыларҙың кемлеген белергә теләй. Был да тәбиғи теләк. Шулай ҙа беҙ алдағы йылда ла әйтеште тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итеп ойоштороорға ниәтләнеү сәбәпле, сәсәндәребеҙҙең исемдәрен әлегә атамаҫҡа булдыҡ, сер асҡысын тағы ла төпкәрәк йәшерергә ҡарар иттек. Әммә, әйе, шиғри әйтештә еңеүселәрҙең кем икән булыуын бер нисек тә йәшерә алмайбыҙ, алдағы йылда улар үҙҙәренә яңы псевдоним алыр тип уйлайбыҙ.**
**"Смснамә - шиғри әйтеш"тә иң отҡоро, төртмә һүҙле, сәсән телле, кинәйәле аҡыллы, ишаралы ғаҡыллы итеп Эткол сәсәнде таныныҡ. Ул - Баймаҡ районы Икенсе Эткол ир-уҙаманы Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ булып. Ул кеҙә телефоны менән бүләкләнә.**
**Редакция шулай уҡ смс-әйтештә әүҙем ҡатнашыусы ике сәсәнгә дәртләндереү бүләге биреүҙе кәҙаллағайны. Улар: әйтешебеҙгә сәйәси төҫ, конструктив көс биреүсе Ырыҫ сәсән (ул - Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе милләттәшебеҙ Дауыт АМАНГИЛДИН) менән беҙҙе иманға, дингә саҡырыусы Батыр сәсәнебеҙ (ул - БДУ студенты, Ишембай районы Әхмәр ауылы егете Булат КӘРИМОВ). Был сәсәндәребеҙ башҡорт телендәге Ҡөрьән-Кәрим китабы менән бүләкләнә.**
**Шулай уҡ шиғри әйтештә әүҙем ҡатнашыусы Дарман, Аҡыҡ, Сулпан, Сәсәниә, Мәҙинә, Гөлкәй, Нуғай, Саян, Арыҫлан, Ағинәй, Булат, Бәндәбикә һәм башҡа сәсәндәребеҙгә әйтештә күтәрелгән мәсьәләләргә битараф булмағандары өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, алдағы йылдағы зиһен, тел, аҡыл ярыштарында уңыштар теләйбеҙ!**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАУЫШЛЫ ЙОРТТАН...

## тау артына ҡас!

Беҙҙең тормошобоҙҙағы күңелһеҙлектәрҙең яртыһы "Юҡ" тигән һүҙҙе тиҙ генә әйтмәй, "Эйе" тигәнен тиҙ генә әйтеү менән бәйле.

**(Бернард Шоу).**

Сыңйырҙарын ысҡындырыу өсөн кешегә бар мөмкинлектәр һәм саралар бирелгән.

**(Оноре Мирабо).**

Икеләнеү - ул дошман: тәүәккәл аҙымдан ҡурҡырға мәжбүр итеп, ул беҙҙе яулап була торған нәмәләрҙән мәхрүм итә.

**(Вильям Шекспир).**

Атың яман булһа, һатып ҡотолорһоң. Ағай-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң. Ҡатының яман булһа, нисек ҡотолорһоң?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ-үҙенде нимәгәләр дәртләндерер өсөн иң башта кемдәлер дәртләндереп ал...

**(Марк Твен).**

Тормошта алйоттар ғына еңеү яулай, ә аҡыллылар юлында күп кәртәләр күреп, ҡаушай һәм еңеүгә табан аҙым да атламай, туктап ҡала...

**(Эрих Ремарк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Конфуций әйтеүенсә, Кеше йөрәген аңлау Йыһан серҙәрен аңлауҙан да ауырыраҡ. Йыһандың эштәре, йәғни уның яҙы һәм көҙҙә, йәйҙә һәм ҡышты булдыра икәне һәр кемгә асыҡ, ә бына Кеше йөрәгендә ниндәй хис-тойғолар йәшеренеүен аңлауы бик уҡ аңһаттан түгел. Шуға ла Конфуций кеше өсөн туғыҙ һынау тәҡдим итә:**
**-тоғролоғон тикшереү өсөн кешене алыҫ юлға ебәреү кәрәк;**
**-ихтирамлы булыуын тикшереү өсөн кешене алыҫ булмаған урынға ебәреү кәрәк;**
**-һәләтлеген тикшереү өсөн кешегә ауыр үтәлә торған эш ҡушырға кәрәк;**
**-отҡорлоғон тикшереү өсөн кешегә көтөлмәгән һорау биреү кәрәк;**
**-ышаныс буламы, юҡмы икәнен тикшереү өсөн кеше алдына тиҙ генә ҡарар ҡабул итә торған мәсьәлә ҡуйырға кәрәк;**
**-намыҫлылығын тикшереү өсөн кешегә байлыҡ ышанып тапшырырға кәрәк;**
**-түҙемлеген тикшереү өсөн кешегә ниндәйҙер хәүеф тураһында хәбәр килтерергә кәрәк;**
**-ниндәй насар ғәҙәттәре барлығын белеү өсөн кешене иҫерткәнсе эсереү кәрәк;**
**-тотанаҡлылығын тикшереү өсөн кешене ҡатын-ҡыҙҙар араһында тотоу кәрәк;**
**Ошо туғыҙ һынауҙан һуң кеше тураһында бер фекер төйнәргә була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
23 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 5081